Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ март аҙағына тиклем 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙыла ала. Март айында 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан бераү микротулҡынлы мейес отасаҡ. Беҙҙең индекстар: 50665 - алты айға 330 һум 24 тин, 50673 - 360 һум 24 тин.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 МАРТ (БУРАНАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№12 (430)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Әсәлек капиталы"н...



5 өҙгөсләүселәр ҡулына ҡапма

Нисек йәшәйһең, студент?



Осон осҡа ялғап инде...

6

Бәхет һинең үҙеңдә...



күңел төпкөлөндәге утрауҙа

11

Айыуҙың кешегә туғанлығы бармы?



13

14 ТВ-программа

МОНОЛОГ

**Һәр бер башланғыстың үҙ энтузиасы була. Шул уҡ ваҡытта беҙ шуны ла беләбеҙ: энтузиазм бөткән урында шәхси мәнфәғәт башлана. Бик-бик аҙҙар ғына ғүмеренең аҙағынаса энтузиаст булып ҡала ала. Был аксиома барлыҡ инҡилаптарға, эволюцияларға, үҙгәртеп ҡороуҙарға хас. Ошо күҙлектән ҡарағанда, рәссам, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтовты беҙ үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап милли яңырыу хәрәкәтенең профессиональ энтузиасы, тынғыһыҙ эҙәрмән итеп беләбеҙ. Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһының яңыртылған милли символикаһын булдырыуға ҙур өлөшөн индереүсе, ошо хаҡта тәүге һүҙҙәрҙе әйтеүселәрҙең береһе лә ул Илдар. Бынан биш йыл элек республикабыҙҙа "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубын да ул ойоштороҙо. Ул етәкләгән клуб ағзалары йыл һайын 1812 йылда Наполеон армияһы менән ҡанлы алыш үткән Бородино яланына барып, тарихи бәрелеште кәүҙәләндергән реконструкция-фестивалдә ҡатнаша.**
**Белеүебеҙсә, алдағы 2012 йылда илебеҙ яҙмышын хәл иткән Француз яуының 200 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Был айҡанлы "Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенең 200 йыллығын Башҡортостан Республикаһында байрам итеү тураһында" (278-се ҡарар. 20.06.2009 йыл) Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары ла бар. Түбәндә ошо мөһим сараға әҙерлек, дөйөм алғанда, был сараның әһәмиәте хаҡында фекер йөрөтә Илдар Ғиндулла улы.**

# ОЛАТАЙҘАРҘЫҢ РУХ ЮҒАРЫЛЫҒЫ

## Парижғаса барып еткән...



### Байрам ғына түгел...

1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығын билдәләү ябай ғына сара түгел, ҡасандыр Ватаныбыҙ яҙмышы хәл ителгән ваҡытта халҡыбыҙҙың баҙап ҡалмауын иҫкә төшөрөүсе, ошо юҫыҡта үҙебеҙҙең данлы тарихҡа хаҡлы икәнебеҙҙе раҫлаусы һәм киләсәгебеҙҙе хәл итеүсе байрам. Әле яңыраҡ ҡына Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында ошо ваҡиғаға арналған һөйләшеү үткәндә Фәндәр академияһынан килгән бер йәш белгес: "Ниңә кәрәк ул беҙгә унда ҡатнашып йөрөргә, ул беҙгә нимә бирә?" - тигән белдереү яһаны. Был бер ясылыҡта ғына фекер йөрөтөүсе йәш башҡорт кешеһенең һүҙҙәре. Йәш ғалим шулай фекер йөрөткәс, башҡаларҙың ни уйлауы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. "Беҙ Аллаға ғына табынабыҙ", тип яуап бирҙе йәш белгес минең артабанғы һорауыма. Ғөмүмән, ниндәйҙер анһыҡ эш башҡарырға ҡулынан килмәгән күп кенә йәштәребеҙ барыһын да Аллаға тапшырыуҙы хуп күрә. Мин Аллаһу Тәғәләне инҡар итмәйем, әммә Ҡөрьәндә яҙылған "Сәбәп ҡыл" һәм "Ниәт ит" тигән һүҙҙәрҙе уҡығаным бар.

Беҙҙең "Төньяҡ амурҙары" клубы бынан 5 йыл элек милләтебеҙҙең халыҡ-ара ауырлыҡ брендын булдырыу өсөн дә төҙөлдө. Беҙҙә был бренд ниндәй кимәлдә торошҡа ашырыла тип уйлайһығыҙ? Уңайһыҙ булһа ла әйтәм: Өфө спирт заводы "Төньяҡ амурҙары" тигән араҡы һәм бальзам ғына сығара. Шуның менән вәссәләм. Беҙ былтыр Можайскиҙа 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарына һәйкәл ҡуйҙыҡ. Шунда һис юғы юл сығымдарын ҡаплау өсөн ярҙам итеүҙәрен һорап, спирт заводына мөрәжәғәт иткәйнек, беҙгә бер тин дә бирмәнеләр. Автокран менән бер тонналыҡ ташты кузовка һалыр өсөн дә ярҙам итмәнеләр хатта. Юл сығымдарын "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы идараһы рәйесе Илдар Юлбарыҫов ҡапланы, һәйкәлдең ижади мәсьәләләрен мин хәл иттем. Әлбиттә, "Бородино көнө - 2010" сараһында ҡатнашыуҙа, 1812 йылдағы Ватан һуғышында ҡатнашыусы башҡорт яугирҙарына һәйкәл асыуҙа беҙ республикабыҙ Президенты Рөстәм Хәмитовтың ярҙамына таяндыҡ. Бынан тыш, беҙҙең менән Бородино яланында үткән сараларҙың башынан алып аҙағынаса ҡатнашыусы БР Мәҙәниәт министрлығы вәкиле Шәфҡәт Тутаевка, Башҡортостан "Юлдаш" телевидениеһы ижади төркөмөнә, Илшат Ҡанһөйәров етәкләгән "Мәскәү башҡорттары" ойошмаһына рәхмәтлебеҙ.

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АҒАЙ-ЭНЕ ТАЛАШЫР...

**Был юлы инде "Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр" тигән әйтемдең мәғәнәһен асыҡлап, унда һалынған фекер ебенең осона сығып ҡарайыҡ. Бер яҡтан уйлағанда, еңел генә аңлашыла төҫлө ундағы йөкмәтке: ағай-эне талашмай торамы ла, атҡа менһә, ярашмай торамы? Икенсе, өсөнсө яҡтан ҡарағанда...**

Икенсе яҡтан ҡарағанда, ил, ер, дәүләт, милләт именлеге, ошо изге төшөнсәләрҙе һаҡлау-яҡлау өсөн көрәш башҡа барлыҡ тормош ваҡлыҡтарынан өҫтөн тора тигәндә аңлата бит был әйтем. Элек-электән "атҡа менеү", "атҡа атланыу" төшөнсәләре илйортҡа яу бәләһе янағанда ир-азаматтарҙың изге яуға күтәрелеүен аңлатҡан. Ул саҡта үҙара низағтар, аңлашылмаусанлыҡтар барыһы ла артҡы планға күсеп, быға тиклем берберенән күрә алмаҫтай хәлгә етешкәндәрҙең йөрәге ат тояғы тауышына ҡушылып, тояҡтар тауышы шауы аша бергә, бер йөрәк булып тибергә тотонған. "Башҡорттоң йөрәк тибеше ат тояғы тауышына көйләнгән" тигән аңлау ҙа ошонан киләләр, тим. Йөрәктәре бергә типкәндәрҙең, әлбиттә, уй-ниәттәре лә, маҡсаттары ла бер иш була. Башҡа төрлө уйлағандар был төркөмдә була алмай.

Малай саҡта һабантуй бәйгеһендә атта сабышҡанда бәйгеләш малайҙарҙың йөрәк тибешен әле булһа ла үҙемдә тоям, һәр хәлдә, уларҙың береһе менән дә яманлашманым, береһенең дә минә ҡарата насар ҡарашын тойманым. Ошо күҙлектән ҡарағанда, "Ағайэне талашыр, атҡа менһә, ярашыр" әйтеменең тағы ла тәптәрәк ятҡан мәғәнәһе бер ҡәүем ағзаларын бер уй-маҡсатлы итеүгә йүнәлдерелгән шартты тыуҙырыусы ҡағиҙә лә.

Өсөнсө яҡтан ҡарағанда, ағай-эненең йәғни яҡын туғандарҙың дәғүәләшеп йәшәүе лә ҡәҙимгә йәғни тәбиғи күренеш тәбаһа. "Тымыҡ һиуҙа шайтан үрсей", ти урыҫтар был саҡта. Башҡорттар: "Тик ятҡан таш мүкләнә", ти. Әйтемдә "талашыр" һүҙе "ярашыр"ға өн-ауаздашлыҡ, хәҙергесә әйткәндә, рифма өсөн генә алынғанға оҡшаған. Шундай уҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы мөнәсәбәт менән ошо уҡ әйтемдә "Ағай-эне ирешер, атҡа менһә, килешер", тип тә әйтергә була бит. Яҡын туғандар араһында ла дәғүәләшеү булһын ул, тик талашыу, ыҙғышыу, ғауғалашыу, һуғышыу булмаһын.

Диалектика күҙлегенән ҡарағанда ла, һәр бер коллективта йә ғаиләлә (милләттә, дәүләттә) бер-береһенә ҡаршы торған ике идея, ҡараш булмаһа, ундай берләшмә (коллектив, ғаилә, милләт, дәүләт) юҡҡа сыға. Тимәк, беҙҙең ата-олатайҙар донъяның ошо фәлсәфәһен бик яҡшы аңлаған, әммә "атҡа менгән" саҡта мотлаҡ рәүештә ярашыуҙы шарт итеп ҡуйған. Һәр бер дәүләт, һәр бер милләт өсөн милли идея булырлыҡ әйтем был.

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Әхмәр Үтәбайҙың ошо "Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр" тигән фекерҙәр теҙмәһенән артабан ялғамаҡсы булдым. Ялғау һүҙем - бар башҡорт йәмғәтселеген борсоуға һалған һуңғы аралағы хәл-ваҡиғалар, йәғни Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡорт йәштәре иттифағы тирәләй ҡуйыртылған хәбәрҙәр тураһында.**

# АЗАТЛЫҠҠА ЫНТЫЛҒАНДАРҘАН ҠУРҠЫРҒА ЯРАМАЙ

Әйе, башлыса ҡуйыртылған хәбәр булды был. Ниҙән башланды? Февраль башында үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышында йәштәребеҙ ҡыҙып китеп ҡоролтай рәйесе Илгиз Солтанморатовты бер аҙ тәнҡитләп алды. Ҡоролтай эшенең һүлпән барыуын билдәләп, бер юлы ике ултырғыста ултырып идара итеп булмай, йә ҡоролтай, йә институт (ул Гуманитар тикшеренеүҙәр институты директоры ла - **Ред.**) - икенең береһен һайла тигән һайлау алдына ҡуйылды Илгиз Занфир улы. Үҙ сиратында, И. Солтанморатов үҙәк гәзиттәрҙең береһенә ҡоролтайҙағы властың ҡулынан тартып алыныу ихтималлығы тураһында интервью бирҙе.

Бына шунан башланды энәләйҙе дөйәләйгә әйләндереү. Етмәһә, был һөйләшеү РФ Дәүләт Советының милләт-ара мәсьәләләр ҡаралаҫаҡ күсмә ултырышы алдынан үткәс, республика етәкселәре лә борсоуға ҡалды. Ошондай ил күләмендәге сәйәси ваҡиға алдынан кемдең-кемдең, ә республикаға исем биргән халыҡ вәкилдәренең ыҙғышыуы яҡшы түгел бит инде. Шуға ла властың Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тирәһендә тыныслыҡ һаҡларға тырышыуы ғәжәп түгел.

Дәүләт Советы ултырышы матур ғына үтеп китҡәс һәм барыһы ла тыныслангас та ҡоролтайҙағы хәлдәр республика етәкселәре иғтибары үҙәгендә ҡалды. 26 февралдә үтәсәк ҡоролтай ултырышы алдынан Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ағзалары менән осрашты. Ул осрашыуға Президенттан башҡа БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һәм уның урынбаҫарҙары, шулай уҡ бер нисә министр ҙа килгәйне. Ҡоролтай ағзалары сәйәсәт, милли мәҙәниәт, милли мәғариф, милли кадрҙар буйынса күп мәсьәләләрҙе күтәрҙе, тәҡдимдәре һәм фекерҙәре менән уртаҡлашты. Ҡыҫҡаһы, эшлекле, ике яҡ өсөн дә файҙалы һөйләшеү килеп сыҡты һәм ике яҡ та был аралашыуҙан ҡәнәғәт ҡалды.

Әммә бер үк ваҡытта ҡайһы бер аңлашылмаған хәлдәр ҙә килеп сыҡты. Ошо осрашыуҙан алда ғына февраль башында булып үткән ултырышта И. Солтанморатовты тәнҡитләүсе Артур Иҙелбаевты төрмәгә ябып ҡуйҙылар. Шулай уҡ көс структуралары тарафынан ошо хәл менән килешмәгән Башҡорт йәштәре иттифағы ағзаларын эҙәрлекләү башланды, уларҙың лидерҙарын - БДУ-ла уҡып йөрөүсе Флорид Бағаев менән Илгиз Таҡаловты уҡыуҙан сығарҙылар. Иң саманан ашҡаны - Президент менән осрашҡан кистә милиция хеҙмәткәрҙәре ҡайны бер ҡоролтай ағзаларының өйөнә килеп, иртәгә ҡоролтай ултырышына бараҫаҡмы, юҡмы икәнен махсус рәүештә һорашып йөрөнө. Бына ошо эҙәрлекләүҙәр Башҡорт йәштәре иттифағы ағзаларын асыҡ иғлан итеүгә этәрҙе лә инде...

Бөтә ошо ваҡиғаларҙан һуң бер нәмә ныҡлап аңлашылды, буғай: Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын кем генә үтәһә лә, был йәмғәт ойошмаһы барыбер Президент, Хөкүмәт менән бергә эшләргә ынтыласаҡ. Ҡоролтай бер ваҡытта ла власҡа ҡаршы йүнәлтелгән сәйәсәт алып барманы һәм алып бармаясаҡ. Сөнки республикалағы власть барыһынан элек башҡорт халҡыныҡы, сөнки республика статусы, уның үҙ исеме менән аталыу хоҡуғын башҡорт халҡы ҡан менән, миллион ҡорбандар бирер яулаған. Әммә республикалағы яңы Президенттың, яңы власть вәкилдәренең Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайындағы бына шундай ҡуйыртып күрһәтелгән хәл буйынса борсолоу белдереүенә лә аптырарға түгел. Күптәре, ысынлап та, республикала яңы кешеләр. Улар милли хәрәкәттә йөрөгәндәрҙе - милләтселәр, шул уҡ Башҡорт йәштәре иттифағы егеттәрен экстремист тип атаған кәстәрҙең һүҙенә ышанған. Ләкин үҙ Ватанын, үҙ халҡын яратҡандар, үҙ телен, үҙ мәҙәниәтен һанлағандар элек-электән беҙҙә патриоттар, йәғни илһөйәрҙәр тип атала торғайны. Мәҫәлән, Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитов та бит Дәүләт Советы ултырышында, бар Рәсәй алдында, "Мин башҡорт теленән башҡа йәшәй алмайым", тип әйтте, тимәк, ул да был илдең, үҙ халҡының патриоты, ул да үҙенең граждандыҡ позицияһын белдерҙе. Бына шуны кемдәрҙер икенсе төрлө аңлай икән, уларға... Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевтың һүҙҙәрен килтерәйек, булмаһа. Ул әле күптән түгел Санкт-Петербургта крепостнойлыҡ хоҡуғын бөтөрөүгә 150 йыл тулыуға арналған йыйылышта шулай тигәйне: "Милләт тере организм, ә хакимлыҡ итеү идеяларын етештереүсе машина түгел. Уны гайкалар менән бороп ҡуйып булмай. Артыҡ ҡаты тәртип, артыҡ контроль идара итеү деградацияһына килтерә. Йәмғиәткә үҙ-үҙен ойоштороу өсөн мөмкинлек бирергә кәрәк".

Ә йәштәребеҙҙең бер аҙ ҡыҙып китеүенә килгәндә... Улар заман йәштәре. Улар совет заманындағы, репрессия ваҡытындағы эҙәрлекләүҙәр тураһында ишетеп кенә белә, улар күңелендә ҡурҡыу ҙа, ҡоллоҡ та юҡ. Улар азатлыҡҡа һәм ғәҙеллеккә ынтыла. Был уларҙың граждандыҡ позицияһы. Ә граждандыҡ позицияһы һәм сәйәси ҡараштар өсөн эҙәрлекләү Рәсәй законында менән тыйыла. Шул уҡ РФ Президенты Дмитрий Медведевтың һүҙҙәрен килтерәм: "Азатлыҡты кисектерергә йә азатлыҡҡа ынтылған кешенән ҡурҡырға ярамай".

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр" тигән мәҡәлде ошо сығышҡа йәбештереү шулай уҡ урынлылыр, тим. Башҡортостан татарҙары конгресы етәксеһе Мәзит Ғәлиәхмәт улы Хузин асыҡ иғлан иткән йәштәр менән осрашыуҙа: "Бындай егеттәре барҙа, башҡорт халҡы йәшәйәсәк", - тигәйне. Ысынлап та, ҡыҙып китеп, бер-береһен тәнҡитләһәләр ҙә, хатта эш һуғышыуға тиклем барып етһә лә, башҡорт йәштәре хәрәкәтендә ҡатнашыусы егеттәрҙең маҡсаты бер: улар үҙҙәрен ошо ерҙең, ошо милләттең улдары һәм ҡыҙҙары итеп раҫлау, телде һаҡлау, рухты һаҡлау, башҡорт намыҫын һаҡлау өсөн көрәшә. Ошондай ҡиммәттәргә һәм, әлбиттә, Башҡортостан именлегенә ҡурҡыныс янағанда улар берҙәм. Улар шулай уҡ власть менән дә, Башҡортостанда йәшәгән башҡа милләттәр менән дә берҙәмлеккә ынтыла. Улар экстремист түгел, улар - патриоттар.**

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың дүртенсе саҡырылыш депутаттары булып Отрада бер мандатлы һайлау округы буйынса Лилиә Ғүмәрова, Иглин бер мандатлы һайлау округы буйынса Айҙар Ғәлимов һайланған.

✓Үткән йәкшәмбелә Берҙәм һайлау көнө булып үткәйне. БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев был сараның һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. Был көндә республикала 7378 бер мандатлы һайлау округы буйынса 791 һайлау кампанияһы үткән. Шул иҫәптән БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай өҫтәмә депутаттар, 53 муниципаль районда 776 урындағы үҙидараның вәкәләтле органдарына депутаттар, 13 муниципаль район һәм Мәләүез ҡала биләмәһе Советына өҫтәмә депутаттар һайланған.

✓Башҡортостан Республикаһының дүртенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтайҙың 36-сы ултырышы булып үтте. Унда Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Шулай уҡ депутаттар 2010 йылдағы эшмәкәрлек хаҡында Башҡортостан Хөкүмәте отчетын тыңланы. Тейешле вазифаларға кандидатуралар раҫланды. Мәҫәлән, депутат Лилиә Ғүмәрова БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары итеп һайланды. Парламентарийҙар шулай уҡ Анатолий Бондарукты Федераль Йыйылыштың Федерация Советы ағзаһы - БР-ҙың башҡарма дәүләт власы органынан вәкил итеп тәғәйенләүҙе хупланы.

✓БР Мәғариф министрлығының күптән түгел булып үткән коллегия ултырышында билдәләнеүенсә, республикала белем биреү учреждениелары селтәрен оптималләштереү дауам итәсәк. Һуңғы өс йыл эсендә муниципаль белем биреү учреждениелары 357-гә кәмегән, ә быйыл 378 мәктәптә үҙгәртеп ҡороуҙар көтөлә. Мәҫәлән, бөгөн республика буйынса 115 класта бөрәр генә уҡыусы иҫәпләнә.

✓Йылайыр районы муниципаль район Советы ултырышында муниципаль район хакимиәте башлығын тәғәйенләү тураһында мәсьәлә ҡаралды. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса Йылайыр район хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Фәтҡуллин Илгиз Лирман улы тәғәйенләнде.

✔ *"Республика Президенты буларак, мин властың халык өсөн эшләүен алдыма төп маҡсат итеп ҡуям. Властың намыҫлылығы, хаҡлығы - һөҙөмтәле эш өсөн тәүшарт".*



*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*



# РӨСТӘМ ХӘМИТОВ: "ЙӘМҒИӘТТЕҢ ВЛАСҠА ЫШАНЫСЫН НЫҒЫТЫУ - УҢЫШЛЫ ҮҪЕШ НИГЕҘЕ"

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов 15 мартта БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Түбәндә Мөрәжәғәтнамәне ҡыҫҡартып тәҡдим итәбеҙ.**

**Сәйәсәт.** "Власть алышыныуы, бигерәк тә Рәсәй өсөн, етди һынау. Башҡортостандың сәйәси системаһы был һынауҙы лайыҡлы үтте. Күсеү осоронда төп власть структуралары өҙөклөкһөҙ эшләне һәм барлыҡ дәүләт структураларының ышаныслы, ныҡлы эшен тәьмин итте. Был осор тыныс ҡына үтмәне, республикала йәмәғәт дискуссияһы ҡыҙыу барҙы. Сәйәсәт тап шулай - асыҡ, үтә күренмәле булырға тейеш".

**Власть.** "Республика Президенты буларак, мин властың халыҡ өсөн эшләүен алдыма төп маҡсат итеп ҡуям. Граждандар власть үткәргән сәйәсәтте формалаштырыуҙа ҡатнашырға тейеш. Республика алдында торған бурыстарҙы хәл итеү өсөн күпселек йәмәғәт көстәренең берләшеүе кәрәк. Был граждандар Хөкүмәткә ышанған ваҡытта ғына мөмкин буласаҡ. Беҙгә халыҡҡа республикала властың намыҫлы һәм яуаплы эшләүен раҫларға кәрәк. Властың намыҫлылығы, хаҡлығы - һөҙөмтәле эш өсөн тәүшарт".

**Мәғлүмәт.** "Сәйәси ҡарарҙар ҡабул иткәндә киң массаларҙы йәлеп итеүҙең мөһим ҡоралы булып заманса мәғлүмәт технологиялары тора. Беҙҙең эшмәкәрлек тураһындағы мәғлүмәт ҡыҙыҡһыныусы барлыҡ граждандарға ла асыҡ булырға тейеш. Логика ябай ғына: власть кешене ишетергә һәм тыңларға тейеш".

**Инвестициялар, сәнәғәт.** "Былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса сит ил инвестициялары күләме 2009 йыл менән сағыштырғанда 80 процентҡа артҡан һәм 500 миллион долларҙан ашып киткән. Хәл-торошто үҙгәреүенә сәнәғәт тә ыңғай тәьҫир итте. Сәнәғәт етештереүе 14 процентҡа үҫте. Башҡортостандың инвестиция эшмәкәрлеген бөгөн 26 норматив акт көйләй. Улар төрлө ваҡытта ижад ителгән һәм хәҙер бер-береһенә ҡаршы килә. Республика Хөкүмәте уларҙы бишәүгә ҡалдырыу, механизмдарҙы ябайлаштырыу һәм тәртипкә һалыу тураһында ҡарар ҡабул итте".

**Бюджет.** "Башҡортостандың бөгөнгө бюджет, инвестиция ылыҡтырыуы күрһәткестәре "уртаса Рәсәйҙекенән насар" төркөмөндә булып сыҡты. Мин формалаштырған "эш, эш хаҡы, торлаҡ" өсмөйөшө - юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Халыҡтың тормош сифатын билдәләүсе бөтөн был төп йүнәлештәр буйынса беҙҙә хәл итәһе мәсьәләләр бик күп".

**Эшһеҙлек.** "Республикала эшһеҙлек, ил буйынса сағыштырғанда - юғарыраҡ. Хеҙмәт биржаһында 39 меңдән ашыу кеше тора. Бында шуны ла иҫтән сығарырға ярамай - барлыҡ эшһеҙҙәр ҙә биржала теркәлмәй".

**Эш хаҡы.** "Башҡортостан халҡының уртаса эш хаҡы Рәсәйҙекенән 25 процентҡа кәм. Эшләүселәрҙең 80 проценты самаһы айына 20 мең эш хаҡы ала. Мәскәүҙә шул уҡ эш өсөн беҙҙекенән ике-өс тапҡырға күберәк алалар".

**Торлаҡ.** "Халыҡтың торлаҡ менән тәьмин ителеүе күрһәткестәре буйынса беҙ Рәсәй Федерацияһында 56-сы урында торабыҙ. Ә былдай эш хаҡы менән ипотекаға граждандарҙың 15-20 проценты ғына өмөт итә ала. Үкенескә күрә, торлаҡ төҙөлөшө тармағындағы хәл-торош ҡыуандырмай. Былтыр торлаҡ төҙөү күләме 15 процент самаһына кәмегән. Тәү сиратта был ер участкаларына бәйле. Төҙөүселәргә ер биреү бөтөнләй тиерлек туктатылды. Хөкүмәт ер буйынса законға үҙгәрештәр индереү тураһында тәҡдимдәр әҙерләне. Тиҙ арала механизм эшләнергә тейеш, уға ярашлы күпләп төҙөлөш эшен атҡарырға һәләтле ойошмалар ер аласаҡ. Төҙөлөш мәсьәләһендә ике бурыс бар. Беренсеһе - участкаларҙы инфраструктура менән тәьмин итеү. Эконом-класс торлағы төҙөгәндә улар дәүләт иҫәбенә башҡарылырға тейеш. Был сығымдарҙы тулыһынса төҙөүселәр елкәһенә һалырға ярамай. Ахырҙа был һатып алыусының кеҫәһенә һуға.

Икенсе бурыс - социаль ипотеканы үҫтереү. Быйылғы бюджетҡа кредиттарҙың процент ставкаларының бер өлөшөн субсидиялау өсөн 450 миллион һум һалынды. Был беҙҙең граждандар өсөн ипотеканы алып булырлыҡ итәсәк".

**Ерҙәр.** "Ерҙәрҙең яртыһынан күберәге әлегәсә милеккә күсмәгән. Кемдең ере - федерацияныҡымы, республиканыҡымы, муниципалитеттыҡымы - билдәһеҙ. Ер теркәлмәгән икән, тимәк, ул рәсми иҡтисадҡа йәлеп ителмәгән. Хатта теркәлгән булһа ла, ул бик йыш ҡуртымға таратыла. Ҡуртымға алыусы уға йылдар буйы түләмәй, түләгән саҡта ла өҫтәмә хаҡ өҫтәлмәй".

**Урман.** "Рәсми иҡтисади тормошта урман сәнәғәте бөтөнләй юҡ, шул уҡ ваҡытта урманды бер ниндәй контролһеҙ күпләп ҡырҡалар. Был тармаҡтың бик ҙур әйләнеше һәм килеме күләгәлә ҡала".

**Эшҡыуарлыҡ.** "Әлегә эшҡыуарҙар тырым-тырағай һәм инициативаһыҙ. Уларҙың һәр ҡайһыһы айырым йәшәү һәм тере ҡалыу стратегияһын һайлаған, төрлө ассоциацияларҙа ағза булып тороуҙы формаль тип һанай. Әгәр эшҡыуарлыҡ коллектив эш итеү, хәл-торошто дөйөм үҙгәртеү стратегияһына күсмәһә, яҡшы яҡҡа үҙгәреш булырына ышаныс аҙ.

Эшҡыуарлыҡ, бигерәк тә бәләкәй эшҡыуарлыҡ, бигерәк тә төпкөлдә ауыллыҡтарға юлыға. Муниципаль властар әлегә уларҙы ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәкле союздаш итеп ҡарауҙан алыҫ тора. Был дөрөҫ түгел. Әгәр ниндәйҙер муниципалитетта эшҡыуарлыҡ булмаһа, әгәр улар һалым түләмәһә һәм эш урындары булдырмаһа, район йәки ҡала ярлы булып ҡаласаҡ икәне асыҡ бит. Минең ҡушыуым буйынса муниципаль берекмәләр башлыҡтары хәҙер үҙҙәренең бюджетының республика бюджетынан бойондороҡло булыуын кәметеү механизмдарын эшләй. Улар быны яңғыҙ атҡарып сыға алмай. Бында улар өсөн эшҡыуарлыҡ - берҙән-бер һәм төп ышанаслы союздаш".

**Ауыл хужалығы.** "Республиканың оҙайлы ныҡлы үҫешен гарантиялау өсөн мотлаҡ хәл итергә кәрәк мөһим мәсьәләләрҙең береһе - ауыл хужалығының һөҙөмтәлелеген арттырыу. Аҙыҡ-түлеккә донъя хаҡтары даими арта. Бөгөн ауыл хужалығы предприятиеларының төп фондының ни бары 10-15 проценты ғына теркәлгән һәм милеккә күскән. Улар ғына иҡтисади әйләнешкә ингән. Ҡалған 85 проценты йәлеп ителмәгән. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең ауыл хужалығы предприятиеларына инвестиция һалырға әҙер инвесторҙар аҙ түгел. Был йүнәлештә эш башлау өсөн объекттарға милек хоҡуғын алырға ғына кәрәк. Мәғлүм булыуынса, ауыл халҡы ауыл хужалығы продукцияһының ҙур өлөшөн шәхси хужалыҡтарында етештерә. Муниципалитеттар бәләкәй етештереүселәрҙе берләштереүсе предприятие ойоштороруға йәки ауыл халҡынан артҡан продукцияны һатып алып, эшкәртеүсегә тапшырыусы предприятиелар ойоштороруға ярҙам итергә тейеш. Бынан барыһы ла отасаҡ. Крәҫтиәндәр тере аҡса күрәсәк, муниципалитеттар килемле предприятиеға эйә буласаҡ, эшкәртеүселәргә гарантиялы рәүештә һөт, ит, май, йәшелсә-емеш, йөморткә килеп торасаҡ. Республикала ауыл хужалығы производствоһы үҫешәсәк".

**Демография.** "Тыуыусылар һаны икенсе йыл рәттән үлеүселәр һанынан күберәк. Әммә әле ҡабул ителгән саралар менән генә был проблеманы системалы хәл итеп булыуы икеле. Яҡын биш йылда балалар баҡсалары төҙөүгә рекордлы 9 миллиард һум бүленәсәк. Быйылдан башлап уллыҡҡа бала алған ғаиләләргә "Әсәлек капиталы"на тиң сумма түләнәсәк. Яҡын бер нисә йылда етем балаларға торлаҡ биреү проблемаһын хәл итергә тырышырбыҙ. Әлегә был өлкәлә бик күп етешһеҙлектәр бар. Ҡайһы бер муниципалитеттарҙа етемдәрҙе сиратҡа ҡуймайҙар, улар урынына "үҙҙәренең кешеләрен" тығалар. Быны менән килешергә ярамай".

**Социаль тормош.** "Пенсионерҙарҙың тормошон яҡшыртыу буйынса күп нәмә эшләргә кәрәк. Яҡын ике йылда бөтөн республика буйынса өсөнсө быуын Халыҡ университеттары филиалдары асыласаҡ. Уларҙың эше 70 белем биреү учреждениеһында тормошҡа ашырыласаҡ. Социаль туризмды үҫтереүгә 40 миллион һум самаһы аҡса бүленәсәк.

Маҡсатлы эш алып барыуҙы талап иткән тағы бер категория - инвалидтар. Улар өсөн махсус республика маҡсатлы программаһы тормошҡа ашырыла башланы. Республика Хөкүмәте Өфө иҡтисад һәм сервис дәүләт академияһы базаһында инвалидтар өсөн социаль берләшеү университет үҙәге ойоштороу проектына ла этәргес бирәсәк".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Президент Мөрәжәғәтнамәһендәге бер фекер бигерәк тә күңелгә ятышлы: власть асыҡ булырға һәм халыҡҡа хеҙмәт итергә тейеш. Ысынлап та, власть асыҡ булһа, ғәҙеллек көсәйгән халыҡ та властҡа ышаныр, илде сәскә аттырыр, йәшәйешебеҙҙе юғары кимәлгә күтәрер эштәре менән ҡыуандырыр, һәр кем үҙ урынында үҙ эшен намыҫлы башҡарырға тейеш, тигән күрһәтмәне яҙылмаған ҡануны итеп алыр. Эйе, күп ваҡыт властың асыҡ булмауы өмөтһөҙлөккә бирелдерә бит...**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Физик шәхестәрҙең килеменә һалымдар буйынса декларацияларға ҡарағанда, былтыр республикала өс миллиардер, 68 миллионер һәм килеме ун миллиардты ашып киткән бер кеше барлығы беленгән. Был граждандар килемде башлыса ҡимәтле ҡағыҙҙар менән эшләү арҡаһында алған.

✔"Рәсәй юристары ассоциацияһы" Бөтә Рәсәй йәмәғәт ойошмаһының Башҡортостан бүлексәһе 23 мартта республикала бушлай юридик ярҙам көнө үткәрә. Һорауҙар менән иртәнге сәғәт 9-ҙан 18 сәғәткә тиклем Өфөлә Мөксинов урамы, 2-се йорт, М. Рыльский урамы, 9/1, Достоевский урамы, 73,131 (306 "а" бүлмә), Октябрь проспекты, 74/2, Сельский Богородский урамы, 37 адрестары буйынса мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Белореттағы адрес: К. Маркс урамы, 48. Сибайҙа - К. Цеткин урамы, 2, Нефтекамала - Социалистик урамы, 47.

✔Башҡортостандың өсөнсө сәғәт булкәтенә күсеү мөмкинлеге хаҡындағы тәҡдимдәр йәмәғәтселектә төрлө фекерҙәр тыуҙырҙы. Был мәсьәлә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында ҡаралырға тейеш ине. Әммә дүшәмбе көн кис БР Президенты бәхәсле мәсьәләгә нөктә ҡуйҙы. Республика халҡы 27 мартта ваҡытты элеккесә бер сәғәткә алға күсерәсәк.

✔Башҡортостанда былтырғы йыл аҙағына эшһеҙҙәр һаны ун процент самаһына кәмегән. Халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәттәре ярҙамында 99,4 мең кеше эшкә урынлаштырылған.

✔М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында бассейн бинаһы төҙөлөшөнә нигеҙ ташы һалынды. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "500 бассейн" проекты сиктәрендә төҙөләсәк ҡоролмала юғары уҡыу йорто студенттары ғына түгел, теләге булған һәр кем йөҙөү менән профессиональ кимәлдә шөғөлләнеү мөмкинлеге аласаҡ.

✔"Ҡайҙа үлем менән һатыу итәләр, хәбәр ит!" Бөтә Рәсәй акцияһы бара. Наркопритондарҙың ҡайҙа урынлашыуы, наркотиктар әҙерләү һәм һаҡлау, улар менән сауҙа итеү фактарын 8-800-347-20-30 телефоны буйынса хәбәр итергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ӘСӘЛӘР ҺӘЙКӘЛГӘ ЛАЙЫҠ

**Сибайҙа "Әсәлек" тип исемләнгән скульптура композицияһын асыу тантанаһы уҙҙы.**

Бронзанан ҡойолған ҡыҙы һәм улы менән баҫып торған әсә һыны ЗАГС алдындағы сквер майҙансығынан урын алды. Һәйкәлдең авторҙары Мәскәү скульпторҙары - Вадим һәм Станислав Кирилловтар. Һәйкәлде урынлаштырыуҙа Сибайҙың төҙөлөш ойошмалары ҡатнашты.

Ҡала хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге хәбәр итеүе буйынса бөгөнгө көндә Сибайҙа 320 күп балалы ғаилә йәшәй, 17 әсә "Әсәлек даны" миҙалы менән наградланған. Һуңғы йылдарҙа ҡалала тыуымдың тотороҡло артыуы күҙәтелә: 2009 йылда 1008 бала донъя күргән булһа, 2010 йылда 1044 кескәй тыуған. 2011 йылдың ғинуар-февраль айҙары осоронда 142 бала донъяға килгән.



# ЙӘЙӘҮЛӘП ЙӨРӨРГӘ ИНЕ...

**Республика Президенты Рөстәм Хәмитовтың интернет-блогына күп һорауҙар менән мөрәжәғәт итәләр. Өфө ҡалаһында йәшәүселәрҙе ҡыҙыҡһындырған шундай һорауҙарҙың береһе: ҡалала йәйәүлеләр өсөн айырым урам буласаҡмы?**

Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы быны өсөн Октябрь революцияһы урамын тәҡдим итә. Павел Качкаев әйтеүенсә, ысынлап та, бындай проект буйынса фекер алышыуҙар бара. Ҡала архитекторҙары тәҡдим иткән был проект буйынса республика власы ниндәй һығымтаға килһә лә, Октябрь революцияһында урынлашҡан барлыҡ шәхси йорттар ҙа архитектура һәйкәле булараҡ үҙ урынында ҡаласаҡ, тип ышандыра баш ҡала башлығы. Ул архитектура ҡомартҡыларына шулай уҡ реставрация үткәреү ҙә ҡаралған. Әлеккe план буйынса урындағы Арбат итеп Мостай Кәрим урамын үҙгәртеү күҙалланһа ла, был фекер күптәрҙә яҡлау тапманы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫ...

## рәсми танылыу яуланы

**Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Хөкүмәтенең Өфө-II ҡаласығы археологик ҡаҙыныуҙар урынында "Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы төҙөү тураһындағы ҡарарына ҡул ҡуйҙы. Документта әйтелеүенсә, "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы б.э V - XVI быуаттарына ҡараған киң билдәле археологик ҡомартҡыны һаҡлау һәм тәрәнерәк өйрәнеү маҡсатында булдырыла.**

Музей БР Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағында буласаҡ, әлегә министрлыҡта төҙөләсәк учреждениеның уставы, эш тәртибе буйынса документтар әҙерләнә. Өфө-II ҡаласығы 1953 йылда билдәле крайҙы өйрәнеүсе Петр Ищериков тарафынан асылған, һуңынан был тарихи урынды Мәҡсүдә Садиҡова, Владимир Овсянников, академик Нияз Мәжитов тикшергән. Ҡаҙыныу эштәре барышында монументаль архитектура объекттары - бейеклеге 4-5 метр һәм нигеҙендә киңлеге 10 метрҙан ашыуыраҡ булған ҡеүәтле һаҡ стенаһы, тәрән һәм киң соҡор, тура мөйөшлө һәм тирмәгә оҡшаған торлаҡ әҙҙәре, таҡта түшәлгән урамдар, тимер һәм баҡыр иретеү мейестәре, ювелир оҫтаханаһы табылған. Был тарихи мираҫ объекты республика кимәлендәге һәйкәл булараҡ БАССР-ҙың Министрҙар Советы ҡарары һәм БР Юғары Советы Президиумы указы менән дәүләт һағына алынған булған.

Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының (Мәскәү) ғилми хеҙмәткәре Игорь Кызласов белдереүенсә, Өфөлә табылған ҡомартҡы Урал өсөн генә түгел, илдең бөтә Евразия өлөшө өсөн мәҙәни-тарихи әһәмиәткә эйә:

-Дүрт мәҙәни ҡатлам - ғәҙәти булмаған факт һәм ул был урында кешеләрҙең бик борондан йәшәүен дәлилләй. Ҡаласыҡҡа мең йәш тирәһе, ул беҙҙең эраның V - XV быуаттарында формалашҡан. Табылған әйберҙәр унда йәшәгән халыҡтың тышҡы бәйләнештәре, Византия менән сауҙа итеп йәшәүе тураһында һөйләй. Бында табылған алтын составы буйынса Филиппов кургандарында табылған алтынға оҡшаш.

Игорь Кызласов БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың ҡарарын бик ваҡытлы, тип тапты. Киләсәктә археологик тикшеренеүҙәр яңы фәнни асыштарға алып киләсәгенә шик юҡ, тине ул.

-Башҡортостандың баш ҡалаһы өсөн бик шатмын, сөнки уның үҙәк, тарихи өлөшөндә шундай боронғо биҙәүестәр, тәңкәләр, стена һәм торлаҡ ҡалдыҡтары, металл иретеү мейестәре табылған. Рәсәй өсөн был бик мөһим асыш, - тине Мәскәү ғалимы.



ХОККЕЙ

# ЮЛАЕВСЫЛАР ФИНАЛДА

**Континенталь хоккей лигаһының Көнсығыш конференцияһында "Салауат Юлаев" командаһы ярым финал сериәһы уйындары ярайһы уҡ унышлы башланы. Тәүҙә Ҡазанда "Аҡ Барс"ты ике тапҡыр отто. Беренсе осрашыуҙа ҡаҙандар 2:3 иҫәбенә еңелде.**

Икенсе осрашыуҙа ла юлаевсылар еңеүсе булды. "Аҡ Барс" уйынсылары үҙ майҙанында икенсе тапҡыр көс һынашыуға тамам сәмләнеп сыҡты. Ҡунаҡтар ҡапҡаһы алдында ҡыйыу уйнаны. Шулай ҙа юлаевсылар 1-се осорҙо 0:0 иҫәбе менән тамамлай алды. Икенсе 20 минутта Өфө егеттәре уйын дилбегәһен үҙ ҡулдарына алды. Юлаевсы Александр Свитов айырыуса ҙур оҫталыҡ, сослоҡ күрһәтте. Тәүҙә "Аҡ Барс"тың бер уйынсыһын артта ҡалдырҙы, унан йәнә ике хоккейсыны йырып үтеп, "Салауат Юлаев" командаһын алға сығарҙы. Һуңғы, өсөнсө, осорҙа ҡунаҡтар һөжүмде көсәйтте, тиҙлекте бермә-бер арттырҙы. Айырыуса Петр Счастливый үҙенең мәргән уйынсы булыуын иҫбат итте. Бынан һуң әллә ни күп ваҡыт үтмәне, Сергей Зиновьев иҫәпте өскә еткерҙе. Матч ҡунаҡтар файҙаһына 1:3 иҫәбенә тамамланды.

Ярым финалдың өсөнсө уйыны Өфөлә булды. "Өфө-Арена"ла көс һынашыу, ғәмәлдә, ҡапҡасыларға ҙур һынау булды. Беренсе осорҙа һәр ике яҡтың береһе лә унышҡа өлгәшә алманы. Бары тик икенсе осорҙа ғына юлаевсы Виталий Прошкин "Аҡ Барс" ҡапҡаһына тәүге шайбаны сәпәне. Өсөнсө осорҙа ҡунаҡтар иҫәпте һис юғында тигеҙләр өсөн көслө штурм башланы һәм яуап шайбаһын индерҙе. Матчтың төп ваҡыты шулай 1:1 иҫәбе менән тамамланды. Өҫтәмә ваҡытта уйын яңы көс менән ҡабынды . Матчтың яҙмышын хәҙер тәүге индерелгән шайба хәл итәсәк. Юлаевсы Олег Сапрыкин һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡасыһы Петр Веханин кире ҡаға алманы. Ярым финалдың өсөнсө уйыны "Салауат Юлаев" файҙаһына 2:1 иҫәбе менән бөттө.

Хәҙер финалға сығыу өсөн бер аҙым атларға ҡалды. Әммә юлаевсылар дүртенсе осрашыуҙа бик үкенесле отолдо. Әлбиттә, отолоу ҡыуанысты булмай. Әммә үкенесле еңелеү була икән ул...

Континенталь хоккей лигаһының Көнсығыш конференцияһында "Салауат Юлаев" командаһы Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ын тамам еңдем тигәндә генә туҡтап ҡалды, үҙ майҙанында 0:4 иҫәбе менән отолдо.

5-се тапҡыр көс һынашыу Ҡазанда булды. Юлаевсы Александр Радуловтың берҙән-бер индергән шайбаһы уйындың ғына түгел, бәлки ярым финалдың яҙмышын хәл итте.

**Шулай итеп, юлаевсылар был серияла "Аҡ Барс" командаһын 4:1 иҫәбе менән еңеп, Континенталь хоккей лигаһының Көнсығыш конференцияһының финалына сыҡты. Хәҙер "Салауат Юлаев" Гагарин кубогын яулау өсөн көрәште дауам итә. Ул Омскиҙың "Авангард" һәм Магнитогорскиҙың "Металлург" командаларында еңеүсене ҡабул итәсәк.**

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Спорт һарайында "Агрокомплекс-2011" сираттағы 21-се халыҡ-ара махсуслаштырылған күргәҙмә үтте. Уның эше менән БР Президенты ла танышты, экспоненттар менән аралашты. Күргәҙмәгә ауыл хужалығы тармағы техникаһы, ҡорамалдар, тағылма инвентарҙәр, шулай уҡ ауыл хужалығы продукцияһы ла ҡуйылғайны.

✓Баш ҡаланың Совет районы хакимиәте "Райондың ете мөғжизәһе" тигән конкурс иғлан иткәйне. Совет районын һүрәтләгән төрлө мәҙәниәт, архитектура, тәбиғи объекттарҙы билдәләп, Революцион урамы, 111-се һанлы йорт, 202-се бүлмә адресына ғаризалар ебәрергә мөмкин. Шулай уҡ 273-33-17 телефонына шылтыратырға ла була. Иң күп тауыш йыйған 10 объект икенсе этапҡа үтә. Конкурс һөҙөмтәләре июнь айында Өфө ҡала көнө алдынан билдәләнәсәк. Еңеүселәрҙе ҡиммәтле бүләктәр көтә.

✓"Росреестр"ҙың Башҡортостан идаралығы төпкөл ауыл хакимиәттәренән күсмә ҡабул итеүҙәр үткәреүгә ғаризалар ҡабул итә. Өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография хеҙмәтенең БР идаралығы сайтына инеп ҡарағыҙ: www.toO2.rosreestr.ru.

✓М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры коллективы Силәбе өлкәһенә гастролдәргә китте. Силәбеләр "Беҙҙең өйҙөң йәме", "Йәнкиҫәккәйем", "Валентин һәм Валентина", "Золушка" спектаклдәрен ҡараясаҡ.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән БР Хөкүмәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссияның составы раҫланды. Яҡын арала комиссия БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - БР Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов рәйеслегендә сираттағы ултырышын үткәрәсәк. Был комиссия Законға ярашлы 1999 йылда төҙөлгәйне.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың рәсми делегацияһы 16-18 мартта эш сәфәре менән Ҡаҙағстанда булды.

**✓23 мартта "Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡорт йәштәре иттифағы, Әбйәлил районы йәштәре менән берлектә "Хәмер - харам" тигән кисә үткәрә. Кисә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында 19 сәғәттә башлана.**

ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!

**2007 йылда РФ Хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән "Әсәлек капиталы" программаһын тормошҡа ашырыуҙы бөгөн бер эшмәкәр кешеләр шунда уҡ үҙ файҙаһына ҡуллана ла башланы. Йәш ғаиләләрҙең хоҡуҡтары боҙолоп, "Әсәлек капиталы"на лайыҡ булғандар күпмелер аҡсаһын юғалтһа ла, ул эшмәкәрҙәр ҡуйған талаптарға риза була килделәр.**



# "ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ"Н...

## өҙгөсләүселәр ҡулына ҡапма

Беҙҙең илдә шулай халыҡ тормошон яҡшыртыуға йүнәлтелгән социаль программалар үҙ кесәләрен ҡайғыртыусы кешеләр ҡулына тороп ҡалғылай шул. Ундайҙарҙы аҙаҡ, хоҡуҡ боҙған, тип, закон буйынса яуаплылыҡҡа тарттырып та булмай, сөнки улар бөтөн эштәрен юридик яҡтан нығытып ҡуйыусан. Ахырҙа, уларға мөрәжәғәт иткән кеше үҙенең хоҡуҡтары боҙолғанын аңлап, теге йәки был инстанцияларға саба башлаһа, үҙе гәйепле булып сыға - закондарҙы дөрөҫ аңламаған. Шуға күрә, күпме аҡсаңды юғалтһаң да, өндәшмәй, теште ҡыҫып түҙәһең инде. Беҙҙең халыҡтың йбайлығын күреп, шунан оҫта файҙаланып ҡалырға тырышыусылар бихисап. Хөкүмәт тарафынан ниндәй генә ҡәтғи талаптар, сиктәр ҡуйылмаһын, аҡсаға күҙе томаланған ул эшем эйәләре барыбер үҙ юлын табып тора. Йәнәһе, йбай кеше өсөн "Әсәлек капиталы"н юллап алыу мөмкин түгел, йәнәһе, фәҡәт улар ғына, ҡара тир түгеп, хөкүмәттән ул капиталды юллап алып бирә ала. Ә улар нимә эшләйҙәр һуң һәм улар күрһәткән "ярҙам" ни саҡлыға барып төшә?

Белеүебеҙсә, бөгөн "Әсәлек капиталы"н юллап биреү буйынса матур-матур исемле фирмалар эш итә. Хөкүмәт тарафынан билдәләнгән өс ысулдың береһе менән улар бик оҫта файҙалана: йорт төҙөп биреү. Иң тәүҙә рекламаһы менән танышҡан ғаилә ул фирмаға мөрәжәғәт итә. Фирма шунда уҡ үҙ хеҙмәтен тәҡдим итеп, талаптарын әйтә. Ғаиләгә бик еңел юлдар тәҡдим итәләр, ҡайһы бер документтарҙы үҙҙәре уҡ тиҙ арала сиратһыҙ эшләп бирергә лә вәғәҙәләйҙәр. Һәм документ юллау ниндәй ауыр икәнен дә иҫкәртеп ҡуялар. Ә халыҡҡа иң ныҡ тәьҫир иткәне тап ана шулдыр. Бигерәк тә кешене документтарын регпалата аша үткәреү ҡурҡыта. Был эшем эйәләрен оҙағыраҡ тыңлаһаң, ысынлап та, уларҙың ярҙамынан тыш һис бер эш эшләп булмаясаҡ төҫлө. Ниндәй генә талаптар ҡуйһалар ҙа, ризалаша башлайһың. Уларҙың ярҙамынан баш тартһам, ул аҡсаларҙы бөтөнләй ала алмауым да бар, тип ҡурҡаһың. Бөгөнгө көндә ул тиҙ арала "Әсәлек капиталы"н алып биреү буйынса "хеҙмәт күрһәткән" фирмалар үҙҙәренә капиталдан 60 мең һумдан 100 мең һумғаса аҡса алып ҡалалар. Әммә был хеҙмәт ул аҡсаға торошломо?

Быйылдан "Әсәлек капиталы"н төҙәлештә ҡулланырға рөхсәт иттеләр. Ә нисек ҡулланырға һуң? Йәнә капиталды юллап алыу менән шөғөлләнгән фирмаға мөрәжәғәт итәбеҙ. Улар күрһәткән юл бик йбай: төҙәлеш өсөн һеҙгә кредит алып бирәбеҙ, ә һеҙ уны "Әсәлек капиталы" сертификаты менән ҡаплаһығыҙ. Ләкин ул капиталдың 100 мең һумын һеҙ айырым түләү квитанцияһы ярҙамында ҡайырып алырға тейеш буласаҡһығыҙ. Ул сумма һеҙҙең кредит проценттарын ҡапларға һәм, әлбиттә, документтар юллап рәшкән теге фирмаға хеҙмәт өсөн түләүгә китәсәк. Бер йыл элек, ысынлап та, йорт төҙөргә йыйынған ғаилә ул төҙәлеш кредитын ала алмай, банк тупһаһын ҡырҡ тапап, 3-4 поручитель, юғары эш хаҡы тураһында справка таба алмай, ни аҡса ала алмай, ни йортон төҙөп бөтә алмай интегә ине. Ә хәҙер фирмаға "Әсәлек капиталы" сертификатын тоттор ғына, бүтән бер ни кәрәкмәй - шәхси банк аша атылған уҡ һымаҡ үтеп китәһең.

Уйлап ҡараһаң, ул буштан тиерлек килеп төшкән сумманың 100 меңе әллә ни йәл дә түгел кеүек. Шулай ҙа, ул аҡсаны бүтәнсәрәк ҡулланып булмай инеме икән, тигән һорау тынғы бирмәй. Сөнки, ни тиһән дә, ул бит - ғаилә хаҡы. Ни өсөн ул аҡсаны ғаилә тулы ғына итеп ала алмай һуң? Ул "Әсәлек капиталы" өсөн бирелгән суммаға ысынында бөгөн нимәләр төҙөргә була? Әйҙәгеҙ, булмаһа, һанап ҡарайыҡ. Ауыл ерен иҫәпкә алһаҡ, ер алыуҙа унда әллә ни ауырлыҡ юҡ, һәм күп осраҡта ауылда өй төҙөргә туғандар, күрше-күләндәр бергәләшеп, өмә менән ярҙам итә. Бөгөнгө көндә "Әсәлек капиталы" 363 000 һумдан ғибәрәт. Әгәр төҙәләсәк өй буралы булһа: ҡарағай бура (7х8 метр) - 120 мең һум; уны урынына илтеү - 20 меңгә тиклем (юл алыҫлығына ҡарап); документтар тултырыу - 10 мең һум; мүк, таш алып килеү һәм өмә үткәреү өсөн 20 мең һум ҡала. Программа буйынса, беренсе этапта һеҙгә дөйөм сумманың 170 меңе күсерелергә тейеш. Ошо суммаға төҙәлгән эште күрһәтһән, ҡалған 193 мең һумын күсерәләр. Икенсе этап: ҡыйыҡ йбырға 130 м2 профлист (соланы менән бергә өйҙең ҙурлығы 8х12 метр тип алһаҡ) - 35 мең һум; иҙән-түбә таҡтаһы (40 мм, 10 м3) - 45 мең һум; ҡыйыҡ һәм солан таҡтаһы (5 м3) - 18 мең һум; пластик тәҙрәләр (6 шт.) - 35 мең һум; ишектәр (2 шт.) - 9 мең һум; өйгә газ-мейес ҡуйыу - 15 мең һум; икенсе этап документтарын юллау өсөн - 10 мең һум; ҡалған 26 меңе - төрлө бүтән сығымдарға.

*Әгәр ғаилә хаҡына ҡул һуҙмаған ойошма тапһаң, өйҙө тулыһынса төҙөп ултыртырға мөмкинлек бар булып килеп сыға. Күп кенә йәш ғаиләләрҙең шундай фирмаларҙан алданғанын күреп, уларҙың зарланғанын ишетеп йөрәгәндән һуң, мосолман ир-егеттәрҙән торған* ***"Сауҙа-эш үҙәге" компанияһы*** *(ООО Компания "Торгово-деловой центр")* ***"Әсәлек капиталы"***на *ҡағылышлы үҙ программаһын булдырҙы. Был программа үтәлешендә ғаиләнең хаҡы, хоҡуҡтары боҙолмаясаҡ. Компанияның беренсе маҡсаты: йәш ғаиләләргә өй төҙөүҙә булышлыҡ итеү, баҙар хаҡтарынан түбәнерәк хаҡҡа төҙөлеш материалдары менән тәьмин итеү. Иң мөһиме: хөкүмәт тарафынан бүленгән барлыҡ аҡса бер ниндәй "һулаҡай" сығымдарһыҙ, тулыһынса һеҙҙең йорт өсөн тотоноласаҡ.*

***Мөрәжәғәт итегеҙ. Адресыбыҙ: Өфө ҡалаһы, Зенцов урамы, 81/а, 20-се корпус, 24-се бүлмә. Телефондар: 8 (347) 266-75-48; 266-75-49; 236-75-48; 236-75-49.***

ҺОРАУ - ЯУАП

### ОҘАЙЛЫ СТАЖ

**Минең өҙлөкһөҙ педагогик эш стажым, институтта уҡыған йылдарҙы иҫәпләмәгәндә 33 йыл да 10 ай. Пединститутҡа инерҙән алда мин үҙемдең районымдағы туған мәктәбемдә уҡыттым. Былар бөтәһе лә минең хеҙмәт кенәгәһендә дөйөм эш стажы 1966 йылдан тип күрһәтелгән. Ә дөйөм стаж 38 йыл да 10 ай. Мин ошо стаж менән хеҙмәт ветераны була аламмы?**

"Башҡортостан Республикаһының "Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡоралды Көстәр ветерандары тураһында"ғы БР Законына үҙгәрештәр индереү тураһында 2008 йылдың 24 ноябрендәге БР Законы менән "Оҙайлы эш стажы булған хеҙмәт ветераны" тигән өҫтәмә категория булдырылғайны. БР Хөкүмәте Ҡарары менән (09.02.2010 йыл) был исемде биреү тәртибе һәм шарттары раҫланғайны. Ләкин былтыр 29 мартта "Башҡортостан Республикаһының ҡайһы бер закон акттарының айырым положениеларының ғәмәлдә булыуын туҡтатып тороу тураһында" БР Законы ҡабул ителде. Атап әйткәндә, закондың граждандарға әлеге исемдә биреү тураһындағы өлөшө, шулай уҡ ошо исемгә эйә булған граждандарға социаль ярҙам саралары күреү өлөшө ғәмәлдән туҡтатылып торҙо.

### БҮЛӘК ИТМӘҺӘ, ҺАТЫП АЛЫРҒА

**Фатирыбыҙҙа мин, ике балам һәм ағайым - дүрт кеше теркәлгән. Ағайым 20 йыл инде беҙҙең менән йәшәмәй. Фатир дүртебеҙҙең дә исемгә хосусилаштырылды. Фатир өсөн мин түләп торам. Нисек итеп ағайымдың өлөшөн үҙебеҙгә күсерергә? Югиһә, уның балаларының был өлөшкә дәғүә итеүе ихтимал...**

Торлаҡҡа ихтыяжы юҡ икән, ағайығыҙ һеҙгә үҙ өлөшөн бүләк итә ала йәки һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөргә була, ә инде торлаҡ менән файҙаланмай, тип, уны милкселек хоҡуғынан мәхрүм итә алмайһығыҙ. Коммуналь хеҙмәттәр өсөн һәр бер милексе түләргә бурыслы, шулай уҡ ағайығыҙ ҙа. Ул түләүҙән баш тартҡан хәлдә бурысын суд аша ҡайтара алаһығыҙ.

### ҮҘ ӨЛӨШӨ

**Өс бүлмәле хосусилаштырылған фатирҙа һәр кемдең өстән бер өлөшө бар ине. Әсәйебеҙ үлгәс, атайыбыҙ өйләнде һәм ҡатынын беҙҙең фатирҙа теркәтеп, үҙ өлөшөн бирҙе. Атайыбыҙ ҙа үлгәс, ҡатыны әлеге өлөштө бөтөнләй беҙгә таныш булмаған кешегә бүләк итеп, үҙ яғына, Украинаға ҡайтып китте. Ул үҙ өлөшөн кемгә теләй, шуға бүләк итеп дөрөҫ эшләнеме?**

Атайығыҙҙың яңы ҡатыны үҙ ҡарамағындағы өлөшөн нисек теләй, шулай файҙалана ала ине һәм ул шулай эшләгән дә. Әгәр ул һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөгән хәлдә өлөштө һатып алыу өсөн һеҙ өҫтөнлөклө хоҡуҡ менән файҙаланыр инегеҙ, ләкин был осраҡта атайығыҙҙың ҡатыны бүләк итеүгә килешеү төҙөгән.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



### Йүткереүҙән дауа

Киҙеү менән ауырыусылар һаман бар. Һалҡын тейҙереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йүткереү ҙә оҙаҡ үтмәй яфаландыра. Гәзит уҡыусыларға ҡурылдай һәм быуылып йүткереүҙән дауа тәҡдим итәм. Бының өсөн таҙартылған һәм туралған 500 грамм һуғанға 50 грамм бал, 40 грамм шәкәр ҡушығыҙ һәм 1 литр һыу өҫтәп, 3 сәғәт һүрән утта тотоғоҙ. Болғатып торорға онотмағыҙ. Ҡатнашма һыуынғас, быяла һауытҡа һалып, ныҡ итеп йбырға. Көнөнә 4-6 мәртәбә 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

### Үксә тибенгеһе

Тәндә матдәләр алмашыныуы боҙолоу һөҙөмтәһендә үксә һөйәгенә үксә тибенгеһе (шпора пяточная) сыға, һыҙлай, баҫып булмай башлай. Был сирҙән дә дауаланып була:

❖ атлағанда аяҡ ауыртмаһын өсөн шешкә фольга йбырға;

❖ прополистан компресс йбырға;

❖ ашамайынса, ауыҙҙы сайҡамайынса төкөрөктө шешкә һөртөргә;

❖ тартылған ҡыҙыл боростo ойоҡбашҡа һалып, көн буйы йөрөргә.

### Тимерәү

Тимерәү йоғоусан, тиҙ таралыусан сир. Уны түбәндәге ысулдар менән дауаларға була:

❖ киптерелгән 10 грамм андыҙ тамырын ваҡлап, сусҡаның ҡайнатып иретелгән 50 грамм эс майына ҡушаһың һәм 15 минут ҡайнатып һөҙәһең. Шул майҙы тимерәүгә һөртәһең;

❖ сөйәл үләне (чистотел) төнәтмәһе лә килешә. Сөйәл үләненең ваҡланған тамыры, һабаҡтарын ярты стакан алаһың һәм ярты литр спиртҡа һалып, 5-7 минут төнәтергә, һөҙөргә, уның менән тимерәүле ерҙе эшкәртергә, аҙаҡ балыҡ майы һөртөргә;

❖ бер стакан ҡайын бөрөһөнә бер стакан ҡайнаған һыу ҡояһың һәм 15-30 минут ҡайнатып, һөҙәһең. Тимерәүле урынға һөртәһең.

### Шәкәр ауырыуы

2 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһын йыуып, кистән 1 стакан ҡатыҡҡа һалып ҡуйырға. Иртәнсәк ошо ҡарабойҙайҙы ашағас, төшкә тиклем ашауҙан тыйылып торорға.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ ***Бала бик һәләтле һәм яңы ишеткәнен тиҙ үҙләштерә икән, мәктәптә уға ла ҡыҙыҡ булмаясаҡ, сөнки бер үк нәмәне ун тапҡыр тыңлап, тиҫтерҙәренең еңел һорауҙарға яуап бирә алмауын күҙәтеп ултырыуы уны тиҙ ялҡытасаҡ.***



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# УҠЫРҒА ТЕЛӘМӘҺӘ...

## теләк тыуҙырыр саралар бар

**Берҙән-бер көн килеп башланғыс класта ғына уҡыған улығыҙ йәки ҡыҙығыҙ мәктәпкә барыуҙан баш тартыуы ла бар. Юғары категориялы, тәжрибәле уҡытыусының: "Улым мин эшләгән мәктәптә икенсе синыфта уҡый. Уҡырға барғансы һәр нәмә менән ҡыҙыҡһынған балам бөтөнләй мәктәпкә йөрөргә теләмәй, өйгә бирелгән эштәрҙе лә илай-илай башҡарабыҙ", - тип зарланғанын ишетергә тура килгәйне.**

Бындай осраҡта баланың ни өсөн уҡыусы статусына ауыр күнегеүен асыҡлау мөһим. Проблема уҡытыусыла ла, үҙләштереүе ауыр булған мәктәп программаһында ла, уҡырға этәргес көс булмауында, йәғни баланың мәктәпкә әҙер түгеллегендә лә булыуы ихтимал. "Быйыл уҡырға бараһыңмы?" тигән һорауға алты йәшлек баланың ышаныслы итеп баш ҡағыуы әле бер нәмә тураһында ла һөйләмәй. Бала һәр саҡ нимәләр белергә ынтыла. Әммә мәктәп - ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс урын ғына түгел. Ул бында дисциплинаға, үҙен коллективта тоторға, аралашырға өйрәнә. Шуға ла баланың уҡырға теләге юҡ икән, ул беренсе ауырлыҡтар алдында уҡ ҡаушап төшә. Бала бик һәләтле һәм яңы ишеткәнен тиҙ үҙләштерә икән, мәктәптә уға ла ҡыҙыҡ булмаясаҡ, сөнки бер үк нәмәне ун тапҡыр тыңлап, тиҫтерҙәренең еңел генә һорауҙарға яуап бирә алмауын күҙәтеп ултырыуы уны тиҙ ялҡытасаҡ.

Бәләкәй йәштәге мәктәп балаларының икенсе бер тибы үҙенең уңыштары өсөн гел маҡтауҙы көтә. Бындай балаларҙы социаль йүнәлешле тип атайҙар, йәғни ул үҙе өсөн абруйлы һаналған ололарға оҡшау өсөн барыһына ла, хатта тик "бишле"гә генә уҡырға ла әҙер. Әммә бала үҫеү менән уның абруйлы булған кешене, әйтәйек, уҡытыусы, ата-әсәне олораҡ дуҫтары алыштырыуы ихтимал. Ул саҡта хәл бөтөнләй киреһенә әйләнеп китеүе бар.

Белгестәр әйтеүенсә, беренсе синыфҡа барған бала өс әҙерлек төрөнә эйә булырға тейеш: интеллектуаль (донъяға киң ҡараш, билдәле күләмдә мәғлүмәт базаһы, логик фекерләү); мотивацион (бала мәктәптә ҡыҙыҡ һәм унда йөрөргә кәрәк икәнен белә); ихтыярлы (бала һәр ҡылығын уйлап башҡара, диалогҡа инә белә). Был әҙерлектәрҙең береһе генә булмаһа ла, иртәме-һуңмы, ауырлыҡтар тыуасаҡ. Шуға ла психологтар баланы мәктәпкә уҡырға бирер алдынан уның әҙерлек кимәлен тикшереп ҡарарға тәҡдим итә.

Бер нәмә лә эшләргә яратмаған һәм белемде ауыр үҙләштергән балала уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятырға тырышығыҙ. Мәҫәлән, бала һүрәт төшөрөргә ярата икән, ти. Тик һүрәт төшөргән ваҡытта нимә һәм ни өсөн төшөрөүен ҡыҫҡырып һөйләһен. Шул рәүешле төрлө фантастик хикәйәләр төҙөргә һәм уларҙы яҙы белем менән байытырға була. Фекер, ҡул моторикаһы үҫеше, бер урында оҙаҡ ултырырға өйрәнеү һәм белем тәрәнәйтеүҙең был иң яҡшы ысулы.

Ҡайһы саҡта мәктәптә тик яҡшы билдәләргә генә уҡып йөрөгән баланың ҡапыл уҡырға йөрөүҙән баш тартыуы бар. Проблеманың сәбәбе бер нисә булыуы ихтимал. Беренсеһе - бала ҡатмарлы мәғлүмәтте үҙләштерел өлгөрмәй. Икенсеһе - күргәҙмә материалдың аҙ булыуы. Был донъяны тоҫ, тәм, форма буйынса ҡабул итергә күнеккән балаға яңы төшөнсәләрҙе һүҙҙә генә ҡабул итеүе ауыр. Өсөнсөһө - бала ниндәйҙер сәбәп арҡаһында үтелгән дәрестең темаһын аңламай ҡала һәм уның артабан белем алыуға ҡыҙыҡһыныуы һүрелә. Һөҙөмтәлә насар билдәләр ала башлаған балаға ата-әсә генә ярҙам итә ала. Әммә был университеттың беренсе курсына тиклем балаға өйгә эш эшләшергә кәрәк, тигәндә аңлатмай. Башланғыс синыфтарҙа уҡ балала үҙаллылыҡ тәрбиәләү мөһим. Ҡайһы бер ата-әсәләр насар билдә йәки тәртибе өсөн балаһын китап уҡырға ултыртып ҡуя. Бер ҡасан да уҡыуҙы яза менән йәнәш ҡуйырға ярамай.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

**Бер танышым: "Ҡыҙымды Өфөгә уҡырға ебәрмәйем, Магнитогорскиҙа уҡыр. Юғиһә, тегендә бит йәшәү ҡиммәт тиҙәр" , - тигән уйҙары менән уртаҡлашып киткәс, "Студент кешегә айына күпме аҡса етә?" тигән һорауға яуап эҙләргә тотондом. Сөнки күп кенә ата-әсә тап бына ошондай шик-шөбһәләре арҡаһында балаларын ҡайҙа булһа ла яҡындараҡ урынлашҡан уҡыу йортона бирергә тырыша. Бер яҡтан, һағынғанында йыш ҡайтып йөрөр, икенсе яҡтан, ашарына өйҙән алып китеп торор, тиеп фекер йөрөтә улар. Быға аптырайһы ла түгел, бөгөн бит бар нәмәгә хаҡтар көндән-көн тиерлек артып ҡына тора. Ә студенттың стипендияһы бер көйө ҡала килә: "өслө"ләрһеҙ уҡыһаң - 1227,5 һум; "бишле"гә генә уҡыһаң - 1840,58 һум; сиреккә сыҡҡан бишле билдәләре дөйөм билдәләр һанының 75 процентын тәшкил иткән осраҡта уртаса стипендия түләйҙәр - 1581,25 һум. Баш ҡалаға алыҫ районда уҡырға килеп, ошо уртаса стипендияға, йәғни 1581,25 һумға ай буйына йәшәргә мөмкинме?**

# НИСЕК ЙӘШӘЙҺЕҢ, СТУДЕНТ?



## Осон осҡа ялғап инде...

### Туҡланыу

Алыҫ райондан Өфөгә килеп белем алыусы студентҡа аҙыҡ-түлекте ата-әсәһе йыш ебәреп тора ала икән, туҡланыу менән ҡыйынлыҡтар тыумаясаҡ. Ата-әсәләрҙең ҙурҙур юл сумкаларын кәрәкле барлыҡ ярма, май, ит, ҡайнатмалар менән тыңҡыслап тултырып, йә туғандары аша, йә маршрут автобусына сығарып биреп ебәреүе мөмкинлектәре булһа, тимәк, уларҙың студент балаһы мең ярым стипендияһын икмәк һатып алыуға һәм башҡа ваҡ-төйәккә генә сарыф итәсәк һәм был сумма уға тулыһынса етәсәк, тигән һүҙ. Әгәр ҙә инде ата-әсә был мөмкинлектәрҙе файҙалана алмай икән, тимәк, студенттарға икеөс айға бер ҡайтҡанында ошо уҡ миҡдарҙа аҙыҡ-түлекте үҙ елкәһендә йөкмәп килтерергә тура киләсәк. Йә булмаһа, ата-әсә аҡсаны күберәк биреп ебәреүе мөмкин. Әммә ауыл ерендә эше күп булһа ла, аҡсаһы наҡыҫыраҡ бит.

Ә инде өйҙән аҡса килмәһә, стипендияға ғына йәшәгән студентҡа аҙыҡ-түлектең осһоҙораҡ хаҡлыһын ҡарап алырға кәрәк. Сөнки ҡиммәте лә, осһоҙо ла күп саҡта бер үк сифатҡа эйә. Бының өсөн ҡулайлы социаль магазиндар етерлек. Хатта аҙыҡ-түлеккә хаҡтар ике тапҡырға артҡан ваҡытта ла ҡайһы бер социаль магазиндарҙа ярайһы уҡ осһоҙ хаҡҡа кәрәкле тауар алырға мөмкин. Шулай ҙа магазинға бер сыҡҡанда 150 һумдан да кәм аҡса китмәй, тимәк, һирәгерәк, 4-5 көнгә бер йөрөргә кәрәк.

### Күңел асыу

Студенттар - ярлы халыҡ, әммә күңелле халыҡ. Тамағына ашарға булмаһа, булмаҫ, әммә күңел асырға аҡса таба ул йәш кеше. Нисек итеп күңел аса һуң улар бөгөн? Киноға, театрға, концерттарға, төнгө клубҡа баралар, йә булмаһа, бер тапҡыр тәмле итеп кафе, бистроларҙа ашап сығалар. Киноға барған саҡта аҡсаны нисек аҙыраҡ тотонорға мөмкин булыуын ҡарап үтәйек. Беренсенән, студенттар өсөн ярты хаҡҡа махсус ташлама булған көндә барырға була. Был көндәр төрлө кинотеатрҙарҙа төрлөсә билдәләнгән. Икенсенән, бушлай кино ҡарау мөмкинлеге биргән сертификаттар таратылған осорҙа ситтә ятып ҡалмаҫҡа кәрәк. Ошо уҡ варианттар театрға барыу өсөн дә ҡулайлы. Театрҙарҙа таныштарың булһа, спектакль ҡарарға икенсе ишектән бөтөнләй бушлай инеп ултыра алаһың, һирәктәр өсөн был юл да асыҡ. Ә бына төнгө клубтарға йөрөргә яратыусылар бер сыҡҡанда кәмендә өс йөҙ һум сарыф итәләр. Клубҡа инеү өсөн, юлға һәм башҡаларға стипендияндың яртыһы ла еңел генә осоп сығып китеүе бар. Сығымдарыңдың күләме күпмене тәшкил итәсәге үҙеңдән тора. Әммә аңлы студент был рәүешле аҡсаһын туҙҙырыуҙы үҙ итмәҫ, тип ышанғы килә.

Кино, театр, клуб тинек, ә музейҙар? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, музейҙарға бөгөн йәштәр бик һирәк йөрөй. Хатта баш ҡалабыҙҙа урынлашҡан ниндәй өс музейҙы инеп күреүен атарға ҡушһаң, бик һирәктәр генә был мәсьәләне йырып сығыр.

Кем өсөн күңел асыу - кино, клубтарға йөрөү, кем өсөн - айына бер тапҡыр булһа ла китап магазинына барып, ҡыҙыҡһындырған китап тотоп ҡайтыу. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, китаптар бөгөн бик ҡиммәт тора. Бер-бере 250-400 һумға барып баҫа. Мең ярым стипендияның өстән бер өлөшөн китапҡа һалыу ҡамасауламаҫ ине лә, ай буйы йәшәргә кәрәклеген иҫенә төшөрөп кенә тотҡарланып ҡалырға мөмкин.

### Юл йөрөү

Алыҫ райондан килеп белем алыусы студенттар өсөн был мәсьәлә бигерәк тә киҫкен тора. Сөнки ҡайтып килеү өсөн мең һумдан артыҡ аҡса китә. Мәҫәлән, Әбйәлил районына поезд хаҡы яҡынса 513 һум, автобусҡа 540 һум, "Газель" 450 һум тора. Тик был иң осһоҙо булған "Газель" Өфө трассаһы буйында урынлашҡан ауылдар өсөн генә ҡулайлы, был юлдан ситтә йәшәүселәр өсөн икенсе транспорт саралырына ла мөрәжәғәт итергә тура килә. Шунлыҡтан да алыҫта йәшәүсе студенттар ауылға ата-әсәһе яныла ике-өс айға бер ҡайтып килергә күнеккән. Өс көнлөк ялға ҡайтам тип, юлға сарыф ителәсәк аҡсаны ятаҡта тағы бер ай йәшәп тороу өсөн файҙаланыуҙы хуп күрә күптәр.

### Уҡыу

Уҡыу барышында семинарҙарға әҙерләнгәндә, кәрәкле реферат, курс эше һәм башҡа өйгә эштәрҙе башҡарғанда ла аҡса һуңғы ролде уйнамай. Мәҫәлән, семинарға кәрәкле материал әсбапта юҡ икән, уны бөгөн замана студенты китапханала эҙләмәй, ә интернет селтәренән таба. Һәм әгәр ҙә был мәғлүмәттәрҙе дәфтәргә күсереп яҙырға ваҡыты тығыҙ булһа, уны аҡ ҡағыҙға сығартып ҡына ала. Бер битте сығартыу ике, йә өс һум. Реферат яҙғанда ла шул уҡ осраҡ. Хәҙер ҡайһы бер уҡытыусылар компьютерҙа йыйылған эштәрҙе генә ҡабул итә, өҫтәүенә, текстар улар ҡуйған махсус ҡағыҙәләр буйынса төҙөләргә тейеш. Саҡ ҡына тайпылыш булһа, түбәнәйтелгән баһа ҡуйыла йә был эшең бөтөнләй ҡабул ителмәүе бар. Ғөмүмән, яҡшылап һәр бер битен айырым файлға тыҡып, папкаға һалып эшләнгән егерме биш битлек эш кеҫәңдә йөҙ һумдан ашыуға йөкарта. Бынан тыш, кәрәкле китаптар, программалар һатып алырға тура килеүе лә бар. Шунлыҡтан, кәмендә ике йөҙ һум аҡсаны мотлаҡ уҡыуҙа кәрәк буласаҡ әйберҙәр өсөн генә тотонорға ҡалдырырға кәрәк. Дәфтәр, ручкаға килгәндә, иң осһоҙло дөйөм дәфтәр 11 һум, ә ручканы 5-10 һум тирәһенә һатып алырға мөмкин. Ғәҙәттә, ярты йылға ун дөйөм дәфтәр етә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө көндә республикабыҙҙа балаларға, йәштәргә төрлө ярҙам күрһәтелә. Мәҫәлән, әсәлек капиталы, күп балалы йә аҙ тәьмин ителгән ғаиләнән булған студенттарға социаль стипендия бүленә. Бөгөнгө көндә студенттар өсөн социаль стипендия өлгәш стипендияһына өҫтәмә рәүештә 1840,58 һум күләмендә түләнә. Тик студент ниндәй генә ауырлыҡ кисермәһен, барыһына ла был өҫтөнлөк бирелмәй. Ярты йылға бер тапҡыр бүленеүсе матди ярҙам аҡсаһы өс йөҙ һум ғына булһа ла күп кенә осраҡта тағы ла шул социаль ярҙам алыусыларға юлландырыла. Шунан нисек мең ярымға йәшәмәйһең? Ат тулап, тәртә ватмаған кеүек, студент үрһәләнеп кенә ни ҡыйрата алыр. Кешене гәйепләгәнсе, сәбәпте үҙеңдә эҙләгәнең хәйерле. Ошолай фекер йөрөтөүселәр яҡшыраҡ уҡырға, тиҙерәк эшкә урынлашырға ашыға. Һәм нисек кенә эш менән уҡыуҙы аралаштырыу ауыр булмаһын, ике ҡуяндың ҡойроғон тотоп килеүселәр йыллдан-йыл арта.**

**Сәриә ҒАРИПОВА,**
**БДУ студенты.**

АРҪАҠЛЫ БАШҠОРТТАР



Рәфис БАТЫРҠАЙ һүрәте.

# ЮЛАЙ АҪНАЛИН

## (1722-1798 йылдар тирәһе)

**Башҡорт халҡының күп быуаттарға һуҙылған милли-азатлыҡ көрәше тарихында яугир юлбашсы Салауат Юлаев менән бергә уның атаһы - арҙаҡлы ил ағаһы, 1773-1775 йылдарҙағы Крәстиәндәр һуғышы ҡаһарманы, баш күтәреүселәр армияһының полковнигы, Башҡортостандың Себер юлы атаманы, старшина Юлай Аҙналиндың исеме гәйәт ҙур һәм маҡтаулы урында тора. Юлай Аҙналин 1773 йылдың ноябрь аҙағында уҡ баш күтәреүселәр сафына ҡушыла һәм ихтилалдың һуңғы айҙарына тиклем Салауат менән йәнәш бик күп бәрелештәрҙә ҡатнаша, ғәскәр менән етәкселек итә, яугир улына һәр ваҡыт иң яҡын таяныс һәм ярҙамсы була. Ниһайәт, ихтилал баҫтырылғас, улы Салауаттың фажиғәле яҙмышын уртаҡлай: уларҙың икеһен дә 175-әр мәртәбә ҡамсы менән һуҡтыралар, танауҙарын ҡырҡалар, маңлайҙарына ҡыҙған тимер менән "З", "Б", "И" (злодей, бунтовщик, изменник) тигән хәрефтәр баҫалар һәм Эстониялағы Рогервик (хәҙерге Палдиски) портына мәңгелек һөргөнгә ебәрәләр.**

Юлай Аҙналин ихтилалда ҡатнашыусылар араһында ҙур тормош юлы үткән оло йәштәге тәжрибәле кеше була. А. С. Пушкин үҙенең "Пугачев тарихы" әҫәрендә Юлай Аҙналинды "карт боласы", ә икенсе рус яҙыусыһы, Ф. Д. Нефедов, "бик арҙаҡлы шәхес" тип атай, Юлай хаҡында 1880 йылда уҡ әле ошолай тип яҙа: "Аҫаба башҡорт, бай, аҡыллы һәм абруйлы кеше булған. Башҡорттар уға ихтирам менән ҡараған, ул бер рәттән бер нисә тапҡыр һайланып, олос старшинаһы булып торған. Урындағы власть башҡорт старшинаһына ышаныс менән ҡараған. Уның рус хөкүмәтенә тоғро булыуына бер ниндәй ҙә шик төшмәгән. Бына шуға күрә, бөтөн сыуалыштарға һәм эҙәрләүҙәргә ҡарамаҫтан, Юлай үҙ урынында имен генә ҡала килгән. Етмәһә, 1768 йылда Ырымбур губернаторы кенәз Путятин үҙе Юлайҙы башҡорт командаһының старшинаһы итеп тәғәйенләй. Әммә башҡорт старшинаһы асылда бер ҙә ундай булмаған, ә үҙен хөкүмәткә тоғро кеше итеп оҫта күрһәтә генә белгән. Юлайҙың күҙе алдында башҡорт ауылдары яндырыла, ил бөлгөнлөккә төшөрөлә. Әҫәм заводын һәм завод аулдарын һалдырғанда сауҙагәр Твердышев... уның ерҙәрен тартып ала. Үҙ Ватанын бөтөн йөнәтәне менән һөйгән ысын башҡорт Юлай быға тыныс күңел менән ҡарай алмай: ул үҙенең тойғоларын йәшереп, эстән ризаһыҙлыҡ һаҡлай һәм үс тота. Шундай кеше була Салауаттың атаһы".

Очерк башлыса документаль материалдарға нигеҙләнгән, унда Юлай Аҙналинға шәхес булараҡ дөрөҫ ҡылыҡһырлама бирелгән.

"Юлай төплө ҡарашлы кеше, ул ғәҙеллек өсөн ҡурҡмай көрәшә. Аҫаба башҡорт ерҙәренең таланыуына юл ҡуйғаны өсөн төбәк хакимиәттәренә һәм башҡорт феодалдарына ҡаршы сыға",- тип яҙа Салауат Юлаев тормошона арналған танылған китаптарҙың авторы, тарих фәндәре кандидаты В. В. Сидоров. Шуның менән бергә уның тормошонда, рус армияһының хәрби походтарында ҡатнашып, шул йәһәттән ҙур ғына тәжрибә туплау факты ла билдәле әһәмиәт ҡаҙана. Дөйөм алғанда, Юлай, һис шикһеҙ, үҙ дәүеренә башҡорт йәмғиәтенең алдынғы ҡарашлы, халыҡ мәнфәғәте өсөн әҙмә-эҙлекле көрәшеүсе оло бер шәхесе була. Уның бала сағы башҡорт халҡының 1735-1740 йылдарҙағы бөйөк милли-азатлыҡ һуғышы дәүеренә тура килә. Ә инде А. С. Пушкиндың "карт боласы" тигән һүҙҙәре Юлайҙың 1755 йылғы башҡорт ихтилалында ла (Батырша яуында) ҡатнашыуын күҙ уңында тотоп әйтелгән булырға тейеш.

Юлай башҡорт халҡын бөлгөнлөккә төшөрөүсе законһыҙлыҡтарға, башҡорт ерҙәрен талаусыларға ҡырҡа ҡаршы сыға. Ожмахҡа тиң менәрләгән дисәтинә башҡорт ерҙәрен алдашыу юлы менән, рус заводсыларына ҡортомға биреүгә ҡаршы оҙаҡ йылдар буйы тиңһеҙ көрәш алып бара.

1772 йылда Юлай 3 мең кешелек башҡорт атлы ғәскәре составында бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылған Полыпа конфедераттарына һәм баш күтәргән Литва отрядтарына ҡаршы һуғыштарҙа, 1773 йылда дон казағы Е. И. Пугачев етәкселегендә башланған Рәсәй империяһын дер һелкетәсәк бөйөк Крәстиәндәр һуғышында ҡатнаша.

1774 йылдың 2 июнендә Салауат ғәскәре Үрге Ҡыйғы ауылы эргәһендә Пугачев ғәскәре менән осраша. Пугачев Салауатҡа бригадир дәрәжәһе бирә, ә Юлайҙы Башҡортостандың Себер юлы баш атаманы итеп билдәләй.

1774 йылдың июленән һуң Себер юлы Башҡортостанда ихтилалдың үҙәгенә әйләнә, ә Салауат менән Юлай баш күтәреүселәрҙең төп етәкселәре булып китә. Улар август һәм сентябрь айҙарында Себер һәм Уҫы юлдарында хәрәкәт итә. Салауат был осорҙа Йырал ауылында урынлаша. Ошонан тороп, Салауат һәм Юлай Ҡатау заводын октябрь айына тиклем ҡамауҙа тоталар. 1774 йылдың 10 сентябрендә Юлай Аҙналин һәм Салауат Юлаев Ҡатау заводы етәкселәренә һәм приказчиктарына тыныс юл менән, баш күтәреүселәрҙең шарттарына күнеп, Е. И. Пугачев хакимлығына буйһонорға өндәгән хат менән мөрәжәғәт итә. Был документта Юлай менән Салауаттың хатта һуғыш шарттарында ла ҡырҡыу мәсьәләләрҙә килешеү юлы менән хәл итеү, рус менән башҡорттоң үҙ-ара татыу йәшәү мөнәсәбәттәренән сығып эш итеүе күренеп тора.

1773 йылдың ошо уҡ сентябрь айында Салауат ғәскәре Борай олосоноң Тимошкин, Нөркә ауылдары эргәһендә хөкүмәт ғәскәрҙәре менән аяуһыҙ алышып, күп юғалтыуҙар кисерә. Башҡортостандың бөтөн тарафтарын каратэлдәр ҡамап ала. Ошондай шарттарҙа Юлай хөкүмәт ғәскәрҙәре менән һөйләшеү алып бара башлай һәм тиҙҙән "тоғро" старшиналар уны яҙалау отряды командиры коллежский советник Тимашевҡа тотоп бирә. 25 ноябрҙә Салауатты тоталар. Оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған яуап алыуҙар башлана. Салауат та, Юлай ҙа үҙҙәрен ғәйепле итеп танымай. Аталы-уллы батырҙар үҙҙәренең бөтөн ғүмерҙәрен ил, халыҡ азатлығы өсөн көрәш идеяһына тоғролоҡ өлгөһө итеп күрһәтә. 1775 йылдың 3 октябрендә уларҙы ҡөслә һаҡ аҫтында мәңгелеккә каторгаға оҙаталар. 29 ноябрҙә каторжандар, күп меңләгән саҡрым ерҙәрҙе үтеп, Рогервик портына барып етәләр. Салауат менән Юлайҙың ҡалған ғүмере Балтик буйындағы ошо портта үтә.

Юлай Аҙналин - башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, Тыуған ере- нең азатлығы өсөн көрәшкән бөйөк шәхестәрҙең береһе. Уның исеме Ҡараһаҡал, Батырша, Кинйә, Салауаттар менән бер дәрәжәлә торорға тейеш. Үкенескә ҡаршы, был атаҡлы тарихи шәхескә әле һаман да хаҡлы баһа бирелмәгән.

**Рәшит ШӘКҮР.**

**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!

# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР



## Шәмсетдин Яҡшығилдин

**1896 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер улысының Матрай (Мөхәмәтрәхим) ауылында (хәҙерге Йылайыр районы) тыуған.**



1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. 1918 йылдың апрелендә яраланып, августа тиклем госпиталдә ята. Унан тыуған яғына ҡайта. 1918 йылдың аҙағында башҡорт армияһына хеҙмәткә алына. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, Ш. Яҡшығилдин башҡорт полктары составында Саранск ҡалаһына оҙатыла. Бында ул Айырым Башҡорт бригадаһының (аҙаҡ бригада Башҡорт кавалерия дивизияһы итеп үҙгәртелә) 2-се кавалерия полкында була. Ошо полк составында ул 1919 йылдың июнендә Көньяҡ фронтҡа (Украинаға), Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡа оҙатыла. Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнашҡандан һуң Шәмсетдин Яҡшығилдин 1919 йылдың сентябрендә, Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Петроград янына Юденич армияһына ҡаршы һуғышҡа оҙатыла. Бында ул Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө составына ингән 3-сө Башҡорт кавалерия полкында взвод менән етәкселек итә.

Петроградта башҡорт ғәскәрҙәрен театрҙар, музейҙарға йөрөтәләр. Бер мәл башҡорт һалдаттары Петроградтың тарих музейына экскурсияға барғанда Шәмсетдин Яҡшығилдиндың һабы алтын һәм көмөш менән биҙәлгән боронғо бер ҡылысҡа күҙе төшә. Хайран ҡалып ҡарап торған мәлдә музей хеҙмәткәре килеп, был ҡылыстың тарихын һөйләп бирә: рус-төрөк һуғышы ваҡытында ҡулға төшкән бер төрөк генералыныҡы икән. Башҡорт яугирының ныҡ ҡыҙыҡһыныуын күргән музей хеҙмәткәрҙәре уға был зиннәтле ҡылысты бүләк итә. Дошмандарҙы ҡырып бөткәс, ҡылысты музейға ҡабат ҡайтарырһығыҙ, тиҙәр улар Шәмсетдингә. Әммә башҡорт яугирына был ҡылысты тиҙ арала ғына музейға ҡайтарып бирергә тура килмәй. 1920 йылда 1-се Башҡорт кавалерия полкы составында Шәмсетдин Польша фронтына, Муса Мортазин етәкселек иткән Башҡорт кавалерия бригадаһына оҙатыла. Поляктарға ҡаршы һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Шәмсетдин Яҡшығилдин 1921 йылда Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Киев хәрби округы Реввоенсоветының 1921 йылдың 29 сентябрендәге фарманында былай тиелгән: "3-сө эскадрондың взвод командиры Яҡшығилдин Шәмсетдин иптәш полк командиры һәм ике ҡыҙылармеец менән бергә Гоноровка ауылы янындағы быуаны баҫып алып, дошмандың биш орудиеһының, былау һәм пехота частарының сигенеү юлын киҫте. Ошонаң һөҙөмтәһендә дошмандың ошо частары бөтәһе лә беҙҙең ҡулға төштө". Орден менән бүләкләү тураһындағы фарман 1922 йылдың 7 февралендә РСФСР Реввоенсоветының 34-се фарманы менән раҫлана.

Шәмсетдин Яҡшығилдин демобилизациялаһып, тыуған яғына ҡайтыр алдынан төрөк ҡылысын Петроград музейына тапшырығыҙ, тип, Ҡыҙыл (Червоная) казак дивизияһына ҡалдырып китә.Тыуған яғына ҡайтҡас, 1922 йылдың февралендә Матрай ауыл Советының тәүге рәйесе итеп һайлана. Артабан, 30-сы йылдарҙа "Новый мир" колхозының рәйесе була. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Яраланып, 1943 йылда демобилизациялана. Ул 1973 йылда, 77 йәшендә донъя ҡуя.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

✓ *Ат яратыу мәҙәниәтен беҙ, үкенескә ҡаршы, онотҡанбыҙ. Олатайҙар, атайҙар балаларына, ейәндәренә ат яратырға өйрәтмәй, сөнки уларҙың күбеһе үҙҙәре лә нисек итеп ат яратырға хәҙер белмәй.*



# Олатайҙарҙың Парижғаса

(Башы 1-се биттә).

## Унда артистарҙы көтмәйҙәр...

Беҙҙе былтыр Бородино яланына индермәнеләр. Сәхнә өсөн генә тегелгән декоратив кейемдәр, ике ҡойроҡло төлкө бүректәр менән беҙҙе унда яҡын да юлатмайҙар. Рәмил Рәхимов етәкләгән "Өфө пехота полкы" ғына унда ҡатнашыу бәхетенә иреште. Белеүебеҙсә, мең һалдаттан торған йәйәүле гарнизон полкында төрлө милләт вәкилдәре, шул иҫәптән башҡорттар ҙа булған. Атлы полктарға килгәндә, 28 башҡорт, 2-шәр мишәр һәм типтәр, йәмғеһе 32 атлы полк төҙөлгән. Иҫәпләп ҡарағыҙ: һәр полкта 500-әр яугир, һәр яугирҙың 2-шәр аты булған. Бынан тыш, башҡорттар Рәсәй армияһына өҫтәмә рәүештә 4139 баш яу аты бүләк иткән. Рәмил етәкләгән клуб шул дәүерҙең стандарт хәрби мундирҙарын үҙ аҡсаһына үҙ ҡулдары менән хәстәрләй. Беҙҙекеләрҙән тик минең генә хәрби кейемем бар. 1812 йылғы башҡорт яугирының тарихи кейемен әҙерләү генә хәҙерге аҡса менән 25-30 меңгә төшөр ине. Ошоларға ике атты, яу ҡоралдарын ҡушһаҡ, сумма 100 меңдән ашып китә. Мин аңлайым, халҡыбыҙҙың ҙур өлөшө ауылдарҙа йәшәй, аҡса хәҙер күп нәмәгә етмәй. Ә бында һүҙ донья кимәлендә беҙҙең яугирлыҡ брендыбыҙҙы, киләсәгебеҙҙе тәьмин итерлек сара тураһында бара. Әҙәм мәсхәрәһе, Салауат батырыбыҙ йыйынында яугирҙар өҫтәренә сәхнәлә кейә торған елән, аяҡтарына кроссовки кейеп, ҡулына фанера ҡалҡан тотоп атҡа атлана. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та. Етәкселәребеҙ, ана, Кирсан Илюмжиновтан үрнәк алһын, исмаһам, ул ҡалмыҡтың Жаңғыр батыр байрамында үҙе Жаңғыр батыр булып кейенеп сыҡты. Беҙҙә, иһә, байрамдар хужаларҙың ҡымыҙ эсеү сараһына, һабантуйҙар филармония һәм клуб әртистәренең байрамына ғына әүерелде.

Телевизорҙан венгрҙарҙың ҡоролтайын күреп, иҫ-аҡылыбыҙ ҡороно. Уларҙың милли кейемдәрендә бер ниндәй ҙә декоративлыҡ юҡ, президенттары, бургомистрҙары байрамға милли кейем кейеп килгән.

Беҙ цивилизациялы донъяла йәшәйбеҙ икән, аҡсабыҙ, башҡа мөмкинлегебеҙ бармы-юҡмы, тарих арбаһынан төшөп ҡалырға теләмәһәк, республикабыҙҙа ниндәй етәкселек булһа ла, 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығын лайыҡлы үткәрергә бурыслыбыҙ. Был эш чиновниктың форматына түгел, үҙ ваҡытында бар донъяны шаулатҡан Төньяҡ амурҙарының ейән-ейәнсәрҙәренең аңына бәйле. Беҙгә пикеттарға сығып шауларға, айға ҡарап олорға түгел, ергә төшөргә һәм туп-тура атлап барырға кәрәк. Беҙҙең егеттәр хатта "Айт-два"ны ла белмәй. Ҡыҙыу баштар: "Әйҙә, тотайыҡ та аттарға атланып барайыҡ Бородиноға",- тиер. Кейемең, эйәрле-йүгәнле , алыҫ юлға махсус әҙерләнгән атың булмағас, унда нимәң менән бараһың? Унда бит филармонияны көтмәйҙәр. Унда артистар йыйылмай, унда һинең һымаҡ, минең һымаҡ кешеләрҙең ирекле ойошмаһы.

## Ысын баһа алдыҡ...

Бородино яланында беҙҙең халыҡҡа мөнәсәбәт иҫ киткес кинәнесле. Әйткәндәй, унда беҙҙең халыҡҡа ысын мәғәнәһендәге баһа бирелә. Ундай баһаны беҙ хатта үҙ республикабыҙҙа ла ишеткәнебеҙ юҡ. "Башкиры приехали, праздник состоится", тип ҡыуана-ҡыуана ат өҫтөндә сабыша башлай Дон казактары. Беҙҙе автобустан ергә баҫтырмайынса, күтәреп алалар. Бер барғанда ҡойоп ямғыр яуып үткәйне. Мине ҡулдарына күтәреп, күләүекте үҙҙәре кисеп, ҡоро ергә баҫтырҙылар. Ундай хөрмәтте мин бер урында ла күргәнем булманы. Казактар ул саҡта мине түгел, Төньяҡ амурҙарын хөрмәтләүен белдерҙе. Беҙ ситкә сыҡҡанда һәр ваҡыт: "Беҙҙе унда нисек ҡабул итерҙәр икән, ҡырын ҡарамаҫтар микән?" - тип уйлап яңылышабыҙ. Беҙгә унда ҡырын ҡараш бөтөнләй юҡ. Унда беҙгә: "Мин үҙ халҡымдың намыҫын аҡлай алырмынмы икән?" - тигән уйҙар менән генә барырға кәрәк. Элекке йыл алтмыш йәшлек Дон казагы атаман Мартынов маневр ваҡытында эйәренән ҡолап ҡалғайны. Уның атын беҙгә тапшырҙылар, минең егетем Байрас Абдуллин ҡоламаны. Ә бит элек-электән башҡортҡа аттан ҡолап ҡалыуҙан да ҙурыраҡ мәсхәрә булмаған. Бородино яланы беҙҙең ер ул. Унда олатайҙарыбыҙ ҡаны һеңгән. Мәскәү ҙә беҙҙең ҡала, сөнки полковник Кудашев етәкселегендә башҡорт, мишәр яугирҙары ҡаланы янғындан һаҡлап ҡалған. Бородинола үткән сараға ҡаҙаҡтарҙы, ҡырғыҙҙарҙы, татарҙарҙы ҡатнаштырмайҙар, улар был яланда барған байрамдың тамашасыһы ғына, ә беҙҙең, ғәфү итегеҙ, кейемебеҙ юҡ. Был сарала ҡатнашыу беҙҙең республиканың кисекмәҫтән ҙур сәйәсәте кимәленә күтәрелергә тейеш.

Реконструкцияла Рәсәйҙең эре-эре эшҡыуарҙары ҡатнаша. Мәҫәлән, француз кирасирҙарының яу торҡаһының хаҡы ғына үҙе бер "Ланкрузер" хаҡына тиң. Ә беҙ ни эшләйбеҙ: хоккей матчы һайын гол индергән кешегә милли бүрек таратыу менән генә шөғөлләнәбеҙ. Ҡайҙа һуң һеҙ, Төньяҡ амурҙары ейәндәре? Ҡайҙа тархандар, старшиналарҙың вариҫтары? Бында "Каруанһарай" фольклор-эстрада төркөмөнөң киң билдәле йырын шулай үҙгәртеп йырларға ғына ҡала: "Ҡайҙа һеҙ, ҡайҙа һеҙ, "Төньяҡ амурҙары" ейәндәре?" - тип. Ни өсөн республикала альтернатив клубтар юҡ? Ни өсөн Ҡурған өйәҙендә, Исет өйәҙендә, Ырымбурҙа, Силәбелә ундай клубтар юҡ? Урындағы ҡоролтайҙар ниңә унда ҡорҡолдап ята һуң?

## Аттар юҡ, йылҡы ғына бар...

Хәҙерге ваҡытта журналистар йылҡы үрсетеүсе фермерҙарҙың шунсама аты бар, тип маҡтап яҙа, телевизорҙан күрһәтәләр. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә йылҡы ғына бар, ә аттар юҡ. Ат менән йылҡы араһында ҙур айырма бар шул. Өйөрҙә йылҡылдап йөрөгән йылҡы малы ат булһын өсөн күлдәй тир түгергә кәрәк әле беҙгә. Тәрбиәле, яратыулы йылҡы малы ғына ат була ала. Беҙҙең егеттәр бөгөн атҡа менә белмәй. Фуфайка түшәп, бер ҡулыңа тәмәке, икенсеһенә теҙген тотоп, кәкерәйеп ултырыу ғына атҡа менеүҙе аңлатмай. Ялы, ҡойроғо, һырты таралһа, көрләгәнән бейеп торһа, һине тыңлап сүкәйһә, ятһа ғына ул ысын мәғәнәһендәге ат була. Юҡҡа ғына борон-борондан "ат" һәм "исем" мәғәнәләре тигеҙ итеп ҡуйылмаған. Беҙ иһә әлеге ваҡытта атҡа тик ит, ҡаҙылыҡ, уҙа барһа ҡымыҙ биреүсе тип кенә ҡарайбыҙ. Ат яратыу мәҙәниәтен беҙ, үкенескә ҡаршы, онотҡанбыҙ. Олатайҙар, атайҙар балаларына, ейәндәренә ат яратырға өйрәтмәй, сөнки уларҙың күбеһе үҙҙәре лә нисек итеп ат яратырға хәҙер белмәй. Ағастан һырлап эйәр яһаусылар ҙа юҡ. Дон казактары был йәһәттән күпкә алға киткән. Улар ат уйната белә. Джигитовкала ал бирмәй, эйәр өҫтөндә гимнастика башҡара. Егеттәребеҙ араһында ҡамсы үрә, ҡамсыны сыбыртҡынан айыра белмәүселәр күп. Ҡамсының ни өсөн кәрәклеген дә белмәйбеҙ. Ҡамсыны һәр яугир үҙе генә белгән ысул менән, төпсөнөп-ырымлап, кешенән йәшереп кенә мунсала бикләнеп үргән. Унның төйөндәрен, башҡа зәхмәттәрен бер кеше лә күрергә тейеш булмаған. Атты ҡамсы менән ҡыумағандар, унын

***Беҙҙе былтыр Бородино яланына индермәнеләр. Сәхнә өсөн генә тегелгән декоратив кейемдәр, ике ҡойроҡло төлкө бүректәр менән беҙҙе унда яҡын да юлатмайҙар. Рәмил Рәхимов етәкләгән "Өфө пехота полкы" ғына унда ҡатнашыу бәхетенә иреште. Белеүебеҙсә, мең һалдаттан торған йәйәүле гарнизон полкында төрлө милләт вәкилдәре, шул иҫәптән башҡорттар ҙа булған. Рәмил етәкләгән клуб шул дәүерҙең стандарт хәрби мундирҙарын үҙ аҡсаһына үҙ ҡулдары менән хәстәрләй. Беҙҙекеләрҙән тик минең генә хәрби кейемем бар. 1812 йылғы башҡорт яугирының тарихи кейемен әҙерләү генә хәҙерге аҡса менән 25-30 меңгә төшөр ине. Ошоларға ике атты, яу ҡоралдарын ҡушһаҡ, сумма 100 меңдән ашып китә.***



"Төньяҡ амурҙары" клубы ағзалары - Бородинола.

***✓ Беҙ олатайҙарҙың даны менән маһаябыҙ, күп һөйләнәбеҙ, әммә бер нәмә лә эшләмәйбеҙ. Хатта олатай-ҡартаталарының 1812 йылда Парижға барып етеүен белгәндәре лә маҡтанып йөрөүҙән ары ҡыл да ҡыбырҙатмай.***

һабы менән генә ҡыуғандар. Башҡорттар рус кавалерияһындағы кеүек шпор менән аттың бөйөрөнә төртөп ҡыуыуҙы әҙәпһеҙлек һанаған. Ҡамсыны яугир дошманы менән күҙмә-күҙ ҡалып, ҡулында башҡа ҡоралы булмағанда, әсир төшмәҫ өсөн генә ҡулланған. Ҡамсы үреү өсөн иләнгән сей тире кәрәк, ә күн эшләүселәр юҡ тиерлек.

Хужаһын Парижға тиклем күтәреп алып барған башҡорт атының данын кире ҡайтарыу фарыз беҙгә. Ул аттарҙың күбеһе был юлды дағаһыҙ көйө үткән. Тарихтан белеүебеҙсә, башҡорттарҙа тимерлектәрҙе тыйыу арҡаһында яу аттарына дағалар етешмәгән, тимергә ҡытлыҡ булған. Башҡорттар барлы-юҡлы дағаларын турап, уҡ башағы итеп тотонған. Европаның ҡала-ауылдарында башҡорттарҙың нисек итеп тимер эҙләүе хаҡындағы мәғлүмәттәр теркәлеп ҡалған. Улар урамдарға килеп инеү менән тимер һынығы тәьмин ителәә, башҡорттарҙың баш кейемдәре генә уларҙы Дон казактарынан айырып тора. Һәр полктағы 500 яугирҙың 200-өнә мылтыҡ бирелә. Был полктар гвардия кеүек уны иң ауыр бәрелештәрҙә ҡулланалар. Ҡалған 6-нсынан алып 20-сегә тиклемге полктар ополченецтар һымаҡ милли кейем менән кейендерелә. Ғөмүмән, мылтыҡ менән бер минут эсендә 2-3 тапҡыр ғына ата ала. Ә башҡорт яугиры бер минут эсендә дошманына 50-ләп уҡ осора алған.

Полктарға башҡорттар үҙ теләге менән яҙылған. Икенсенән, атлы ғәскәрҙе ярлы крәҫтиәндәр төҙөй алмаған. Уларҙы тик ерле, аҫаба хоҡуҡлы дворяндар ғына ойоштора алған. Икенсе бер мәсьәлә: халыҡ 28 полкты үҙе ойоштороп, кейендереп, атҡа мендереп, фуражы, ризығы менән яуға оҙата алғас, был халыҡта һалым йыйыу системаһының яйға һалыныуы тураһында һөйләй. Ә һалым йыйыу системаһы булыуы нимә хаҡында һөйләй,

иң тәүҙә яугирҙың физик һәм интеллектуаль әҙерлегенә иғтибар бирелгән. Бөгөн Рәсәй армияһына 27 йәшенән үткәндәрҙе алмайҙар. Ә башҡорт полктарына 18 йәштән 54 йәшкәсә ир-аттар алынған. Был ул саҡта милләттең һаулыҡ кимәлен билдәләүсе дәлил. Бынан тыш, һуғышҡа алыныусы старшиналарҙың, ғәскәр башлыҡтарының ҡатындары ла ирҙәре менән яуға киткән. Ябай һалдат үҙ ҡатынын алмаған. Тарихтан беҙгә билдәле Йәнтүрә лә ябай һалдат булмаған. Ирҙәре менән яуға барыусы ҡатындарҙы махсус рәүештә әҙерләгәндәр. Был ул саҡтағы ғәскәри тормоштоң айырылғыһыҙ өлөшө, Европаса әйткәндә, һуғыш мәҙәниәте һаналған. Ҡатындар ирҙәренең өҫ кейемен йыуған, ашарға әҙерләгән, ҡыҫҡаһы, тулы ҡанлы тормош менән йәшәткән. Шулай уҡ француз армияһы командирҙары янында маркитянкалар йөрөгән. Рус армияһында бындай хеҙмәтте ирҙәр башҡарған.

ҡорттоң аты ла уға йәлләп ҡарағандай, баш борған. Ҡыҫҡаһы, яу үткәндән һуңғы осорҙо ғына түгел, милләтебеҙ хаҡында оло тарих һөйләй был гравюра. Шулай уҡ рус армияһы Парижды яулап алғандан һуң Европаның был гүзәл ҡалаһында тәртип урынлаштырыуҙа ҡатнашып, ас-яланғас йәтимдәрҙе хәстәрләп, башҡорт яугирҙарының ҡала урамдарында намаҙ уҡығандарын да беләбеҙ. Ҡайһы ваҡыт: "Беҙ экстремаль шарттарҙа ғына үҙебеҙҙе тулы ҡанлы итеп тояbыҙмы икән?" - тип уйлап ҡуйғаным да бар. Ә бит тарихыбыҙға боролоп ҡараһаҡ, беҙҙең бер кемдән дә оялыр, кәмһенер урыныбыҙ юҡ, беҙ күптән инде тулы ҡанлы оло тормош менән йәшәргә хаҡлы милләт. Беҙ һәр ваҡытта ла тоғролоҡ һәм намыҫ принциптарыбыҙға тоғро ҡалдыҡ, үҙебеҙгә зыян килтереп булһа ла әйткән һүҙебеҙҙә торабыҙ. Беҙҙе хәҙерге ваҡытта икенсе ҡәүем итеп үҙгәртергә теләүселәр бар. Шуға күрә беҙ үҙ асылыбыҙҙы һаҡларға бурыслыбыҙ. Ә инде асылыбыҙҙы һаҡлауҙың иң дөрөҫ юлы - атай-олатайҙарыбыҙҙың данлы үткәнен белеү, уларҙың традицияларын үҫтереү, әүҙем пропагандалау.

# РУХ ЮҒАРЫЛЫҒЫ

## барып еткән…

йыйған хәҙерге пионерҙар кеүек, көрәк, һәнәк баштарын йыйырға тотонған. Тимер, әлбиттә, уларға иң беренсе нәүбәттә уҡ башына ҡуйыр өсөн кәрәк булған. Тәүҙә урындағы халыҡ башҡорттар күренеү менән тимер-томорҙо йәшерер булған, аҙаҡ бургомистрҙар, старосталар уларҙың хәлен аңлап, тимер-томор йыйып бирешеү эшен үҙҙәре ойошторған.

Башҡорттарға аттарының тояғын Париждан тыуған илгә ҡайтышлай ғына, йәғни уҡты башаҡлау мохтажлығы бөткәс кенә дағалау форсаты тейә.

Ни өсөн беҙ бөгөн ат эйәрләп егә белмәйбеҙ? Ни өсөн йылҡы һуйһаҡ, уның тиреһен ташлайбыҙ? Ниңә ул тиренән ҡынйыраҡ итек (ҡуңысы, ҡыны йырыҡ итек) тегә белмәйбеҙ? Бында һорауҙарҙы тағы ла бик күп теҙергә булыр ине. Ошо һорауҙарҙың барыһына ла тик бер генә һөйләм менән яуап бирергә мөмкин: сөнки беҙ атай-олатайҙарыбыҙҙың хәрби данын ҡәҙерләмәйбеҙ. Беҙ олатайҙарҙың даны менән маһаябыҙ, күп һөйләнәбеҙ, әммә бер нәмә лә эшләмәйбеҙ. Хатта шәжәрәләрен төҙөп, олатай-ҡартаталарының 1812 йылда Парижға барып етеүен белгәндәре лә маҡтанып йөрөүҙән ары ҡыл да ҡыбырҙатмай. Төньяҡ амурҙары, тип тик миңә генә йөрөргәме ни? Ни тиклем изге тема энтузиастарҙы көтөп ята.

Беҙгә ярҙам итергә әҙер тороусылар ҙа юҡ түгел. Өфөнән бер тин дә ала алмағас, былтыр юлға сығыр алдынан тыуған Ғафурийыма ҡайттым. Таптым хәленән килгәнсе ярҙам итеүселәрҙе. Яйы сыҡҡанда, Ханнан Ишмырҙинға, Юрий Сизинцевҡа, Азат Фәйзуллинға, Евгений Лубинға рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм. Беҙгә Бородиноға барғанда Башҡортостан милли музейы директоры Ғәли Вәлиуллин палаткалар, йоҡо тоҡсайҙары биреп торҙо. Рәхмәт уларға, барыһына ла!



Париж урамында башҡорт яугиры тол француз ҡатынына хәйер бирә.

### Дәүләтһеҙ ғәскәр ҙә юҡ…

Рус батшалығы башҡорт полктарын, казактарҙы обоз менән тәьмин итмәй, йәғни полктар үҙ халҡы иҫәбенә кейенә, туҡлана, ҡорал әҙерләй, тулыһынса үҙтәьминәттә була. 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт полктары ғына казактар кеүек хәрби кейем менән

ында һөйләй. Ә һалым йыйыу системаһы булыуы нимә хаҡында һөйләй, тип уйлайһығыҙ? Эйе, дәүләт системаһы барлығын иҫбатлаусы дәлил ул. Башҡорттарҙа дәүләтселек булмаған, улар дәүләт системаһын төҙөүгә һәләтһеҙ, тиеүселәргә бына тигән контрфакт, иҫбатлама. Был -аксиома. Наҙан кеше генә быны танырға теләмәҫ. Бөгөн бер-беребеҙгә күҙ терәшеп ошо хаҡта һөйләшеп ултырабыҙмы - ултырабыҙ, халҡыбыҙҙың данлыҡлы тарихы гравюраларға теркәлеп ҡалғанмы - ҡалған, тимәк, дәүләтселегебеҙ ҙә булған. Самаһыҙ ҙур территорияла, хәҙергесә әйткәндә, компьютер, мобиль бәйләнешһеҙ үҙ йәшәү рәүешен тотҡан империяға эйә булған башҡорт халҡы. Дәүләтселеге булмаған милләт 28 полкты төҙөй аламы? Юҡ. Ни өсөн башҡорттар Иван Грозный менән килешеү төҙөй алған? Дәүләте булған өсөн. Алтын Урҙа менән дә шундай уҡ килешеү төҙөгәндәр бит. Сыңғыҙ хан да беҙҙең дәүләтте таныған. 14 йыл буйына Уралға инә алмағандан һуң Сыңғыҙ хан беҙгә аҫабалыҡ бирмәй, ә беҙҙең үҙ еребеҙҙә йәшәү хоҡуғыбыҙҙы таный ғына. Беҙҙең дәүләтселегебеҙ, әлбиттә, булған, бында, бәлки, дәүләтселектең классик булмаған башҡа формаһы хаҡында һүҙ алып барыу урынлы булыр ине.

1812 йылғы Ватан һуғыщына иң лайыҡлыларҙы һайлап алғандар. Әлбиттә, армияһында бындай хеҙмәтте ирҙәр башҡарған.

1812 йылда Уралда үткән йәйҙәге кеүек түҙеп торғоһоҙ ҡоролоҡ һәм аслыҡ була. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ ауыҙынан өҙөп 28 полкты хәстәрләп һуғышҡа оҙата. Ә шуларҙың 20-һе һуғыш походтарында ҡатнаша.

### Гравюралағы тарих

Беҙ атай-олатайҙарыбыҙҙың әйткәнен онотабыҙ. Улар беҙгә "Уҫал булығыҙ, тик яуыз булмағыҙ" тип өйрәткән. "Ел сәсһәң, дауыл урырһың", тип тә әйткәндәр. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан атай-олатайҙарыбыҙ Евразия кимәлендә мәҙәниәт, әҙәп, әхлаҡ таратыусы ла булған. Билдәһеҙ француз рәссамы гравюраһында рус ғәскәре баҫып ингән Париж урамында башҡорт яугиры хәйер һораусы тол француз ҡатынына саҙаҡа бирә. Ҡатын янына ас балалары эркелгән. Башҡорт яугиры үҙе менән һуғышып үлгән француз һалдатының етем ҡалған ғаиләһенә хәйер бирә. Был гравюрала һуғыш аяуһыҙлығы менән гуманлылыҡ бергә уҡмаштырылған. Яугир ҡатындың күҙенә тура ҡарай алмай, сөнки уның ирен яуҙа үлтергән, шул уҡ ваҡытта ҡатын башҡорт яугирының мәрхәмәтлелегенә ҙур өмөт бағлай. Бында бер үк ваҡытта ҡурҡыу белмәҫ, әммә мәрхәмәтле характерға эйә башҡорт менталитеты сағылыш таба. Башҡорттоң аты ла уға йәлләп ҡарағандай, баш борған.

Минең Владимир Филипков атлы дуҫым бар, ул "Арғымаҡ" клубының етәксеһе. Клуб Һамар ҡалаһында ойошторолған. Владимир ҡаланың аквапаркында шорник булып эшләй. Рус милләтле кеше "Арғымаҡ" кавалерия клубы ойошторған. Бородиноға Володя - рус казагы, ҡатыны барышня булып кейенеп килгән. Ә бына ҡыҙын ул башҡорт яугиры формаһында кейендереп, үҙе артынан эйәрткән. Уларҙан: "Ни өсөн ҡыҙығыҙҙы башҡорт яугиры кейемендә килтерҙегеҙ?" - тип һорағайным: "Беҙ һеҙҙең БСТ телеканалын ҡарайбыҙ, ул канал беҙгә рухи тәрбиә бирә", - тип яуапланы Володя. Был хәл 2006 йылда булды. Бының менән мин нимә әйткем килә: беҙҙе яратып, хөрмәт итеп торған халыҡтар эргәбеҙҙә туп-тулы, тик беҙ үҙ-үҙебеҙҙе яратмайбыҙ шул. Былтыр Можайскиға һәйкәл ҡуйырға йөрөгәндә шул тирәне ҡарап сығыр өсөн машина кәрәк булды. Урындағы етәкселәр бензиндары юҡлығы хаҡында әйткәс, быны ишетеп ҡалған яҡында ғына баҫып торған егеттәр үҙҙәренең машинаһын тәҡдим итте."Олаталарына һәйкәл ҡуйырға йөрөгән башҡорттар икәнлегегеҙҙе ишетеп ҡалғас, эргәгеҙҙән китә алманыҡ, шуға күрә ярҙам итергә булдыҡ", тип аңлатты улар үҙҙәренең был ярҙамын. Улар Пенза казактары булып сыҡты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙебеҙҙе энтузиазм төшөнсәһе тураһында фекер йөрөтөп башлағайныҡ. Ә бит эйәр өҫтөндә Уралдан Парижға тиклем барып етер өсөн атай-олатайҙарыбыҙға ни тиклем энтузиазм кәрәк булғанлығын төҫмөрләй генә алабыҙ. Төптән уйлап ҡараһаң, энтузиазмдың нигеҙендә бит рух юғарылығы ята. Рус армияһына Парижды яулашҡан өсөн башҡорт яугирҙарына премия бирмәгәндәр, пенсия түләмәгәндәр. Бөгөн милләтебеҙ үҙ республикаһында йәшәй икән, бына шуның өсөн ҡан ҡойғандар ата-олатайҙарыбыҙ. Был йәһәттән Илдар уҙаман хаҡлы, туғандар!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ Ауыл тирәләй тыуҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҡсалар ҡороған.



КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

98
Алла юлында берәүҙең
Аяғы туҙанға батһа,
Уны утҡа харам итер,
Тамуғ уты уға ҡапмаҫ.

99
Мул тормошҡа бикле ҡапҡа,
Хеҙмәт - асҡыс шул йоҙаҡҡа.

100
Мөьмин кеше алданыусан, йомарт кеше.
Боҙоҡтарҙың бары алдау, хурлау эше.

101
Мөьмин менән мөьмин гүйә ныҡлы бура,
Береһен береһе ныгрә булып тотоп тора.
Һинә хәҙисем, өммәтем,
Аманатым - сөннәтем.
Кем дә кем ҡырҡ хәҙисемде
күңелендә йөрөтә,
Ҡиәмәт көнөндә шуны яҡлау -
шәфәғәтем көтә.

102
Ожмахтарға юлдар тирҙе һыға,
Ожмахтарға юлдар ҡатмарлы.
Тау ҡәҙәре эштәр атҡармайса
Асылырмы йәннәт ҡапҡаһы?

Тоғролоҡтар кәрәк үтер өсөн
Һынауҙарҙың ниндәй ҡатыһын.
Дөм-ҡараңғы ҡалғанда ла донъяң,
Балҡып торһон намыҫың яҡтыһы.

Башҡасараҡ тамуҡтарға юлдар,
Кемдәр урлай, кемдәр типтерә,
Бейей-бейей иблес йырҙарына,
Йәһәннәмгә бара туп-тура.

Рәнйеткәндәр, алдап көн иткәндәр,
Илен, телен, динен һатҡандар -
Улар утлы тамуҡ соҡоронда
Үлмәҫ борон урын тапҡандар.
Әүрәп тарта тамуҡ сойорҙары,
Йәһәннәмгә йәһәт атлауың.
Үтеп ҡара сират күперҙәрен!
Асып ҡара ожмах ҡапҡаһын!

103
Саҙаҡаның хәйерләнән хәйерлеһе -
Телде һаҡлау, телде һаҡлау,
Һаҡлау телде.

104
Иманлының хазинаһы шулдыр:
Дине - иң ҙур хөрмәт-абруйы.
Зирәклеге уның - дәрәжәһе,
Аҡылы уның - нәҫел-ырыуы.

105
Берәүгенә еткән ризыҡ
Икәүгенә лә етә.
Икәүгенә еткән ризыҡ
Дүртәүгенә лә етә.
Дүртәүгенә еткән ризыҡ
Һигеҙенә лә етә...

106
Эҙләмә бөйөк эштәрҙе,
Тамағын туйҙыр астарҙың.
Ауырыуҙың хәлдәрен бел,
Әсир-ҡолдарҙы ҡотҡар һин.

107
Пәйғәмбәргә әйткән берәү:
- Бирсе кәңәш, киҫәтеп ҡуй.
Кәңәш биргән уға Рәсүл:
- Асыуланма! Асыуыңды тый!

Ҡабат әйткән теге берәү:
- Зинһар тағы кәңәшең бир.
- Кәңәшем шул, - тигән Рәсүл, -
Асыуыңды йүгәнләй бел!

Һораһа ла кәңәш ҡат-ҡат,
Ишетелгән тағы шул һүҙ:
- Асыуланма! Асыуланһаң,
Асыуыңды сығармай түҙ!

(Дауамы бар).

ҺАБАҠТАР

Тыуҡһан туғыҙ йортло ҙур ғына ауылда бик бәхетле кешеләр йәшәгән. Береһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡ менән биҙәлгән өйҙәрҙә йәшәгән улар. Һәр хужалыҡты гүзәл баҡсалар уратып алған. Ауылдаштар йыл әйләнәһенә емеш-еләктән, йәшелсәнән өҙөлмәгән. Яҙҙарҙы дәртләнеп ҡаршы алғандар, йәйҙәрҙе көндәлек хеҙмәт менән күңелле үткәргәндәр. Байрамдарҙа уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Көҙ мул уңыш йыйғандар ҙа, ҡышҡыһын рәхәтләнеп ял иткәндәр. Ерҙә йәшәһәләр ҙә, күккә баҡып, йондоҙҙарға ҡарап, өмөтләнгәндәр, йәшәйеш тураһында уйланғандар, киләсәккә ышаныс менән ҡарағандар, кейеҙ-келәмдәргә йыһан есемдәрен биҙәк итеп төшөргәндәр.

лыҡты күреп, хакимдарҙың иҫтәре киткән. Уларҙың береһе былай тип һүҙ башлаған: "О, кешеләр, һеҙ бик матур йәшәйһегеҙ. Әммә тормошоғоҙ үтә талғын, бер тигеҙ үтә. Һәр бер өйгә ҡот ҡунып, етеш йәшәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәлә менән дөрөҫ һөйләшә белмәйһегеҙ, һеҙгә тәрбиәлелек етешмәй. Шуға күрә һеҙ Илаһи көскә дан йырлап табына белмәйһегеҙ".

"Юҡсы, бер ҙә улай түгел, - тип, ауылдаштар борсола башлаған. - Аллаһ менән беҙ өс йылға бер тапҡыр тиң күреп аралашабыҙ. Уны күрмәһәк тә, һәр иртәлә Ул беҙгә ҡояш булып балҡый, бал ҡорто булып бал йыя, ҡышҡы һалҡындарҙа ерҙе аҡ шәл менән ҡаплай. Ул һәр саҡ эргәбеҙҙә, беҙгә тәбиғәттең һәр миҙгеле ҡәҙерле".

Һәр аҡыл эйәһе үҙ ҡорамына бикләнеп, кешеләргә аҡыл һатҡан: "Һеҙ әле тулыһынса иманға килмәгәнһегеҙ. Хәйер-саҙаҡаны күберәк алып килегеҙ, көнө-төнө табыныгыҙ".

Ҡорамһыҙ тороп ҡалған йөҙәнсә аҡыл эйәһе иһә йәшертен үҙ эшен алып барған. "Ғибәҙәтхана улай төҙөлмәй, табынғанда ла икенсе һүҙҙәр ҡулланырға кәрәк. Аллаһ менән нисек көн һайын һөйләшергә икәнен бер мин генә беләм", - тип өгөтләгән ул.

Әгәр ҙә ауылдаштарҙың береһе уның өгөт-нәсихәтенә инанһа, ауыл эргәһендә яңы ҡорам төҙөлгән, элеккеһе ташландыҡ хәлгә дусар булған. Хәҙер инде ҡорамһыҙ тороп ҡалған икенсе аҡыл эйәһе халыҡты үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шулай бик күп йылдар уҙған.

# Бәхәстән бәхет тыуамы?

Өс йылға бер тапҡыр июль айында ауыл кешеләре йәшәгән урындарынан йыраҡ булмаған яланда ҡорға йыйыла торған булған. Өс йылға бер тапҡыр кешеләр Аллаһы Тәғәлә тауышын ишеткән һәм үҙ һорауҙарына яуап алған. Маңлай күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, күңелдәре менән кешеләр эргәләренә килгән Хоҙайҙы тойғандар. Һәр кем ошо мәлдә киләсәккә уйхыялдар ҡорған, Хаҡ Тәғәлә менән кәңәшләшкән. Мөғәмәлә төрлө кимәлдә барған: берәүҙәр тәрән уй-фекергә сумған, икенселәр ябай ғына донъяуи кимәлдә аралашҡан, өсөнсөләрҙең мөғәмәләһе уйын-көлкөгә ҡоролған.

Мәҫәлән, берәү ошондай һорау биргән:

- Хоҙайым, ниңә һин бөгөн беҙҙе ямғыр һыуына ҡойондорҙоң? Иртә менән лысма һыу иттең дә, төшкә ҡарай ғына ҡояш йылыһын өләштең. Әллә үҙең төшкә тиклем йоҡондан уянманыңмы, әллә беҙҙең байрам майҙанына йыйылғанды көтөп торҙоңмо?

- Юҡсы, - тип яуап бирә Хоҙай. - Мин иртә таңдан уҡ байрамығыҙ күңелле үтһен өсөн хәстәрлек күрҙем. Арағыҙҙа иртәнге тәһәрәт алырға йыбанғандар бар. Улар байрам йәмен ебәрмәһен тинем дә, бөтәгеҙҙе лә бер юлы ҡойондорҙом. Әле бына таҙарынып кибендегеҙ.

- Улайһа, бик шәп иткәнһең, - тип ризалаша һорау биргән кеше.

Сәстәренә сал төшкән олпат ир бөтөнләй икенсе төрлө һорау бирә:

- Хоҙайым, әйт әле миңә, йыһандағы йондоҙҙарҙың мәңгелек тәртибе ни аңлата? Ерҙәге тормоштан биҙһәм, үҙем һайлаған йондоҙҙа ғаиләм менән күсенеп бара аламмы?

- Йондоҙҙар һеҙгә йыһан тураһында мәғлүмәт бирә. Ерҙәге ығы-зығынан арынып, күңел тыныслығына өлгәшә алһағыҙ, йондоҙло китап һеҙгә үҙ серҙәрен асыр. Әммә быйын өсөн тән таҙалығы ғына етмәй, күңел сафлығы мөһим. Йыһан сикһеҙ - һайла, әйҙә, үҙеңә оҡшаған планетаны. Тик быйын өсөн бер генә шартты үтәргә кәрәк: йондоҙҙағы гүмереңә, ерҙәге тормошоң менән сағыштырғанда, тик ижад менән генә һуғарылыһын.

Шулай күңелле йәшәгән был ауыл халҡы.

Көндәрҙән бер көндө был ауылға бер ынғайҙан йөҙ аҡыл эйәһе килгән. Киң күңелле ауылдаштар ят кешеләрҙе бик ҡунаҡсыл ҡаршы алған, һый-хөрмәт күрһәткән. Бындай мул-

"Юҡ, һеҙҙә эштәр дөрөҫ ойошторолмаған, - тигән аҡыл эйәләре. - Беҙ һеҙҙе Аллаһ менән аралашырға өйрәтергә килдек. Бөтә Ер шары буйлап ғибәҙәтханалар, матур-матур ҡорамдар төҙөлә. Был изге урындарҙа кешеләр Аллаһ менән көн дә һөйләшә ала. Беҙ һеҙҙе лә өйрәтәсәкбеҙ".

Өс йыл дауамында ауыл кешеләре аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен диҡҡәт менән тыңлаған. Һәр хакимдың үҙенә хас ҡарашы, үҙ теләге булған: берәүҙәре ҡорамды нисегерәк эшләү тураһында фекер һатҡан, икенселәре ғибәҙәт ҡылыу тәртибе тураһында һөйләгән - һәр кем үҙ яғына ҡайырған. Ауылдаштарҙың ҡайһы аҡыл эйәһенең фекерен яҡларға белмәй баштары ҡатҡан. Етмәһә, улар сит кешеләрҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Шуға күрә һәр өйҙә, һәр аҡыл эйәһен тыңлап, ҡорамдар төҙөргә булғандар. Тик ауылда туҡһан туғыҙ йорт булһа, аҡыл эйәләре йөҙ булған. Был яңы ауыл кешеләренең ҡарарын ишетеп, аҡыл эйәләре хафалана башлаған. Нисек инде улай, тимәк, бер аҡыл эйәһенә ҡорам етмәйәсәк, ул хәйер-саҙаҡаһыҙ ҡаласаҡ бит? Килмешәктәр кемдең теорияһы иң хаҡ икәнен иҫбатлап бәхәсләшә башлаған. Йәйләп был бәхәскә ауыл кешеләре лә ҡушылған. Бәхәс шул тиклем көсло булған: ауылдаштар өс йылдан һуң яланға ҡорға йыйылыу тураһында ла оноҡтандар хатта!

Тағы өс йыл үткән. Ауыл тирәләй туҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә ҡалған, баҡсалар ҡороған.

Көндәрҙән бер көндө ауылдаштар өс йылға бер йыйылған элекке ҡорҙо иҫтәренә төшөргән. Аллаһ тауышын тағы үҙҙәренсә ишеткеләре килгән. Ауыл эргәһендәге яланға йыйылғас та, улар күмәкләп яуап таба алмаған һорауҙарын биргән: "Аллаһы Тәғәлә, әйтсе беҙгә, ни өсөн беҙҙең баҡсаларҙы ҡорт баҫты? Ни өсөн беҙ элеккеләй йыл да мул уңыш йыймайбыҙ? Ни өсөн кешеләр бер-береһе менән бәхәсләшеүҙән бушамай? Ни өсөн беҙ, күпме генә ыҙғышһаҡ та, үҙ иманыбыҙға ҡайта алмайбыҙ? Беҙ күпләп төҙөгән ҡорамдарҙың ҡайһынында йәшәйһең һин"?

Кешеләр яуапты оҙаҡ көткән. Ҡуҡтән был юлы күңелһеҙ, арыған тауыш ишетелгән:

- Эй, кешеләрем, мин һеҙҙе берҙәм итеп яралттым. Һеҙ берҙәм булғанда ғына илаһи хыялға ирешеп була. Ә һеҙ һәр берегеҙ үҙ аллаһын эҙләп, айырым ҡорамдарға бикләндегеҙ. Ҡәҙерле балаларым, әйтегеҙсе, мин ҡайһы ҡорамда булырға тейеш? Бөтәгеҙҙе лә тиң күргәс, берегеҙҙе лә рәнйетмәҫ өсөн ҡайһы ҡорамды һайлайым? Һөйөү менән һайлау ирке һеҙҙең һәр берегеҙҙең үҙендә. Берҙәм ҡарарға килһәгеҙ генә хыялығыҙ тормошҡа ашыр.

Шулай тигән дә тауыш шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын, бәхәс тә ҡыҙа бара...

Исмәгәзәм ИСМӘҒИЛЕВ
әҙерләне.

(Дауамы. Башы 7-9-сы һандарҙа).



**Бөйөк инглиз драматургы Уильям Шекспирҙың "Тормош - театр, ә кешеләр унда актерҙар" тигән үлемһеҙ һүҙҙәре бар. Был һүҙҙәрҙе һәр кем үҙе теләгәнсә һәм, әлбиттә, үҙенә нисек уңайлы - шулай аңлай. Әгәр ҙә һин артист икән, ғүмереп ошо һөнәргә бағышлаған сәхнә оҫтаһының беҙҙән, ябай тамашысынан, айырмаһы йәки өҫтөнлөгө нимәлә? Ни өсөн тамашаһы үҙенең һорауҙарына яуапты театр сәхнәһенән эҙләй, унда гел генә гәҙеллек, яҡшылыҡ тантана итеүен теләй? Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Фиргәт ҒАРИПОВ менән әңгәмәбеҙ театр, артистар һәм, ғөмүмән, тормоштоң үҙе хаҡында.**

# БӘХЕТ ҺИНЕҢ ҮҘЕҢДӘ...

## күңел төпкөлөндәге утрауҙа



### Ғаиләм - ҡәлғәм

Мин Белорет районы Сермән ауылында тыуғанмын. Атайым тормошомда иң ҙур абруйға эйә булған берҙән-бер кеше. Уның һүҙе минең өсөн ҡанун. Теге йәки был һөнәрҙә, бигерәк тә артист һөнәрендә абруй, кумир булырға тейеш түгелдер. Әлбиттә, үҙең хөрмәт иткән хеҙмәттәштәреңдән күп нәмәгә өйрәнәһең, әммә был һин уларға оҡшарға тейешһең тигәнде аңлатмай. Һәр ир кеше өсөн абруй булырлыҡ кеше "Улым, һин дөрөҫ уйламайһың", тип, барыһын да аңлатып бирә алырлыҡ ысын ир булырға тейеш. Минең өсөн атайым шундай кеше. Ул "Тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" тип әйтергә ярата һәм мин шуны гел иҫтә тотоп йәшәйем.

Әсәйем - рәссам, мәктәптә уҡыта. Бәләкәй саҡта йоҡлар алдынан әкиәттәр уҡый ине. Миңә һүрәт төшөрөргә лә ул өйрәтте. Әсәйем һәр ваҡыт миңә терәк була белә, бигерәк тә хыялый күңелле романтиктың шәхес булып формалашыуында уның роле ҙур. Шуға сикһеҙ шатмын: атайым миндә - ир-егеткә, әсәй ҡатын-ҡыҙға хас сифаттарҙы тәрбиәләгән. Был сифаттарҙың барыһы ла миндә тупланған. Ғаиләлә өс малай үҫтек. Бар малайҙар кеүек, һуғышып та китә инек, әммә гел дуҫ булдыҡ. Әле лә аралашып, кәңәшләшеп йәшәйбеҙ.

Кәләшем Ләйсән - Баймаҡ ҡыҙы, ул да әсәйем кеүек рәссам. Мин Өфө дәүләт сәнғәт академияһының дүртенсе курсын тамамлаған йылда ул беренсе курсҡа уҡырға килгәйне. Ярты йылдан һуң өйләнештек. Уның сабырлығы, аҡылы һәр ваҡыт мине һөҡләндыра. Улыбыҙ Сарматҡа дүрт йәш. Улым тыуған мәл "Урал батыр" спектакле өҫтөндә эшләгән, башҡорт милләте тарихы буйынса күпләп китаптар уҡыған саҡҡа тура килде. Тәүҙә Самрау тигән исем оҡшағайны, тик нисектер йомшаҡ яңғырай кеүек тойолдо. Шул саҡта "Сармат алтыны" тигән китап ҡулға килеп эләкте. Сармат тип ҡушырға булдым. Эҙләнеп, мәғәнәһен дә асыҡланым. Сармат - "билендә ҡылыс йөрөтөүсе" тигәнде аңлата.

### Улыма мин дуҫ

Халҡыбыҙға артыҡ сөсөләнеү, наҙланыу, тойғоларыңды белдереп барыу хас түгел. Хатта бик әйткең килһә лә, әсәйеңдең, атайыңдың күҙенә ҡарап, һине яратам, тип әйтә алмайһың, сөнки беҙҙә улай ҡабул ителмәгән. Мин уларҙың, улар минең яратҡанымды белә, ә был турала ҡысҡырып әйтеү юҡ. Был, бәлки, дөрөҫтөр ҙә, шулай ҙа улым Сармат үҙен яратыуҙарын белеп үҫеүен теләйем. Гел генә уның яҡшы бала булыуын әйтеп, яратыуыбыҙҙы белдереп торабыҙ. Ул үҙе лә хәҙер тойғоларын белдерергә оялмай, эштән ҡайтһаң, ҡосаҡлай ҙа, атай, мин һине һағындым, ҡайҙа булдың, ти. Әйҙә, иркә булһын, был бит ул ҡыҙҙар кеүек булып үҫәсәк тигәнде аңлатмай. Ир-егет ҡаты күңелле булырға тейеш, тип кем әйткән әле? Мин аңлайым, ҡаты күңеллеләргә тормош көтөүе еңелерәктер, әммә һин донъяны нығыраҡ аңлағанда ғына ул һине ҡабул итәсәк. Нимә ул яратыу, нимә ул наҙлылыҡ икәнен, һине яратыуҙарын белһәң, был тойғоларға тартылһаң, тормошто ла яҡшыраҡ аңлайһың. Был үҙе бәхет бит ул. Мәҫәлән, бәләкәй саҡта, мине нишләп яратмайҙар икән, тигән уйҙар гел була торғайны, яратһындар өсөн үҙенде яҡшы яҡтан күрһәтергә тырышаһың. Яратыу ғына аҙ, уны әйтеп торорға ла кәрәктер, күрһәтергә лә кәрәк. Ейәндәре тыуғас, атайым менән әсәйем шул тиклем үҙгәрҙе, балабыҙҙы һөйөп, яратып ҡына торалар, йыш шылтыратып хәл белешәләр.

Ғөмүмән, улыма абруй булырға ынтылмайым. Мин уға дуҫ булырға тейешмен, тип уйлайым. Үҙемдән беләм: ҙурая башлағас, мәҫәлән, ҡыҙҙар менән мөнәсәбәттәрҙе, үҫмерлек осоронда кисерган тойғоларҙы бер үҙеңә аңлауы ауыр. Унан, бик ауыр заманда йәшәйбеҙ, ҡала урамдарында нимә генә юҡ, мәктәпкә баргас та кемдәр менән генә дуҫлашмаясаҡ бала. Ярамай, тиеп кенә, баланы насар гәҙәттәрҙән тыйып булмай. Улымдың минән ҡурҡып, нимәнелер минән йәшереп йөрөүен дә теләмәйем. Шуның өсөн дә мин уға дуҫ булырға теләйем, ул "атай, нимә ул яҡшы, нимә ул насар?" тип миңә мөрәжәғәт итә алырлыҡ булырға тейеш.

### Үҙ күңеленә күпер

Минең тиҫтерҙәрем "Өс мушкетер", "Гардемариндар, алға!", "Зорро" кеүек рыцарҙар тураһындағы кинофильмдарҙа тәрбиәләнде. Рыцарҙар, уларҙың батырлығы бала саҡта минең дә бар булмышымды биләп алғайны һәм ғаиләлә берәү ҙә минең был хыялдарымдан көлөп ҡарамаһы. Ағайым ағастан ҙур, ауыр ҡылыс эшләп бирҙе, атайым был ҡылысҡа ярашлы рып тимерҙән ҡалҡан яһаны, әсәйем уны матур итеп биҙәне. Ҡағыҙ шлем, плащ кейеп, күршенең атын менеп, урманға, уйлап сығарылған донъялағы уйлап сығарылған яуыздар менән көрәшергә сығып китәм. Көрәш, тигәс, ниндәйҙер ҡурҡыныс ғифрәттәрҙе үлтерергә түгел, ә кемделер ҡотҡарырға, кемгәлер ярҙам итергә тигән хыял менән урман ҡыҙырам. Бала саҡта кисергән ошо идея һинең йөрәгеңә мәңгелеккә һалына икән - быны мин һуңғараҡ, байтаҡ йылдар үткәндән һуң аңланым. Кешенең үҫкәс яҡшымы, әллә яуызмы, тоғромо, әллә һатлыҡ йәнме буласағы ла бала саҡта билдәләнә. Әгәр ҙә минең бала сағым үҙем өсөн, күңелем өсөн ваҡиғаларға бай булмаһа, бөгөн мин бөтөнләй икенсе кеше булыр инем. Иң ҡыҙығы, минең хыялдарымды, уйҙарымды, идеяларымды уртаҡлашыусы дуҫтарым була торғайны. Ҡәлғәләр төҙөп, уны тәрлә ҡоролмалар менән нығытып, "дошман"дарҙан һаҡланыу мөмкинлеге биреүсе ниндәйҙер әйберҙәр уйлап табып бөтә торғайныҡ.

"Терабитияға күпер" тигән фильмды күргәнегеҙ бармы икән? Тормош бик ҡатмарлы, унда бәхет табыуы еңелдән түгел. Әммә һин ошо бәхетте үҙеңдә таба алаһың. Бының өсөн һәр кемебеҙҙең күңелендә булған, йылылыҡ, бәхет, өмөт тантана иткән утрауҙы табырға ғына кәрәк. Иң тәүге, беренсел һәм ҡабатланмаҫ яҡтылыҡты беҙ үҙебеҙҙең күңелдәребеҙ төпкөлөнән алабыҙ һәм донъяны ошо яҡтылыҡ ярҙамында иң-иң сағыу төҫтәргә буяйбыҙ, бер-беребеҙ менән бүлешәбеҙ. Был фильмды ҡарағандан һуң кешелектең иң мөһим серҙәренең береһе ошонда икәнен аңлайһың.

Улым Сарматтың да күңеле хыялдарға бай. Тик ҡалала, ҡыҙғанысҡа күрә, фантазияларға урын юҡ. Минеңсә, кешенең бала сағы ауылда үтергә тейеш. Ошо мөғжизәләргә бай мәлдә ауылда үткәрһәң, һинең күңелең байыраҡ була. Һәр бала бәләкәй саҡта үҙе уйлап сығарған донъяла йәшәй. Ҡалала нимә уйлап сығарырға була һуң? Бында, тупаҫ итеп әйткәндә, бер нисә тапҡыр интернетҡа инеп сығаһың һәм һин бөтә нәмә тураһында ла беләһең.

### Эҙләнеү табышҡа алып килә...

Артист үҙенең тышҡы ҡиәфәтен, йөҙөн түгел, ә эске күңелен яратырға һәм һаҡларға тейеш. Күңелдең ҡатып ҡалыуынан ҡурҡырға кәрәк. Мин әле бынан, әйтәйек, биш йыл элек ҡояшҡа, уның матурлығына, йәки ҡояш байыған мәлдә аҡһыл ғына болоттоң шәмәхә төҫөнә инеүенә һоҡлана ала инем. Шул тиклем матур, хатта ошо гүзәллектән күңелең тулыша, күҙҙәргә йәштәр төйөлә. Йәйләп ошо һоҡлана алыу һәләте юҡҡа сыға бара. Сәхнәлә, Станиславский ҡушҡанса, бөтә нәмәне дөрөҫ итеп уйнау - ул әле бер нәмә тураһында ла һөйләмәй. Актерҙың күңеле бай, матур булһа ғына яҡшы ролдәр тыуа. Тән ҡартайыуы ҡурҡыныс түгел икән, күңел ҡартайыуынан һаҡланырға кәрәк. Күңеле менән йәш ҡалған оло йәштәге актер ҙа йәш кешене шундай итеп уйнай ала, һин уның йәш икәнлегенә үҙең дә ышанаһың.

Актер гел эҙләнергә тейеш. Үҙе, үҙенең эше менән ҡәнәғәтләнгән актер актер түгелдер ул. Үҙең менән ҡәнәғәт булмаған саҡта ана шул ҡәнәғәтлек килтерер нәмәне эҙләйһең, уҡыйһың, күберәк белергә ынтылаһың. Ерҙәге бар бөйөк асыштарҙы тап үҙе менән ҡәнәғәт булмаған кешеләр асҡан. Нимәгәлер өлгәшкәндән һуң да уны тағы ла яҡшыраҡ итеү өсөн эҙләнәһең һәм табаһың икән, бына шул саҡта ғына камиллыҡ һәм гармония барлыҡҡа килә, эҙләнеү бар икән, табыш та бар. Роль өҫтөндә эшләгәндә лә шулай. Ғөмүмән, һәр геройҙы сәхнәгә үҙеңдең йөрәгең аша үткәреп сығараһың. Ул тереләһен өсөн уға үҙеңдән шәхси әрнеүеңде, ҡайны саҡта үҙеңдең тарихыңды һалырға, уны яҡшыраҡ аңлау өсөн үҙеңә яҡынайтырға кәрәк.

Үҙеңдә үҙең уйнай ала торған ролдәр тормошта һирәк була. Бына был йәһәттән Высоцкийға уныш йылмайған - ул Гамлетты уйнаған. Һәм шулай итеп уйнаған, һаман да донъяның бар театр тәнҡитселәре Высоцкийҙың Гамлетынан яҡшыраҡ Гамлет юҡ, булмаясаҡ та, тип билдәләй. Бындай осраҡтар миллионға берәү. Тик был, башҡаса Гамлетты уйнарға кәрәкмәй, тигәнде аңлатмай. Һәр ваҡыт ролдәреңде яҡшы итеп уйнарға ынтылырға кәрәк.

### Кеше күңеле - ҡара урман

Һуңғы осорҙа В. Шукшиндың хикәйәләре буйынса ҡуйылған "Ҡыҙыҡ был тормош!.." спектаклендәге Степан Воеводин роле өҫтөндә эшләүе үҙем өсөн ҡыҙыҡ булды. Степанға төрмәлә ултырырға өс ай ғына ҡалған була, ә ул ҡаса ла ҡайта - был үҙе парадокс. Ауылын, туғандарын һағына һәм ҡаса ла ҡайта - бына бит ул кешенең ябайлығы. Ҡасып ҡайтырға башҡа бер сәбәп тә юҡ: бары һағынған ғына, хатта төштәрендә күргән, аҡылдан шаша яҙған. Ул үҙе лә быны эшләгәненә ышанмай, ҡылығын аңлата ла алмай. Кеше күңеле - ҡара урман, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр инде. Шунан кешене аңлап ҡара, үҙең шундай уҡ хәлдә ҡалмайынса һин уны аңламаясаҡһың да. Мәҫәлән, ул кешене яратма, ярамай, тиҙәр, ә нисек яратмаҫҡа? Аҫҡаһыҙ ҙа, киҫһәгеҙ ҙә яратасаҡмын. Бында ла шуның кеүек.

Уйламағанда актер булырға хәл иткәндә төрлө яҙмыштар уйнау мөмкинлеге мине был һөнәргә ылыҡтырғайны. Ни эшләп был һөнәрҙе һайланым икән, тигән үкенеү кисергәнем булманы, киреһенсә, бер аҙ ғына булһа ла геройҙарым яҙмышы менән йәшәй алыу, уларҙы аңларға тырышыу мөмкинлеге тормошомдо төрләрәк итә. Бар ролдәремдә лә яратам, минең өсөн ыңғай һәм кире герой араһында айырма ла юҡ. Һәр кешелә яҡшыға ышаныу бар, шуға ыңғай һәм кире герой бар. Шуға ла был ике күренештең көрәше кешене һәр ваҡыт ҡыҙыҡһындыра. Гел яҡшылыҡ еңә алмай, ҡасандыр яуызлыҡ та өҫкә сығып ҡуя. Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә шулай. Яҡшыға ышаныс йәшәтә кешене...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Театр тигәндә бөйөк шағир һәм фәйләсуф Шекспир ике шаршаулы тамашаны ғына күҙ уңында тотмағандыр, моғайын. Театр - ул тормош һәм һәр кем унда үҙенең сценарийы буйынса үҙенең ролен башҡара. Шуға ла сәхнәләге тормош менән тормоштағы сәхнә араһында айырма әллә ни һиҙелерлек түгелдер. Шуға ла йәш актер менән әңгәмәбеҙ ҙә күберәк ябай тормоштағы ябай кешеләр, уларҙың хис-тойғолары тураһында булды, ахыры. Сөнки көн һайын беҙ трагедия, комедия, фарс, драма кеүек төрлө жанрҙарҙа уйнайбыҙ, бары тик декорациялар, битлектәр генә үҙгәрә. Ә бөгөн һин ниндәй роль башҡараһың, уҡыусы?**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*✓ Аллаһы Тәғәлә бөтә йән эйәләрен дә үҙ ише менән яралтҡан һәм уларҙың яҡынайыуы өсөн үҙ-ара тартылыу ҡанунын булдырған. Бер-береһен тулыландырһындар өсөн уларҙың физик һәм рухи дәрәжәләрен берләштергән.*



БЕЛЕП ҠУЙ!

# ЫҢҒАЙ УЙҘАР...

## ауырыуҙарҙан һаҡлай

**Бер көндө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Дини кешенең хәле иҫ киткес. Хәҡиҡәттә, һәр бер хәл уның өсөн хәйерле. Һәм был тик мөьмингә генә ҡағыла. Әгәр уға шатлыҡ килһә, ул шөкөр итә. Был уның өсөн хәйерле. Әгәр дини кешегә ҡайғы килһә, ул бының Аллаһы Тәғәлә ихтыярынан икәнен белеп сабыр итә. Һәм был да уның өсөн хәйерле", - тигән.**

Күптәр сәләмәтлек өсөн нимә файҙалы, ә нимә сир булғанын яҡшы белә. Әммә улар күҙәтелмәй һәм ауырыуға тарығас, "Артабан нимә булыр?" тигән бер үк һорауҙы әленән-әле ҡабатлап, күңел төшөнкөлөгөнә биреләләр. Һуңынан, "Мин ҡайҙа хата ебәрҙем? Ниндәй алама ғәҙәттәр мине аяҡтан йыҡты?" тигән һорауҙар менән үҙ-үҙен ғазаплау осоро уҙғас, кеше сәләмәтлеген нисек ҡайтарыу тураһында уйлана башлай.

Ауырығанда һәм ағзаларҙы артабан дауалағанда беҙҙең аң һәм күңел торошо ла ҙур әһәмиәткә эйә икәнен онотмаҫҡа кәрәк. Кеше күп тармаҡлы био-психо-социаль ысынбарлыҡ булып тора, шуға күрә сирҙе тик физиологик яҡтан ғына ҡарау дөрөҫ түгел. Сир йәки сәләмәтлек беҙҙең уйҙарыбыҙға, тойғоларыбыҙға һәм рухи кимәлебеҙгә лә бәйле.

Шулай уҡ хәүефле уйҙар ҙа ауырыуҙарҙы иҫкәртергә булышлыҡ итә. Был беҙҙең ер тетрәнеүенән һаҡланып, ныҡлы биналар төҙөүебеҙгә, хәүефһеҙлек ҡайыштарын эләктереүебеҙгә һәм киҙеүҙән һаҡланып, ҡулдарҙы йыуыуға оҡшаған. Шулай ҙа хәүефләнеү беҙҙең тормошобоҙҙо боҙорға тейеш түгел, бары тик бер аҙ һағырыҡ булырға мәжбүр итергә тейеш. Артыҡ ныҡ ҡурҡыуҙың ыңғай уйларға ҡамасаулауы ла бар.

Кәүҙәнең бөтә функциялары менән идара итеүсе кеше мейеһе көнөн дә, төнөн дә, туҡтауһыҙ һәм ял көндәрһеҙ эшләй. Ғалимдар күптән инде уй барлыҡҡа килгән ваҡытта организмда нейропептид тигән матдә барлыҡҡа килеүе тураһында әйтә. Ә ниндәйҙер идея барлыҡҡа килһә, был элемент, гүйә, беҙҙең мейебеҙгә ниндәйҙер тәҙрә аса. Мәҫәлән, беҙ ауырлыҡ кисергән ваҡытта, ҡурҡҡанда, өмөтөбөҙҙө юғалтҡанда ҡысҡырыу теләге тыуа һәм уны нәҡ нейропептидтар уята. Үҙендә бәхетһеҙ һәм көсһөҙ тип хис итеп депрессия хәленә төшөү ҙә ошо матдәләр тәьҫиренән барлыҡҡа килә. Ғалимдар нейропептидтарҙың организмдың бактериялар, вирустар, микробтар, яман шеш барлыҡҡа килеү менән көрәшеүсе иммун күҙәнәктәрендә урынлашыуын асыҡланы. Шулай ҙа күптән түгел генә тикшеренеүселәр иммун күҙәнәктәрендә нейропептидтар өсөн махсус урындар барлығын билдәләне. Был организмдың ауырыуға яуабы беҙҙең фекер йөрөтөүебеҙ менән билдәләнә икәнлеген аңлата.

Кешенең ынтылыштары ла терапияның ыңғай тәьҫиренә булышлыҡ итә. Әгәр беҙ ҡабул иткән дарыуҙарҙың файҙалы булыуына шикләнмәйбеҙ икән, һөҙөмтә беҙҙең көтөүҙәребеҙгә тап киләсәк. Төрлө "традицион булмаған дарыуҙар", мәҫәлән, ташбаҡа ҡаны йәки терпе ите ҡулланған пациенттар, ғәҙәттә, уларҙың үҙенсәлегенән түгел, ә үҙҙәренең ышаныу көсө һөҙөмтәһендә һауыға. Әгәр беҙ ауырырҙан алда уҡ һауығыу юлын беләбеҙ икән, беҙ ошоноң менән организмды сырхауҙарға әҙерләйбеҙ, ә мейе нейропептидтар эшләп сығара башлай.

Шуға күрә ышаныу һәм өмөт сырхай башлағанға тиклем һәм терапия ваҡытында ла "дөрөҫ" нейропептидтар барлыҡҡа килеүенә йоғонто яһай. Негатив фекерләү, борсолоу менән өмөт араһында ҙур айырма бар. Фәнни хәҡиҡәт оптимистарҙың һирәгерәк ауырыуын һәм сирҙәрҙән тиҙерәк арыныуын иҫбатлай.

Һис шикһеҙ, Аллаһы Тәғәлә беҙҙең турала ҡайғырта. Шулай уҡ беҙ ҙә үҙебеҙгә ярҙам итергә тейеш. Беҙгә тормош, әйләнә-тирә, кешеләр һәм үҙебеҙ тураһындағы фекерҙәребеҙҙе тыңларға, һәм әгәр кире образдар барлыҡҡа килһә, уларҙы ыңғай яҡҡа борорға өйрәнергә кәрәк. Яҡшылыҡ тураһында уйлау ғәҙәтен тамырландырыу, тәбиғи, ваҡыт талап итә, ләкин көс һалыу быға торошло: ҡалған ғүмер Аллаһы Тәғәлә ихтыяры менән гармонияла һәм сәләмәтлектә уҙасаҡ.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## Ерҙәге ожмах сағылышы ул

**Бөгөнгө көндә никах тураһында күп кенә бәхәстәр тыуа. Ни өсөн кешеләр йәмғиәттә йәшәргә һәм ғаилә ҡорорға тейеш? Улар айырым ғына йәшәй алмаймы?**

Яңғыҙлыҡ Аллаһы Тәғәләгә хас, сөнки Ул, бөйөк Яралтыусы, ошо өҫтөнлөклө хоҡуҡты барлыҡ йән эйәләренә биргән һәм барыһын да үҙ ише менән яралтҡан. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә яралтҡан бөтә йән эйәләре бер-береһенә мохтаж. Шул уҡ ваҡытта бөтә йән эйәләренең дә тәбиғәттән үҙ етешһеҙлектәре бар. Аллаһы Тәғәлә яралтҡан бөтә йән эйәләренең бер-береһенә, шулай уҡ Аллаһы Тәғәлә яралтҡан башҡа йән эйәләренә лә мохтажлығы бар.

Аллаһы Тәғәләнең бөтә йән эйәләре араһында бигерәк тә кеше үҙ ишенә мохтаж. Сөнки кешенең ихтыяждары һәм теләктәре башҡаларҙың ихтыяждарын күп тапҡырға ашып китә. Ә беҙҙең теләктәребеҙ, ҡағиҙә булараҡ, артҡандан-арта бара һәм бер ваҡытта ла бөтмәй, сөнки кеше һәр ваҡыт рухи яҡтан да, матди яҡтан да етеш йәшәргә теләй. Ә ҡайғы-хәсрәттәр, ярлылыҡ, ғазаптар, ауыр хеҙмәт һәм һөжүмдәр уның тормошон ауырлаштыра ғына. Ундай ваҡытта кеше көслө яурын һәм ҡайнар йөрәк эҙләй.

Ошоға бәйле, "кеше" аңлатмаһы үҙе үк "енес", "эҫенеү" һәм "дуҫлыҡ" яһалма аңлатмаларынан килеп сыҡҡан. Ошо уҡ уның башҡа кешеләр, бигерәк тә үҙенең ҡәрҙәштәре менән аралашырға мохтаж икәнлеген иҫбатлай. Был ихтыяж кешенең иң төп үҙенсәлеге булып тора һәм уның асылын билдәләй.

"Беҙ һәр нәмәне ишле итеп барлыҡҡа килтерҙек, ихтимал, һеҙ ҙә уйлап ҡарарһығыҙ" (аз-Зарийат, 49).

"Ер үҫтергән нәмәләрҙең барыһын да, һәм уларҙың үҙҙәрен дә, һәм улар белмәгән кешеләрҙе лә ишле-ишле итеп барлыҡҡа килтереүселәргә дан!" (Йасин, 36).

Шулай итеп, Аллаһ ике енес яралтҡан, ләкин шуның менән бергә бер генә йән эйәһен дә икенсеһенә оҡшаш итмәгән. Хатта бер йомортҡалы игеҙәктәр ҙә бер-береһенән холоҡ үҙенсәлектәре буйынса ла, бармаҡ эҙҙәре буйынса ла айырыла. Аллаһы Тәғәлә бөтә йән эйәләрен дә үҙ ише менән яралтҡан һәм уларҙың яҡынайыуы өсөн үҙ-ара тартылыу ҡанунын булдырған. Аллаһ артабан бер-береһен тулыландырһындар өсөн уларҙың физик һәм рухи дәрәжәләрен берләштергән.

Хәҡиҡәттә, ир кешенең ҡатын-ҡыҙға, ҡатын-ҡыҙҙың ир-атҡа ихтыяжы кешелек нәҫелен дауам итәсәк. Һис шикһеҙ, был берҙән-бер маҡсат түгел, сөнки ныҡлы ғаилә төҙөү менән рухи һәм дөйөм тыныслыҡ, именлек киләсәк һәм ғаилә ағзалары гармонияла йәшәйәсәк. Был бөтә кешелектең төп маҡсаты булып тора ла инде.

Ә бөтә был бөйөклөктәрҙе тик Аллаһы Тәғәләгә һөйөү аша ғына яуларға мөмкин. Был - ғәҙәти мөхәббәттән Аллаһы Тәғәләгә мөхәббәткә күсеү ул. Тимәк, был юл өсөн ғәҙәти мөхәббәт мәжбүри шарт булып тора, сөнки ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәт Аллаһы Тәғәләнең ризалығын алыр өсөн беренсе баҫҡыс ул. Әгәр ҙә мөхәббәт енси теләктәр арҡаһында ғына барлыҡҡа килһә, ул хаҡ тойғоларға әйләнә алмай. Хаҡ мөхәббәт - бер-береһен яратҡан ике иштең бер-береһенә илаһи тартылыуы. Бер-береһенә тойғолар менән бәйләнгән йөрәктәр егет һәм ҡыҙҙың тартылыу үҙәге булып, мөхәббәткә тулылана, һәм шул юл менән Аллаһы Тәғәләне яратыу һәләте бирә. Бала тыуыу менән ғаиләлә был һәләт камиллаша һәм уның абруйына әйләнә.

Кешеләрҙең йөрәгендә Аллаһы Тәғәләгә һөйөү уятыр өсөн Ул ҡушҡан ҡағиҙәләр буйынса никах уҡытырға кәрәк. Ә тик психик һәм физик теләктәр, йән тартыу һәм дәрт буйынса ғына ҡоролған ғаилә, ҡағиҙә булараҡ, тулы мөхәббәт емешен бирә алмай. Бындай ғаиләләрҙән кешенең рухи үҫеше өсөн бер ниндәй ҙә файҙа булмаясаҡ, сөнки ир менән ҡатын ғәҙәттә үҙҙәренең тән теләктәренең ҡоло ғына булып ҡаласаҡ. Әхлаҡи хәле шул уҡ кимәлдә ҡаласаҡ, эске донъяһы ярлыланасаҡ һәм деградацияға биреләсәк. Камиллыҡҡа һәм рухи бейеклеккә ынтылыусы, йәғни имандарын тулыландырып тороусы ғаиләләр ҙур өлгө булып тора.

Хәҡиҡәттә, һөйөү менән нурланмаған йөрәктәр, оҙаҡ ваҡыт эшкәртелмәгән, ташландыҡ ергә оҡшаған. Ир менән ҡатын мөнәсәбәте "тупраҡты" эшкәртеп бөтөргә ярҙам итә. Был бер-береңә булған мөнәсәбәт йүнәлеше Аллаһы Тәғәләгә йүнәлгән булырға тейеш, тигәнде аңлата, сөнки ир менән ҡатындың бер-береһенә булған тойғоһо илаһи мәғәнәгә эйә булғанда ғына Аллаһҡа ҡарата мөхәббәткә әйләнеүе мөмкин. Сабый тыуыуы Аллаһы Тәғәләгә мөхәббәт формалашыуының икенсе этабы булып тора. Шулай итеп, йөрәктәр баҫҡыстан баҫҡысҡа үҫешә килә юғары маҡсатҡа - Аллаһҡа мөхәббәткә өлгәшәсәк һәм Аллаһы Тәғәләнең бәхетлеләре араһында лайыҡлы урын аласаҡ.

Шуға күрә, йәмғиәт күпкә үҫешкән кимәлгә күтәрелһен, ә ғаиләләр илаһи шатлыҡ һәм бәхеткә ҡойонһон өсөн һәр бер айырым ғаиләлә именлек һаҡлау мөһим. Бының өсөн ир менән ҡатын никахҡа кергән саҡта бер-береһенә Аллаһ исеме менән илаһи мөхәббәткә илтеүсе ант бирәләр. Ә бының өсөн, һис шикһеҙ, бер-береңә хөрмәт, ышаныс, ихласлыҡ кәрәк.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# БЕР-ИКЕ ХӘҘИС ЯТЛАП ҠЫНА...

## белемле булып булмай

**Күптән түгел Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратында мосолман йәштәре менән дини экстремизм, эскелек, наркоманлыҡ проблемалары тураһында һөйләшеү булып үтте. Форумда республика райондары вәкилдәре лә ҡатнашты.**

- Бөгөн республикабыҙҙа беҙгә Аллаһҡа инанырға ҡамасаулаған, бер ғаилә булып татыу йәшәүебеҙгә аяҡ салған, кешеләрҙе икенсе йүнәлешкә борған төрлө төркөмдәр күренә башланы. Ислам - ул тыныслыҡ, дуҫлыҡ дине, ул ата-әсәйҙәребеҙҙе, туғандарыбыҙҙы, яҡындарыбыҙҙы яратырға саҡырыусы дин. Ә был ағымдар бөтөнләй икенсе маҡсатта ойошторолған. Беҙҙең бергәләп уларға ҡаршы тора алыуыбыҙ бик мөһим. Йәштәр нимә дөрөҫ, нимә яңылыш икәнен айыра белергә тейеш. Киләсәктә республикабыҙҙа дини белемде донъяуи белем кимәленә күтәрергә тигән маҡсатта төрлө дини белем алыу үҙәктәре асыу күҙ уңында тотола, - тине үҙенең сығышында БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт конфессиональ-ара мөнәсәбәттәр советы рәйесе Владимир Пятков.

Сибай ҡалаһы собор мәсете имамы Әғләметдин хажи Ғәзизовтың һөйләгәндәре лә бик фәһемле булды:

- Бындай форум бик кәрәк ине, - тине ул.- Йәштәр беҙҙең киләсәгебеҙ, беҙ уларҙы ла тыңларға тейешбеҙ, тип уйлайым. Ауылдарҙа мәсеттәр күбәйҙе, ләкин уларҙа үҙебеҙҙең имамдар етешмәй һәм уларҙың күптәре ябыҡ тора. Беҙҙең Сибай мәсете 24 сәғәт буйына эшләй. Тағы ла шундай ҡыуаныслы хәбәр еткергем килә: быйыл Хөкүмәтебеҙ ярҙамында 15 йыл буйы төҙөлмәй торған мәҙрәсәнең эштәре башланып китте. Бөгөнгө көндә дин юлындағы буталсыҡлыҡтар белем булмау арҡаһында килеп тыуҙы, тип әйтер инем. Ололар - йәштәрҙе, йәштәр ололарҙы аңларға тейеш. Наҙанлыҡты бөтөрөү өсөн беренсе юл - уҡытыу. Бөгөнгө йәштәребеҙ дингә килеп, бер-ике хәҙисте ятлап, бер-ике китап уҡып сыға ла әллә кем була ла китә. Улар хатта Әбү Хәнифәнең кем икәнен дә белмәй...

Ысынлап та, ислам динен таратыу өлкәһендә байтаҡ проблемалар йыйылып киткән. Бөгөн мәсеттәребеҙ ҙур бер ғилем үҙәктәре ролен үтәргә, шулай уҡ улар янында балалар майҙансығы ла, спорт майҙансығы ла, сауҙа нөктәләре лә булырға тейеш. Шулай уҡ мәсеттәребеҙ ғилем алырға ынтылған халыҡ менән тулы булырға тейеш. Әлбиттә, бының өсөн мәсеттәрҙә ғилемле, аңлы, тәҡүәле, халыҡ менән эш итә белгән, көслө йәш имамдар булыуы шарт. Әгәр ҙә беҙҙең имамдарыбыҙ мәсет мөнбәрҙәренән үҙ телебеҙҙә фәһемле вәғәздәр, хикмәтле фекерҙәргә нигеҙләнгән хөтбәләр һөйләп, илдәр, халыҡтар тормошо, тәрбиә һәм тәрбиәлелек хаҡында мәғлүмәттәр биреп торһа, беҙ моратыбыҙға ирешмәй ҡалмаҫ инек. Әлеге форумда йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә ошо хаҡта фекер алышты.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

**Йәмле май айының бер көнө. Ауылда тормош ҡайнай, берәүҙәр баҡсала ҡаҙына, икенселәр йорт-ҡура ныға. Төшкә табан Тәпәнәк тауынан урамдың үрге осона аҙашып, йәш ярым самаһындағы ҙур булмаған муйнаҡ айыу балаһы килеп төшә. Башта бер аҙ тирә-яҡҡа ҡарап, үҙе өсөн ғәҙәти булмаған күренеште күҙәтеп тора. Сиҙәмдә уйнап йөрөгән бәләкәй балалар ҡыуанышып, көтөлмәгән ҡунаҡ янына йүгереп киләләр. Айыу балаһы урам буйлап түбәнгә ҡарап саба һәм ауыл уртаһына етәрәк, боролоп тауға менеп китә. Күп тә үтмәй, ағастар араһына инеп, күҙҙән дә юғала. Уның артынан күҙәтеп ҡалған балаларҙың: "Һоро ғына, матур ғына, түңәрәк кенә..." - тип ҡыуанып ҡысҡырышҡан тауыштары ишетелә.**

# АЙЫУҘЫҢ КЕШЕГӘ ТУҒАНЛЫҒЫ БАРМЫ?



Бүренең ауылға төшөп, кәзә-һарыҡ алып китеүе ғәҙәти хәл. Ә аҡыллы, хәйләкәр тайыш табандың кеше араһына килеп инеүе һирәк осрай. Ун йылдар элек, ноябрь айҙарында, тәүге ҡар яуып, һыуыҡтар төшкәс, иртә таң менән ҙур ғына айыу ауыл урамы буйлап, түбәнге остан үрге осҡа тиклем үткәйне.

- Иртәнге һауынға фермаға китеп барам, арттан дөпөлдәгән тауыш ишетелде, башта берәй һыбайлы килә икән тип уйлағайным, - тип һөйләй Флүрә Баймырҙина. - Артыма әйләнеп ҡараһам, урам буйлап ҙур айыу йүгереп килә, бағана төбөндә йәшенеп ултырып ҡалдым.

Аҙаҡ ҡарҙа ҡалған эҙҙәрҙән айыуҙың бүреләр эҙәрлекләүенән ҡасып ауылға килеп ингәне асыҡланды. Бүреләр ауылға инергә баҙнат итмәй, ауыл осонда тороп ҡалған.

Ҡыр хайуандарының ҡурҡыныс янағанда ярҙамға кешегә һыйыныуы билдәле. 1985 йылда һунарсылар эҙәрлекләүенән ҡасып, Кейекбай ауылында урман ҡараусы Хәлитов Зарифтың ҡураһына болан килеп инә. "Кемгә килергә белгән әле", - тип көлөшә ауыл кешеләре. Бер нисә көн ҡунаҡ булғандан һуң, тынысланған болан кире үҙ йортона - урманға юллана.

-1970 йылдар баштары, йәй ваҡыты, - тип иҫләй Бәләкәй Ҡыпсаҡ ауылынан Йәғәфәров Ишдәүләт. - Кискә ҡарай беҙ, бер төркөм йәштәр, клуб асылғанын көтөп, һикәлтәлә гармунда уйнап ултырабыҙ. Бер заман өҫкө урам буйлап ҙур ғына айыу төшөп килгәнлеге күренде. Клуб тапҡырына еткәс, айыу туҡтап, беҙгә ҡарап ултырҙы. Гармун тауышы тынғас, тороп, ауылдың икенсе осона китте. Ул йылдарҙа Бәләкәй Ҡыпсаҡ ауылына айыу йыш килештергән.

Шул йылдарҙа Килдеғол ауылы эргәһендәге Оҙонсал утарында йәшәүсе Фазлетдинова Зәкирә инәйҙең ҡураһына ҙур ғына айыу килеп инә. Инәйҙең һарыҡтары һарайҙа бикле була. Айыу һарай башына менеп, түбәлеккә һалынған һайғауҙарҙы аҡтара башлай. Зәкирә инәй юғалып ҡалмай, һарай башын аҡтарып маташҡан айыуҙы ҙур ғына таяҡ менән туҡмап, урманға ҡасыра.

Элегерәк етем ҡалған айыу балаларын кешеләр алып ҡайтып көтөп, ҙурайғас, йә баҙарға алып барып һатҡандар, йә кире урманға ебәргәндәр. Тимер ауылында йәшәгән беҙҙең Библиәмин олатайҙың да ҡулға эйәләштерелгән айыуы булған, тип һөйләй атайым Сәлих Хафиз улы. Ҡаянан ҡолап төшөп йәрәхәтләнгән бәләкәй айыу балаһын өйөнә алып ҡайтып, дауалап, аяҡҡа баҫтыра. Ҙурайғас, айыу, нишләптер, хужаһын тырнағы менән сапсый. Олатай уны Темәс баҙарына алып барып, бер урыҫ байына һатып ебәрә.

Беҙҙең яҡтарҙа айыу тураһында һүҙ сыҡһа, кеше затынан бит ул, тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. "Айыу кешенән килеп сыҡҡан. Ҡасандыр ауылда бик уҫал, һаран кеше йәшәгән. Күршеләре менән һыйышып килешә алмағас, урманға барып төпләнгән. Аҙаҡ, ҡырағайлашып, айыуға әйләнгән, тип һөйләй торғандар ине борон", - тип иҫләй ине Кейекбай ауылынан Туҡбаева Хөснikамал инәй.

"Аргументы и факты" гәзитенең 2009 йылдың 42-се һанында "Маймылға ҡарағанда айыуҙар беҙгә күпкә яҡыныраҡ" исемле мәҡәләлә ғалим-антрополог Александр Белов түбәндәгеләрҙе яҙа:

- Мин эт менән айыуҙың кеше тоҡомонан икәнен төрлө дәлилдәр менән иҫбат итергә әҙермен. Айыуҙың табаны кеше табанына оҡшаш, маймыл табаны күпкә камилыраҡ. Күренеүенсә, ниндәйҙер деградацияға бирелгән кеше заты, дүрт аяҡланып, айыуға әйләнгән.

Әлбиттә, бөтә гипотезаларҙы ла ысын хәҡиҡәт итеп ҡабул итеп булмай, шулай ҙа уйланырға урын бар. Ер йөҙөндә кешенән ҡала иң аҡыллы биш хайуан: дельфин, маймыл, фил, эт һәм айыу.

Айыу үҙенең психологияһы буйынса ла кешегә яҡын. Ул дрессировкаға тиҙ өйрәнә. Бихисап күп трюктар эшләргә һәләтле. Велосипедта, мотоциклда йөрөй, коньки ҙа шыуа, хатта хоккей ҙа уйнай. Шулай ҙа уның ҡоро ерҙәге иң көслө ҡурҡыныс йыртҡыс икәнен дә онотторға ярамай.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**Бөрйән районы.**

*ШУНДАЙ АҠЫЛ...*

# СЕРЛЕ КӘМСЕЛЕК

Борон заманда бер батша матур, камил, бер ниндәй кәмселеге булмаған һарай һалдырырға теләгән. Көндәрҙән бер көндө әлеге һарайҙы төҙөп тә ҡуйғандар. Шунан батша үҙенең вәзирҙәрен һәм барса яҡындарын янына саҡыртып алған һәм:

- Әйтегеҙ әле, һарайымдың ниндәй ҙә булһа берәй кәмселеге, етешһеҙлеге бармы? - тип һораған.

Быға ҡаршы вәзирҙәр:

- Юҡ, батшабыҙ, бер генә кәмселеге лә, бер генә етешһеҙлеге лә юҡ, - тигәндәр.

Батша быға бик һөйөнгән, ләкин бер вәзирҙең һүҙһеҙ тороуын күреп, унан:

- Әллә берәй кәмселеген күрҙегеҙме? - тип һораған.

- Батшам, кес кенә, бик кес кенә етешһеҙлеге бар һарайығыҙҙың, - тигән вәзир.

- Ниндәй етешһеҙлек ул? Әйҙә, әйт, хәҙер саранын күрербеҙ.

- Юҡ, төҙәтә алмаҫһығыҙ, батшам.

- Нисек төҙәтә алмайым? Мин батша түгелме ни?!

- Батша, әлбиттә, ләкин быға һеҙҙең көсөгөҙ етмәйәсәк.

- Йә, минең көсөм етмәҫлек ниндәй кәмселек инде ул?

- Һарайыңдың бөтә ере лә урын-еренә килгән, бары тик бер етешһеҙлеге бар: ул мәңгелек түгел һәм уны бер кем дә мәңгелек итә алмаҫ...

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Шатлыҡҡа илтеүсе юл

**Был бүлектең төп темаһы - шатлыҡҡа эйә булыу. Тап суфыйҙар, бигерәк тә дәрүиштәр быға нисек өлгәшергә икәнлеген яҡшы белгән.**

XI быуатта суфыйҙар тарафынан матур образдар аша Аллаһҡа һөйөүҙе күтәргән яңы шиғриәт барлыҡҡа килә. Суфыйҙар, шул иҫәптән Кваджаган да акцентты Аллаһтың кеше аңына аңлайышһыҙ булыуынан уның ябайлығы файҙаһына яһаған.

Кваджаган башҡалар кеүек билдәлелек яуламаған. Теология мәктәбендә белем биреүсе Әл-Ғазали стеналары артынан бик күп суфыйҙар сығыуға булышлыҡ иткән мәктәптәрҙе булдырыуҙа һәм уларҙы тотоуҙа ҙур роль уйнаған. Был изгеләр үҙҙәренең мистик философик ҡараштары һәм аҡыллы фекерҙәре аша билдәлелек яулаған.

Беҙгә, яҡшыраҡ тормош эҙләүселәргә, боронғо мәҙәниәттәрҙән күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк. Цивилизацияның тормошобоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә лә үтеп инеүе һөҙөмтәһендә матди тормош беҙҙе быға¬са бер ҡасан да булмағанса Аллаһтан алыҫлаштырҙы.

Һеҙ ҡасан да булһа үҙ-үҙеңә ярҙам итеүсе һөҙөмтәле программала ҡатнашҡанығыҙ булдымы? Ул һеҙгә уңыш, ауыр хәлдән лайыҡлы сығыу ғына түгел, енси тормошоғоҙҙо яҡшыртыу, яңы ризыҡ татып ҡарау мөмкинлеге биреү, үҙ-үҙең менән гармония табыуға килтереү, яңы шатлыҡтар, ситтәр яғынан ихтирам килтереү һәләтенә эйә. Мин быны яҡшы беләм, сөнки үҙем шуны кисерәм.

Суфыйҙар белемдең иң көслө сығанағы булып интуиция тороуын белгән. Нимә һуң ул интуиция? Ул эстән килгән тауыш, Аллаһ менән бәйләнеш. Һеҙҙең уҡытыусығыҙ мин түгел, ә Аллаһ.

Шатлыҡтан мәхрүм итеүсе яуыздар ҙа бар. Быйна һеҙ тормошоғоҙға шатлыҡ индереп, һеҙ уның ҡайҙан килгәнен беләһегеҙ. Белем һәм шатлыҡ сығанағынан да көслөрәк ҡеүәтле сығанаҡ юҡ.

Әммә һеҙҙең тормошоғоҙҙа аҫтыртын ғына килеп, үҙенең ҡара эшен эшләүсе фактор ҙа бар. Ул шатлығығыҙҙы ғына урлап ҡалмай, энергияғыҙҙы һура, асылышығыҙға аяҡ сала, йәшәү дәртен һүндерә.

Был яуыз - стресс.

Әгәр стресты танырға һәм уны контролләргә өйрәнһәгеҙ, быға тиклем программалаған бөтөн нәмәлә лә нык алға китербеҙ. Һеҙ ыңғайыраҡ һәм оптимисыраҡ булырһығыҙ, шәхси сифаттарығыҙҙы яҡшыртырһығыҙ, туғандарығыҙ һәм дуҫтарығыҙ һеҙгә яҡшыраҡ мөнсәбәт күрһәтер. Тормошоғоҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрер.

Стресс үҙе тураһында һиҙҙермәй. Оҙайлы йәки көслө стресҡа бирелгәндә ҡыңғырауҙар ҙа саң ҡаҡмай, сиреналар ҙа ҡысҡырмай. Әммә нервыларығыҙ ҡаҡшай, ҡан баҫымығыҙ күтәрелә, тирә-яҡтағыларға көн күрһәтмәй башлайһығыҙ, иммунитетығыҙ ҡаҡшай, тормошоғоҙ кирегә тәгәрәй.

Стресс беҙҙе һәр ерҙә һағалай. Хатта уның сәбәбе булып һауа торошонoң үҙгәреүе лә торорға мөмкин. Әммә стерстың ыңғай яҡтары ла бар. Был хаҡта - киләһе һанда.

**Роберт СТОУН.**



## 21 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Возмездие", 5-я серия. Сериал
22.30 "Василий Сталин. Сын за отца". Док. фильм
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Следствие по телу", 5-я серия. Сериал
00.45 "Голливудские менты"
02.50, 03.05 "Большой толстый лгун"
03.00 Новости
04.30 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Целуй меня крепче"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 16-я серия
17.55 "Все к лучшему", 43-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 114-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Голубка", 14-я, 15-я и 16-я, закл. серии
23.50 "Городок"
00.45 "Вести+"
01.05 "Честный детектив"
01.45 "Квартет Гварнери". Приключения
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Платина". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Мент в законе-2". "Черный интернационал", 1-я и 2-я серии
21.30 "Терминал", 7-я и 8-я серии. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Детектив Раш". Сериал
02.40 "Суд присяжных"
04.00 "Ты не поверишь!"

### БСТ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**16.30 "Аплодисменты". М. Идрисов**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Замандаштар"**
**23.30 "Орнамент"**
**23.45 "Выйти замуж за капитана"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 22 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Возмездие", 6-я серия
22.30 "Свидетели". "Альфонсы"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.45, 03.05 "Легенды осени". Мелодрама
03.00 Новости
03.20 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 17-я серия
17.55 "Все к лучшему", 44-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 115-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь и разлука", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Я вам больше не верю". Драма
02.05 "Горячая десятка"
03.05 "Закон и порядок"
04.00 "Эфир как предчувствие"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Платина". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Мент в законе-2". "Черный интернационал", 3-я и 4-я серии
21.30 "Терминал", 9-я и 10-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Правило лабиринта", 1-я и 2-я серии
01.25 "Главная дорога"
02.00 "Кулинарный поединок"
03.00 "Детектив Раш"
03.55 "Суд присяжных"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00, 15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**16.15 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**16.30 Ильгам Валеев**
**17.55 Чемпионат России по волейболу среди мужских команд. "Урал" (Уфа) - "Динамо" (Краснодар). Прямая трансляция**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.45 "Белые росы"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 23 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Возмездие", 7-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Белый воротничок", 1-я серия
01.00, 03.05 "Особое мнение". Триллер
03.00 Новости
03.40 "Вспомни, что будет"
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Боденский капкан. Смерть над озером"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 18-я серия
17.55 "Все к лучшему", 45-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 116-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь и разлука", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "История о Гарри". Комедия
02.00 "Закон и порядок"
02.55 "Бумбараш"
04.15 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Платина". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Мент в законе-2". "За все в ответе", 1-я и 2-я серии
21.30 "Терминал", 11-я и 12-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Правило лабиринта"
01.30 "Квартирный вопрос"
02.35 "Детектив Раш". Сериал
03.30 "Суд присяжных"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00, 16.30 "Шэхес"**
**10.30 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00, 15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 17.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45, 20.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**16.15 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**17.00 "Печаль моя светла…"**
**17.45 "На страже закона"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**19.15 "Историческая среда"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Замандаштар"**
**23.45 "Обыкновенное чудо"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 24 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Возмездие", 8-я серия
22.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.45 "Шкатулка". Триллер
02.50, 03.05 "Залив Аламо"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 19-я серия
17.55 "Все к лучшему", 46-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 117-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Любовь и разлука", 7-я и 8-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Долг". Боевик
02.05 "Закон и порядок"
03.00 "Бумбараш"
04.25 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Платина". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Мент в законе-2". "За все в ответе". Сериал
21.30 "Терминал", 13-я и 14-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Правило лабиринта"
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Детектив Раш". Сериал
03.30 "Суд присяжных"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Сэсэн. Шагаргази Габдиев"**
**10.30 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00, 15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Приключения Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**16.15 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**16.30 "Четыре времени года"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Замандаштар"**
**23.45 "Обыкновенное чудо"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 25 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
23.45 "Закрытый показ". "Сумасшедшая помощь". Трагикомедия
03.10 "Вся королевская рать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Каменская". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 20-я серия
17.55 "Все к лучшему", 47-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 118-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.55 "По следу Феникса". Мелодрама
01.00 "В погоне за свободой". Романтическая комедия
03.20 "Успех"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели"
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Терминал", 15-я и 16-я серии
22.55 "Музыкальный ринг НТВ"
00.15 "Женский взгляд"
01.05 "Дураки умирают по пятницам". Боевик
03.05 "Суд присяжных"
04.05 "До суда"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00, 15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 Реалити-шоу "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**16.15 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**16.30 "Народная музыка"**
**16.45 "Млечный путь"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**19.15 "Йома"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Надо знать!"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.45 "Добряки"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 26 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Хроника ночи"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.00 Новости
12.15 "Среда обитания"
13.20 "Алексей Булдаков. "Ну вы, блин, даете!"
14.20 "Особенности национальной охоты в зимний период". Комедия
15.50 "Ефим Шифрин. Человек-костюм"
16.50 "Кто хочет стать миллионером?"
17.50 "Общая терапия-2", 3-я и 4-я серии. Сериал
19.50 "Фабрика звезд. Возвращение"
21.00 "Время"
21.15 "Фабрика звезд. Возвращение". Продолжение
22.30 "Прожекторперисхилтон"
23.00 "Майкл Клейтон". Триллер
01.20 "Обет молчания"
03.00 "Золотой лед"

### РОССИЯ 1
05.20 "Хорошо сидим!"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.25 "Кружева". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Кружева". Продолжение
16.30 "Субботний вечер"
18.10 "Эффект домино". Драма
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Футбол". Чемпионат Европы-2012. Отборочный турнир. Армения - Россия
22.50 "Гадкий утенок". Мелодрама
02.35 "Девчата"
03.10 "Смех и наказание"

### НТВ
05.05 "Холм одного дерева"
06.55 "Детское утро на НТВ"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Живут же люди!"
09.20 "Внимание розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Сеанс с Кашпировским. Призраки"
14.10 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
20.55 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
23.50 "Нереальная политика"
00.25 "Невероятный Халк". Фантастический боевик
02.40 "До суда"
03.25 "Суд присяжных"

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Концерт**
**08.15 Н. Асанбаев, Ф. Асянов. "Муж и жена - одна сатана". Спектакль Сибайского башкирского драматического театра им. А. Мубарякова**
**10.00 "Белый клык"**
**10.45 "Ленинград, ул. Росси, 2"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 22.00 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Замандаштар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Надо знать!"**
**17.30 "Третий звонок". Ф. Буляков. "Бибинур, ах, Бибинур!". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Третий звонок" (продолжение)**
**20.30 "Йома"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 "КВН РБ-2011"**
**00.15 Концерт**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 27 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "Классный мюзикл: выпускной"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.15 "Роковая роль Александра Фатюшина"
13.10 "Лекарство против страха". Детектив
15.00 "Брежнев", 4 серии. Драматический сериал
19.00 "Жестокие игры"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Шоу ни бе ни ме нехило"
23.30 "Познер"
00.35 "Вальс с Баширом". Полнометражный мультипликационный фильм
02.10 "Братья блюз 2000"

### РОССИЯ 1
04.55 "Девушка с гитарой". Комедия
06.40 "Сам себе режиссер"
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Утренняя почта"
08.40 "Сто к одному"
09.25 "Города и Веси"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Кружева". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Кружева". Сериал. Продолжение
15.10 "Смеяться разрешается"
17.00 "Танцы со Звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Одуванчик". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного". Концерт
00.30 "С глаз - долой, из чарта - вон!" Комедия
02.40 "Ядовитый плющ"

### НТВ
05.20 "Холм одного дерева"
07.10 "Детское утро на НТВ"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Семин". "Серийный убийца". Детективный сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "История всероссийского обмана. Икра. Выход есть"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Глухарь". Криминальный сериал
01.00 "Авиаторы"
01.35 "В зоне особого риска"
02.10 "Долина смерти". Фильм ужасов
03.50 "Ты не поверишь!"

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**07.45 Ф. Богданов. "Измена предкам". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**10.00 "Тамыр представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Замандаштар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Надо знать!"**
**17.30 "Народная музыка"**
**18.00 "Весело живем"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Пора разобраться"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.15 "Вечер.com"**
**23.00 "Влюблен по собственному желанию"**
**00.30 "Свидание с джазом"**
**01.00 Прогноз погоды**

***✓ Ни өсөн беҙ, Бөйөк Ватан һуғышында еңеү яулаған халыҡ, Германия, Япония, Италияға ҡарағанда ярлыраҡ һәм ирекһеҙерәк йәшәйбеҙ? Ни өсөн беҙҙең инженерҙарыбыҙ, ғалимдарыбыҙ АҠШ-ҡа һәм Көнбайыш Европаға китә?***

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

# ҠУРҠҠАНҒА ҠУШ КҮРЕНӘМЕ,

## Йәки Рәсәйгә бола түгел, ә торғонлоҡ янай

**Рәсәй телевидениеһы Яҡын Көнсығышта - Туниста, Мысырҙа, Иорданияла һәм бигерәк тә Ливияла барған ваҡиғаларҙы киҫкен сюжетлы сериал кеүек күрһәтә. Һуңғы тиҫтә йылдарҙа үҙҙәре лә байтаҡ ҡайғы-хәсрәт күргән, киләсәккә өмөтө өҙөлгән рәсәйлеләр баш күтәргән "ғәрәп урамы"на һоҡланыу менән баға. Был ваҡиғалар күңелдә төрлө һорауҙар ҙа тыуҙыра: ә беҙҙә нисек һуң? Рәсәйҙә коррупция, эшһеҙлек юҡмы ни? Байҙар һәм ярлыларҙы айырып тороусы упҡын юҡмы? Илдә ғәҙел суд бармы? Һайлауҙарҙың ғәҙел үтеүенә күңелдә икеләнеү кисермәйбеҙме ни?**

### Градусникта нимә?

Был һорауҙарға ыңғай яуап биргәндән һуң, Рәсәйҙә лә ошондай ваҡиғалар башланып китмәһен, тигәнерәк хәүеф уяна бирәп ҡуя. Был фекерҙе билдәле сәйәсмәндәр ҙә уртаҡлаша. СССР-ҙың элекке президенты Михаил Горбачев үҙенә генә хас ҡәтғи тон менән былай тип әйтә: "Ил торғонлоҡ, апатия һәм коррупция һаҙлығына әйләнде. Был хәлдә иң ҡурҡынысы шул: йәмғиәттә йыйылып килгән көсөргәнештең урамдарға ла сығыуы ихтимал..."

Вице-премьер, финанс министры Алексей Кудрин да һуңғы арала азатлыҡ дефициты, һайлауҙарҙың "үтә күренмәле" булмауы, идара итеүҙең нығылыш булыуы тураһында һөйләй: "Рәсәй власы вертикале ил менән идара иткән төшөнсәләр стагнацияға (производствола, сауҙала һ.б. алға китеш, үҫеш булмауы) һәм үткәндәргә кире ҡайтыуға килтерәсәк".

Бында Кудриндың үҙенең "власть вертикале"нең мөһим өлөшө икәнен дә онотоорға ярамай. Һәм, моғайын да, һуңғы ғәрәп ваҡиғаларын анализлап, ил президенты Д. Медведевтың, беҙҙә был сценарий үтмәйәсәк, тигән белдереү менән сығыш яһауы ла бушҡа түгелдер.

Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, йәмғиәттең юғары ҡатламын да хәүеф биләне. Йәмғиәттәге ҡурҡыу тойғоһо өлөшләтә парламент һәм президент һайлауҙарының яҡынлашып килеүе менән бәйле. Тимәк, йәмәғәт дискуссияһы градусы өҫкә күтәреләсәк. Һуңғы осор тәжрибәһе күрһәтеүенсә, яңы мәғлүмәти технологиялар дәүерендә әһәмиәтһеҙ генә конфликт та, властың бәләкәй генә хатаһы ла сыуалыштарға килтереүе ихтимал.

Оппозиция халыҡтың ҡәнәғәтһеҙлеге кимәлен арттырып күрһәтмәйме икән? Социологтарға мөрәжәғәт итеп ҡарайыҡ. Яңыраҡ Левада-үҙәк белгестәре һуңғы егерме йыл эсендә рәсәйлеләрҙең тормош шарттары һәм кәйефен сағыштырмаса анализлаған. Рәсәйлеләр һаман да күп зарлана һәм власты әрләй. Улар оптимист түгел, ә пессимист. Халыҡты реформаларҙың аҡрын тормошҡа ашыуы һәм коммунизм ҡоролошоноң юҡҡа сығыуы менән йәшәү шарттары яҡшырасаҡ тигән өмөттәренең көтөлгән һөҙөмтәләргә килтермәүе борсой.

Тик социологтар һорауҙарҙы анығыраҡ итеп биргәндә бөтөнләй икенсе күренеш килеп сыға. Рәсәйлеләр, мәҫәлән, был йылдар эсендә тукланыу яҡшырҙы тип билдәләй. Халыҡтың 60 проценты үҙенең аҙыҡ-түлек кәрзине менән ҡәнәғәт. Мәғлүмәт сараларында белем биреү системаһы ҡәтғи тәнҡиткә тотолһа ла, халыҡтың 70 проценты мәғариф яҡшырҙы тип иҫәпләй. Тормош шарттары яҡшырыу менән ғаиләләрҙә үҙ-ара мөнәсәбәт тә һәйбәтләнгән. Ғаиләһендәге мөнәсәбәттәр менән яуап биреүселәрҙең 85 проценты ҡәнәғәт. Был матур күрһәткестә иң ярлы йәшәүселәр төркөмөндәге көсөргәнеш кенә боҙа. Былдай ғаиләләрҙә көс ҡулланыу, агрессия кимәле юғары ҡала. Улар араһында айырылышыуҙар һаны һәм тейешенсә тәрбиә алмаған балалар ҙа күп.

### Һуйырташ ҡайҙа һуң?

Бөгөн халыҡтың 70 проценты үҙенең тормошо менән тулыһынса ҡәнәғәт. Властка, бигерәк тә бюрократияға тәнҡитле ҡараштa булһалар ҙа, улар араһында "пролетариат һуйыртaшы" (булыжник пролетариата) алып, уны "буржуй"ға ташларға теләүселәр иҫәбе күп түгел. Рәсәйлеләрҙең баһаһына мәғлүмәт алыу мөмкинлектәренең йылдам үҫеүе лә йоғонто яһай. Әгәр ҙә 1970 йылдар аҙағында сит илгә командировкаға барып ҡайтҡандарҙан, унда ит бармы, халыҡ асыҡмаймы, тип һораһалар, бөгөн был һорауҙарҙы бер кем дә бирмәй. Әммә күп сағыштыралар. Европа турaһында һүҙ йөрөтһәк, был сағыштырыуҙар йышыраҡ беҙҙең файҙаға булмай.

"Торлаҡ мәсьәләһе"н алып ҡарайыҡ. Әле егерме йыл элек ғаиләләр башлыса коммуналь фатирҙарҙа йәки тар хрущевкаларҙа йәшәне. Ил буйынса бар уңайлыҡтар ихатала булған барактар һәм дөйөм ятаҡтар күпме ине! Ошо ваҡыттан алып миллионлаған фатир төҙәлгән. Әммә торлағы менән ҡәнәғәт ҡалғандар артмаған, киреһенсә, түбәнәйгән. Кешеләр сит илдәрҙәге йорттарҙы, юлдарҙы, мәктәптәрҙе, дауаханаларҙы күрә һәм сағыштырып ҡарай. Миллионлаған рәсәйлеләр сит илдәргә сыға һәм илгә әйләнеп ҡайтҡас, уйлана башлай. Сағыштырыуҙарға ҡарай башлаһаң, беҙҙең халыҡтың социаль оптимизмы һоҡландыра ғына. Ни өсөн беҙ, Бөйөк Ватан һуғышында еңеү яулаған халыҡ, Германия, Япония, Италияға ҡарағанда ярлыраҡ һәм ирекһеҙерәк йәшәйбеҙ? Ни өсөн беҙҙең инженерҙарыбыҙ, ғалимдарыбыҙ АҠШ-ҡа һәм Көнбайыш Европаға китә, а беҙгә бераү ҙә атлығып тормай. Хатта депутат-илһөйәрҙәр һүҙҙәренә ҡарағанда, "Балтика буйында ҡыҫырыҡланған" ватандаштарыбыҙ ҙа Рәсәй паспорты алырға ашыҡмай.

**Әммә властарға булған иң ҙур шелтә - реформалар турaһында күп һөйләп, бер нәмә лә эшләнмәүе (Горбачев ваҡытындағы кеүек). Телевизорҙан ни тиклем күп татлы һүҙҙәр әйтелһә, юлбашсыларҙың бөйөклөгөнә һәм уларҙың пландарына кешеләр шул тиклем аҙыраҡ ышана.**

**Вячеслав КОСТИКОВ,**
**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# ЯПОНИЯЛАҒЫ ЕР ТЕТРӘҮҘӘР...

## Хоҙайҙың тағы бер иҫкәртеүелер

**Японияларғы ер тетрәүе эҙемтәләре ҡот осҡос: меңәрләгән кеше һәләк булған, ҡайһы бер районда һәм ҡалалар ер йөҙөнән бөтөнләйгә юйылған. Ә бит Япония ер тетрәүен алдан иҫкәртеү буйынса донъяла иң көслө системаға эйә ил ине. Сейсмологтар алдан иҫкәртһә лә, япон халҡы өсөн төрлө ер тетрәүҙәр ғәҙәти хәл булғас, улар былдай һөҙөмтәне баштарына ла килтермәгән. Ләкин тәбиғәттең үҙ ҡануңдары. Был юлы һәләкәт глобаль масштаб алды. Япония премьер-министры Наото Кан үҙенең сығышында илдә барлыҡҡа килгән хәлде Икенсе Бөтә донъя һуғышы ваҡытында булған ауыр кризис менән тиңләне.**



Ер тетрәүе 11 мартта Японияның баш ҡалаһы Токионан 373 км алыҫлыҡта 20 километр тәрәнлектәге диңгеҙҙә башлана. Уның магнитудаһы, төрлө баһалар буйынса, 8,9 алып 9,1 тиклем етә. Был ер тетрәүе тарихта булған барлыҡ сейсмологик күҙәтеүҙәр араһында Японияла иң көслөһө һанала һәм ер йөҙөндә биш иң ҡеүәтле ер тетрәүҙәре рәтенә индерелә. Ер тетрәүе 10 метрға еткән цунами тулҡындары барлыҡҡа килтереп, үҙ юлында осраған бер нәмәне лә ҡалдырмай. Машиналар, өйҙәр, кораблдәр - барыһы ла йыуылып, диңгеҙгә төшә. Поездар рельстарҙан алып ташлана. Меңәрләгән кеше һәләк була һәм хәбәрһеҙ юғала. Ер тетрәүе һөҙөмтәһендә илдә көслө янғындар сыға, төрлө сәнәғәт объекттарында шартлауҙар башлана. Шундай шартлауҙар нефть компаниялары нефть һаҡлағыстарында, "Онагава" АЭС-ында, "Фукусима-1" атом электростанцияһында ла була. Был шартлауҙар станциялар зонаһындағы радиация фонының көсәйеүенә килтергән, тип хәбәр итә донъя мәғлүмәт саралары. Станцияға яҡын зоналарҙа йәшәүсе халыҡ ашығыс рәүештә эвакуацияланa. Шул уҡ ваҡытта илдә әленән-әле ер һелкенеүҙәр ҡабатланып тора. Японияларғы көслө ер тетрәүе Ер шарының үҙ күсәренән 17 сантиметрға күсеүенә, йәғни Ер шарының шәберәк әйләнеүенә һәм был, үҙ сиратында, ерҙәге тәүлек әйләнәһенең 1,8 микросекундҡа кәмеүенә килтерҙе, тип хәбәр итә ғалимдар.

Бөгөнгө көндә Япония хөкүмәте ситуацияны контролдә тотоу турaһында хәбәр итһә лә, ил халҡы паникала, сөнки ер тетрәүе үҙен айырыуса көслө белдергән урындарҙа аҙыҡ-түлек һәм һыу етешмәй. Барлыҡ транспорт юлдарында ла тығындар, электр һәм поезд хәрәкәте күп урында туктатылған, аэропорттарҙа ла самолеттар осмай тиерлек. Май-яғыулыҡ станцияларында йөҙәр саҡрымдарға һуҙылған сират, ләкин барлыҡ автомобилдәрҙе лә яғыулыҡ менән тәьмин итеү мөмкинселеге юҡ. Илдә әленән-әле электр утын һүндерәләр, ә ҡайһы бер районларҙа ул бөтөнләй юҡ.

Цунами тулҡындары Рәсәйҙең Курил утрауҙарында ла булыу ихтималлығын күҙ уңында тотоп, унан 11 меңдән ашыу кеше эвакуацияланған. Шулай уҡ был ер тетрәүенең ауазы Америка Ҡушма Штаттарында, Австралияла һәм Көньяҡ Америкала, Мексикала һәм Яңы Зеландияла ла ишетелә. Гавай утрауҙарына барып еткән цунами тулҡындары ҡеүәтле булһа ла, урындағы халыҡтың был хәлгә алдан әҙерләнеүе арҡаһында Японияларғы кеүек ҡот осҡос фажиғәләр булмаған.

Иҡтисади үҫеш буйынса Япония Ер шарында өсөнсө урында тора. Һуңғы көндәрҙәге ваҡиғалар илдең иҡтисадына ла ныҡ зыян итте. Илдә нефть сығарыу ҡырҡа кәмене, күп кенә машиналар эшләү концерндары, компьютер һәм көнкүреш техникаһы етештереү заводтары үҙ эшен туҡтатты. Ләкин эксперттар, был тәбиғәт стихияһын йырып сығырға Япония үҙендә көс табасаҡ, тип белдерә. Шулай уҡ Японияларғы хәлдәр бөтә донъя иҡтисадына ла ауыр эҙемтәләр менән янамаҫ, тигән ышаныста улар.

Бөгөнгө көндә илдә хәл көсөргәнешле ҡала. Японияларғы тәбиғәт һәләкәте бер илде лә битараф ҡалдырманы. Уларҙың барыһы ла Японияға, һис икесекмәҫтән, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыуҙарын белдерҙе. Рәсәй яҡын арала шыйыҡландырылған газ һәм 6 мең мегаватт электр энергияһы бирәсәген хәбәр итте. Шулай уҡ Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре Японияға ярҙамға ебәрелде. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: Япония үҙ тарихында беренсе тапҡыр Рәсәйҙән ярҙам алырға риза булды.

Ер шарында йылына 200-ҙән ашыу тәбиғәт стихияһы булып тора, тип билдәләй ғалимдар. Үткән йөҙ йылда ғына ошондай һәләкәттәр арҡаһында Ер йөҙөндә 8 миллиардтан ашыу кеше һәләк булған. Элек кешелектең бар көсө былдай һәләкәттәрҙең эҙемтәләрен юҡ итеүгә генә ҡоролған булһа, хәҙер замана техникаһы ярҙамында тәбиғәт ебәргән иҫкәртеүҙәрҙе үҙ ваҡытында тотоп ала белеп, дөрөҫ эш итеү күп бәләләрҙән ҡотҡарасағына шик юҡ. Ләкин нисек кенә булмаһын, кешелек төрлө цунами, ер тетрәүҙәрен, вулкандар атылыуын туҡтатырға өйрәнмәгән әле. Беҙ әлегә тәбиғәт алдында көсһеҙ булып ҡалабыҙ.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

*Ғүмерҙең аҙағы ҡайғылы, ғүмер уртаһы бер нигә лә ярарлыҡ түгел, ә ғүмер башы көлкөлә.*

*(Вольтер).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠУМЫҘ БАЙРАМЫ...

## рух байрамы ла ул

**Ошо көндәрҙә Мәсетле районында III Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр конкурсы тамамланды. Республиканың ҡала-районларынан ғына түгел, ә күрше Ҡурған, Пермь, Һамар өлкәләренән дә оста ҡумыҙсыларҙы үҙ ҡорона йыйған был бәйге тураһындағы тәьҫораттары менән билдәле ҡумыҙсы, жюри ағзаһы Миңлеғәфүр ЗӘЙНЕТДИНОВ уртаҡлаша:**



-Халыҡта ҡумыҙҙы ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға ғына уйнай тигән ҡараш йәшәй. Мин быны менән килешмәйем. Башҡорт ир-егете бер ҡасан да өйҙә ултырмаған, ул йә берәй көсеп менән булышҡан, йә һөнәрҙә, йә яуҙа йөрөгән, шуға ла башҡорт илендә булған сит ил сәйәхәтселәренең яҙмаларында ҡумыҙ ҡатын-ҡыҙ һәм балалар өсөн тәғәйенләнгән музыка ҡоралы булараҡ сағылыш тапҡан. Ҡумыҙҙа элек-электән ир-ат та уйнаған, ул ҡурай, думбыра һымаҡ уҡ, үҙ монобоҙҙо тулы килеш һаҡлауға булышлыҡ итеүсе милли уйын ҡоралы. Быны ысынлап та шулай булыуын был конкурс та дәлилләй. Донъя кимәлендә үткән конкурстарҙа ла ир-ат ҡумыҙсылар әүҙемерәк һәм улар оҫтараҡ та уйнай. Виртуоз ҡумыҙсылар араһында көслө зат күберәк.

БР Мәҙәниәт министрлығы, Халыҡ ижады үҙәге, Мәсетле районы хакимиәте 2007 йылда башлап ойошторған был бәйгенең кимәле йылдан-йыл күтәрелә бара. Тәүге конкурста ҡатнашыусыларҙың уйын техникаһы ябайыраҡ булһа, хәҙер ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәрҙең оҫталығы арта. "Әпипә", "Карабай", "Хәтирә" кеүек еңелерәк көйҙәр менән бер рәттән, төрлө ҡатмарлыраҡ марштар йышыраҡ яңғыраны был бәйгелә. Тормошобоҙға интернеттың үтеп инеүе лә көйҙәр өйрәнеү, уларҙы табыу йәһәтенән эште күпкә еңеләйттерҙе. Конкурстың тағы ла бер үҙенсәлекле яғы бар: унда ҡатнашыусы тәүге турҙа уҡ ҡумыҙҙа импровизация һәм башҡорт көйөн музыкаль оҙатыуһыҙ башҡарырға тейеш. Ҡумыҙҙы баянға, ҡурайға йәки фонограммаға ҡушылып уйнаған саҡта ҡумыҙсының оҫталығын баһалауы ауыр, ә былай барыһы ла яҡшы ишетелеп тора.

Ҡумыҙҙа көй сығарырға өйрәнеүе, үҙен алып йөрөүе еңел дә, тик унда көй уйнай алырға өйрәнеү өсөн байтаҡ тир түгергә кәрәк. Бәйгесене баһалаған саҡта импровизацияға, имитацияға ла ҙур әһәмиәт бирелә. Ҡумыҙҙа таң атыуы, ҡоштарҙың уяныуы, бизрәләр сыңлауы, көтөү ҡитеүе, аттар сабыуынан алып, ямғыр яуыуын, тамсы тамыуын, ел иҫеүен ишеттерергә була, быны өсөн тәбиғәттә был тауыштарҙы үҙенә ишетә белергә генә кәрәк.Ҡумыҙҙа йөҙҙән ашыу миләт уйнай, әммә яҡуттарҙан башҡа уларҙың береһендә лә былдай бай импровизация ишеткәнем юҡ әлегә. Яҡуттарҙың төйәк иткән ерҙәрендә тәбиғәт шарттары ҡатыраҡ булыу сәбәпле, уларҙың уйынында башлыса ҡар, буран, данлыҡлы йылғалары Лена, аҡсарлаҡтар тауышы сағылып ҡала.

Конкурс сиктәрендә ойошторолған оҫталыҡ дәрестәренең дә файҙаһы ҙур икәнен беләм. Бында яңы алымдар өйрәнеп ҡайтыусы белгәндәрен үҙенең уҡыусыларына өйрәтә, шул рәүешле онотола төшкән сәнғәт төрө кире терғеҙелә һәм тулы ҡеүәтендә яңғыраш ала. Уҡытыусыһы ниндәй - уҡыусыһы ла шундай була. Ҡасандыр үҙҙәре конкурста ҡатнашыусы егеттәрҙең районларында балаларға ҡумыҙ серҙәрен өйрәтеүе ҡыуаныслы күренеш. Мәҫәлән, тәүге йылда гран-при яулаған Мәсетле егете Энгельс Ғәлиәкбәровтың уҡыусылары - "Өмөт" ҡумыҙсылар ансамбле быйыл 2-се урынға сыҡты. Ҡумыҙ хәҙер ярайһы ғына таралып өлгөрҙө, хәҙер беҙгә башҡорт өҙләү мәктәбен терғеҙеү өҫтөндә эшләргә кәрәк, тип иҫәпләйем.

Быға тиклем тимерҙән яһалған ҡумыҙ популяр булһа, быйыл ағас ҡумыҙҙа уйнаусылар ҙа күп булды. Халҡыбыҙҙа ҡаҙ ҡаурыйы, хайуан һөйәктәре, дөйә тояғынан эшләнгән ҡумыҙҙар булған, әммә уларҙы яһарға өйрәнеп ҡалыусылары булмағас, юҡҡа сыҡҡан. Шуға ла ағас ҡумыҙҙың кире тормошобоҙға, сәхнәбеҙгә әйләнеп ҡайтыуын хупларға ғына кәрәк. Мин үҙем тәүге тапҡыр яҡташым Кәфиә апай Ғарипованың ағас ҡумыҙында уйнап өйрәнеп, Австрияға конкурсҡа барып ҡайтҡайным. Хәҙер бындай ҡумыҙҙы республиканың башҡа төбәктәрендә лә эшләүсе оҫталар барлыҡҡа килде.

Иң йәш бәйгесе Арыҫлан Диновҡа ете йәш булһа, иң олоһона - Мәғмүзә Ғәлинаға 82 йәш ине. Конкурста 16 йәшкә тиклемге балалар һәм ололар айырым ярышты. Тәүге төркөмдә беренсе урынға Ләйсән Зәйнетдинова (Өфө), ансамблдәр араһында Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернаты, өлкәндәр араһында Рәғиҙә Сәхәүетдинова (Мәсетле районы), ансамблдәр араһында "Саҡматаш" халыҡ ҡумыҙсылар ансамбле (Баймаҡ районы) лайыҡ булды. Өҙләүселәр бәйгеһендә беренсе урынға Баязит Ғәйнуллин сыҡты, ә сараның төп бүләге - гран-при Ейәнсура районы егете Артур Ғайсаровҡа тапшырылды.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Халыҡ байрамы кимәленә күтәрелгән ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр бәйгеһе тамамланһа ла, күтәреүселәре булған саҡта был рухи һәм мәҙәни тәрбиә биреүсе музыка ҡоралы олоһоноң да, йәшенең дә күңеленә изгелек орлоҡтарын сәсеүен дауам итә әле. Бәләкәй генә ҡумыҙҙың ниндәй оло моңға һәм күңелдәрҙе елкендереү һәләтенә эйә булыуына шаһит булырға теләһәгеҙ, 28 апрель "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайына килегеҙ. Унда Миңлеғәфүр Зәйнетдинов һәм уның ижадташ дуҫтары баш ҡала тамашасыһына ҡумыҙ байрамы ойошторасаҡ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## БӘШӘЛКӘ, ЙӘКИ БУЛДЫҠҺЫҘ

**Отужа** - одежда һүҙенән, йәки барлыҡ булған затлы кейем. Беҙҙең ауыл Беренсе Этҡолдан 3 км алыҫлығында урынлашҡан. Күрше ауылға йомош менән барғанда кейенеп-яһанып алған кешегә ҡарата әйтелгән һүҙ.

**Лыҡбаһыр** - йомошҡа инеп, оҙаҡ ултырған кешегә әйтелә.

**Лып ята** - еләк күп, бешкән, аяҡ баҫырлыҡ та урын булмаған саҡта лып ята тип әйтәләр.

**Сырыф** - сырость һүҙенән. Ергә әйбер түшәп ултырырға, юғиһә, сырыфтан һалҡын алдырырһың.

**Үреше ҡыҫҡа** - һаран, күнеле тар кешегә әйтелә.

**Нужна ҡамыты** - нужна һүҙе был һүҙбәйләнештә ыҙа, яфа мәғәнәһендә.

**Украт** - бөхтә, килешле генә (аккуратный һүҙенән).

**Бәшәлкә** - булдыҡһыҙ тигәндә аңлата.

**Лыҡы** - күп, мәғәнәһеҙ һүҙҙәр һөйләгән кеше.

**Әргендек** - көсһеҙ, эшкә барыйы юҡ.

**Мөбөталаға ҡалыу** - бәләгә тарыу, аңғармаҫтан хаталаныу.

**Хөснә ӘНҮӘРИ.**
**Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бөхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЯҒЫҢДЫ ЙЫЛЫЛА...

## башыңды һалҡында тот

Ҡарттар ҡара аҡылға бай, йәштәр яңы аҡылға бай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлектәге ҡылыҡтарҙы йәшлектә ҡалдыр, ҡартлыҡтың үҙенең ҡылыҡтары етерлек.

**(И. Гете).**

Ғүмерҙең аҙағы ҡайғылы, ғүмер уртаһы бер нигә лә ярарлыҡ түгел, ә ғүмер башы көлкөлә.

**(Вольтер).**

Йәшлектә беҙ яратыр өсөн йәшәйбеҙ; ҡартлыҡта иһә йәшәр өсөн яратабыҙ.

**(Ш. Сент-Эвремон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт Будда үҙенең шәкерттәренә былай тип өндәшә: "Алыҫ юлға сыҡҡан кешене күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Бер мәл уның юлын киң, көслө ағымлы һыу бүлгән, ти. Был һыуҙың бирьяғында төрлө хәүеф-хәтәр, үлем янай, ә арьяғы тыныс, барлыҡ ҡурҡыныстарҙан азат икән. Тик көслө һыу ағымын аша сығыу өсөн кәмә лә, тege ярға тиклем һуҙылған күпер әҫәре лә юҡ, ти. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ, был кеше: "Ысынлап та, ағым бик киң һәм көслө, уны аша сығыу өсөн бер генә сара ла юҡ. Әгәр ҙә мин етерлек ҡамыш, ботаҡтар һәм япраҡтар ярҙамында һал төҙөп, шул һалға таянһам, өҫтәүенә аяҡ-ҡулдарымды эшкә екһәм, теге яҡ ярға мотлаҡ сығып етәсәкмен,"- тип уйлай. Һәм был кеше тап үҙе уйлағанса эш итеп, үҙе төҙөгән һал ярҙамында ҡаршы яҡ ярға йөҙөп сыға алған, тип фараз итәйек. Арьяҡҡа сығып еткәс, ул: "Ысынлап та, бик ҙур файҙа күрҙем был һалдан, сөнки ул миңә имен-аман арьяҡҡа йөҙөп сығырға ярҙам итте. Ҡайҙа әле, уны арҡама йөкләп алайым да, юлымды артабан дауам итәйем", - тип уйлай. Эште ошо рәүешле хәл итеп, кеше дөрөҫ ҡылыҡ ҡылырмы? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, уҡыусыларым? Кеше һал менән нисек эш итһә, дөрөҫөрәк булыр ине? Шәкерттәре Буддаға шулай яуап биргән: "Был кеше: "Һал миңә ҙур ярҙам күрһәтте, сөнки мин уның ярҙамында ҡаршы ярға имен-аман йөҙөп сыға алдым. Әммә мин артабанғы юлымды уны яр ситендә ҡалдырып дауам итәм!"- тип әйтергә тейеш. Нәҡ ошо осраҡта кеше һалға ҡарата хаҡ эш башҡарыр". "Эй, уҡыусыларым, - тигән шунда Будда, - мин дә һеҙгә үҙ тәғлимәтемде тик шул һал сифатында ғына тәҡдим итәм - нәҡ котолоу һәм моратығыҙға өлгәшеү ысулы рәүешендә, әммә мәңгелек милек сифатында түгел. Һәр тәғлимәт, ҡанун, ваҡытлы ҡарарҙар һалға оҡшаған икәнен аңлағыҙ. Ғүмер ахыры ярына барып етеү менән барлыҡ тәғлимәттәрҙе һеҙ бирьяҡта ҡалдырып китергә тейешһегеҙ... "**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирлек:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИКОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 1002